ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

27-2 август - сентябрь (урағай - һарысай)

2016

№35 (713)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Өйлә булам, тип...**

топ башына ултырма



5

**Доғаларымды ла...**

туған телемдә еткерәм Хоҙайға



8-9

**Әҙәм үә Һауа балалары хаҡында...**



11

**Онотолмай атай тәрбиәһе!**



12-13

**Һайлауҙар** 14

*"Минең уландарым үҫеп килә. Уларҙы тәрбиәләргә кәрәк. Мәҫәлән, мин улыма: "Күнекмәләр эшлә, сыныҡ!"- тип бойорам, ә үҙем диванда һуйҙайып ятам, ти. "Тәмәке тартма!" - тип тыям, үҙем тәмәке борҡотам, ти. "Улым, иҫерткес эсемлекте ауыҙыңа ала күрмә!" - тип өгөтләйем, үҙем иҫерекмен, ти. "Әсәйегеҙгә тупаҫ өндәшмәгеҙ!" , - тигән булам, ә үҙем уны һүгенеп тороп әрләйем, ти. Ошо тәрбиә буламы? Шуға ла мин уландарымды үҙемдең матур ҡылыҡтарым өлгөһөндә тәрбиәләргә кәрәк икәнде аңлайым. Баланы шулай тәрбиәләү бәхетле ҡартлығыңды тәьмин итеү өсөн кәрәк икәнен дә беләм. Һәр хәлдә, ҡартайып түшәктә ятҡанда бер стакан һыу алып бирер балаң эргәңдә булһын өсөн кәрәк был тәрбиә..."*

*Бер атай ауыҙынан.*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Рәсәй Президенты Владимир Путин "2019 йылда Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығын байрам итеү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Башҡортостан Башлығы иҫтәлекле дата хөрмәтенә "Башҡортостандың 100 йыллығына - 100 яңы объект" тигән киң күләмле акцияны тормошҡа ашырырға тәҡдим итә. Улар ниндәйерәк объекттар булырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?

***Сәйфулла ӘМИРОВ, "Көнгәк" гәзитенең баш мөхәррире:*** Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Мәләүезгә эш сәфәре барышында ҡалалағы "Спартак" стадионын Башҡортостандың 100 йыллығы уңайынан төҙөкләндереләсәк тәүге юбилей объекты буласағы тураһында белдергәс, оло ҡыуаныс кисерҙек, тиергә лә мөмкин. Сөнки 1960 йылда төҙөлгән стадион заманында СССР халыҡтары Спартакиадаһын да, ҡырсында спидвей буйынса СССР чемпионатын да, футбол, еңел атлетика, уҡтан атыу буйынса республика ярыштары кеүек сараларҙы ҡабул итте, артистар килһә - ҙур сәхнәгә лә әүерелде, ҡышҡыһын һырғалаҡ булып та хеҙмәт итте. Әммә бына 10 йылдан ашыу ул буш тора һәм емерелеүгә дусар. 2014 йылда стадионды төҙөкләндереү проекты эшләнһә лә, ул йә бер подрядсы, йә икенсеһе ҡулына күсеп йөрөп, йөк һаман да урынында ҡала килде. Быйыл мартта төҙөлөштө дауам итеү буйынса дәүләт экспертизаһының ыңғай һөҙөмтәһе алынған, тип ишеттек. Реконструкция административ-көнкүреш корпусын төҙөүҙе, яһалма футбол майҙаны булдырыуҙы, йүгереү юлы һалыуҙы, 500 урынлыҡ трибунаны, яҡтыртыуҙы, ҡоймалауҙы, төҙөкләндереүҙе күҙаллай һәм бының өсөн, әлбиттә, дәүләттең финанс ярҙамы ла кәрәк. Рөстәм Зәки улы белдереүенсә, төҙөлөш эштәренең һәм ҡорамалдарҙың дөйөм хаҡы 83 миллион һум тәшкил итәсәк. Башланғыс бар, ул артабан да дауам итеп, яҡшы кимәлдә башҡарылырға тейеш, сөнки ҡала өсөн шундай ҙур һәм техник яҡтан йыһазландырылған бер база кәрәк икәне шикһеҙ.

***Фәнүзә ЯНОВА, хужабикә:*** Башҡортостаныбыҙ күп милләтле булһа ла, уның 100 йыллығын билдәләгәндә республикаға, улай ғына ла түгел, Рәсәйҙе федератив дәүләткә әйләндереүҙә тәүге нигеҙ ташын һалыусылар башҡорттар булыуын да онотторға ярамай. Тимәк, бында ошо юлбашсыларҙың исемдәре мәңгеләштерелһен өсөн дә эштәр башҡарылырға тейеш. Мәҫәлән, нисәмә йылдар инде Өфөлә Зәки Вәлидигә һәйкәл эшләү тураһындағы мәсьәлә хәл ителмәй. Икенсе яҡтан, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Башҡорт Совет Автономияһының 100 йыллығына 100 шәхестең исемен мәңгеләштереү тәҡдиме менән сыҡҡайны. Ошо ике теләкте берләштерергә лә мөмкин бит. Мәҫәлән, мин исеме үк башҡорт иле икәнен ҡысҡырып торған республиканың баш ҡалаһында милли колоритлы, бер нисә объектты - ҡунаҡхана, милли кухня, милли мәҙәниәт, әҙәбиәт, сәнғәт музейҙарын һ.б. берләштергән, барлыҡ башҡорт ойошмаларын үҙ ҡанаты аҫтына туплаған Башҡорт йорто комплексы булыуын теләр инем. Сөнки Конгресс-холл заманында ошо маҡсатта төҙөлә башланы ла, һуңынан глобаль үҙгәрештәр шауҡымында бөтөнләй икенсе маҡсатта файҙаланыла башланы. Уның бөгөнгө ҡулланылышы ла насар түгел, әммә Башҡорт йорто тураһында ла уйларға кәрәк. Минең күҙаллауымса, Башҡорт йорто комплексы территорияһына Башҡортостан Республикаһы башында тороусыларҙың һәйкәлдәрен ҡуйыу ҙа, уларҙың тыуған ауылдарында булдырылған музейҙарҙағы экспонаттарҙың күсермәләрен килтереп, музей ойоштороу ҙа шәп булыр, баш ҡалаға рәсми визит менән килеп, райондарға сығыу мөмкинлеге булмаған вәкилдәр баш ҡалала ғына Рәсәй Федерацияһына тәүге нигеҙ ташын һалыусыларҙың эшмәкәрлеге менән танышыу мөмкинлегенә эйә булыр ине. Һәм был Башҡорт йорто комплексы төҙөләсәк 100 объект исемлегенең иң башында торорға тейеш.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## АФАРИН!

# ХАЙРАН ИТЕР ҺЫНДАР...

**Өфөлә хайран ҡалып тамаша ҡылып йөрөрлөк тағы бер зауыҡлы мәҙәни урын барлыҡҡа килде: ул "ArtTerria" тип аталған заманса скульптура аллеяһы.**

Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана янында, Ленин урамындағы йәйәүлеләр зонаһында бейеклеге ике метрға яҡын 13 яңы арт-объект теҙелеп киткән. Уларҙың барыһы ла Учалы районы Мансур яҡылығынан килтерелгән граниттан яһалған. "ArtTerria" заманса скульптура аллеяһы Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы һәм Өфө хакимиәте ярҙамында "Мираҫ" сәнғәт галереяһы башланғысы буйынса ойошторолған скульптура симпозиумы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килде. Сарала Грузия, Франция, Болгария, Көньяҡ Корея, Япония илдәренән һәм Санкт-Петербург, Мәскәү, Өфө ҡалаларынан 13 скульптор ҡатнашты.



12+

✓ Урал батыр еренең аҫабаһы башҡорттоң тарихын, мәҙәниәтен, телен данлау йүнәлешендә бер этәргес булып торорға тейеш. "Урал батыр" эпосы геройҙары һынландырылған музей-комплекс төҙөлөүе лә маҡсатҡа ярашлы булыр ине.



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ИЛДӘ ТЫНЫСЛЫҠ БУЛҺЫН!

***Радик ХӘКИМЙӘН, Башҡортостандың Яҙыусылар союзы ағзаһы, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, шағир***: Ил өҫтөнә фажиғә килгәндә, һуғыш осоронда тыуып үҫкән быуын вәкиле мин. Бер шиғырымда:

*Беҙҙең тыуыу шатлыҡ булдымы икән,*
*Тыуғанбыҙ бит һуғыш башланғанда.*
*Халҡым өсөн иң ҡайғылы мәлдә,*
*Ил өҫтөнә дошман ташланғанда,* - тип яҙғайным. Халҡыма әйтер һүҙем бер - заман нисек кенә ауыр булмаһын, тыныслыҡ һаҡлап, тырышып эшләп, түҙеп йәшәргә кәрәк. Бына беҙҙең бала саҡ, үҫмер йылдары шул тиклем ауыр мәлгә тура килде. Икмәккә, картуфҡа туймай, йүнле кейем күрмәй үҫтек. Шуға ла иң тәүҙә, ризыҡ мул булһын, тигән маҡсат менән йәшәнек. Унан инде, белем алырға, уҡып кеше булырға, илгә хеҙмәт итергә тигән көслө ынтылыш менән йәшәнек. Белем алыуы ла еңел түгел ине ул мәлдәрҙә, сөнки ауыл ерендә бер класта утыҙ бишләп бала уҡый, дәреслектәр етешмәй торғайны. Бөтә класҡа ике генә рус теле, химия, математика дәреслеге бирелә. Беҙ сиратлап шул китаптарҙы уҡыйбыҙ, өйгә эштәрҙе үтәп барабыҙ. Бөгөн бит бындай хәлде күҙ алдына ла килтерерлек түгел! Китаптар кәштә тулы, дәреслектәр етерлек, белем алырға теләгең булыуы ғына шарт.

Әммә тормош көтөүе еңелләшеп, бөтә уңайлыҡтар тыуҙырылһа ла, кешегә күңел тыныслығы етмәй. Донъялағы тетрәндергес хәл-ваҡиғалар тураһында көн дә ишетеп-күреп торабыҙ, киләсәккә ҡарата ышаныс, өмөт һүнеп ҡуя ҡай саҡ. Хәҙер хатта ҡайҙалыр беҙ белмәгән ерҙә машина менән машина сәкәшеүен дә телевидение, радио аша бөтә донъя белә. Элек ниндәй генә киҫкен ваҡиғалар булһа ла, халыҡҡа асыҡтан-асыҡ ишеттерелмәй торғайны. Бер яҡтан, был илдең сере булһа, икенсе яҡтан, халыҡ тыныс йәшәһен өсөн дә шулай эшләнгәндер. Ҡыйралыш, фажиғәләр хаҡында ишетеп, тетрәнеп торған кешенең эше уңышлы булмай. Бөгөн беҙ тап ошондай шарттарҙа йәшәргә, эшләргә, ижад итергә мәжбүрбеҙ. Шулай ҙа, борондан ауырлыҡтарҙы еңеп, үткәреп ебәрергә күнеккән башҡорт халҡының рухы, түҙемлеге, ихтыяр көсө киләсәккә өмөт менән ҡарарға ярҙам итә. Милләттәштәрем бына ошолар тураһында һәр ваҡыт иҫендә тотһон, илгә ниндәй генә көрсөк килһә лә, уны еңеп сығырына ышанып йәшәһен. Бының өсөн тәү сиратта, әлбиттә, алдыңа маҡсаттар ҡуйып, оҙайлы һәм ҡыҫҡа пландар ҡороп, тормош көтөргә кәрәк. Маҡсатлы кеше бер ҡасан да ауырлыҡтарға бирешеп, юғалып ҡалмай ул. Сөнки уның юлын яҡтыртҡан, тормошона мәғәнә биргән, һәр ваҡыт ниҙер эшләргә этәреп торған маяғы була. Беҙҙең быуын кешеләре тап бына шундай маҡсатлы, ынтылышлы булғанлыҡтан та илебеҙ алдынғылар рәтенә баҫты.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**
**(Авторҙың шиғырҙарын 11-се биттә уҡығыҙ).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Рәсәй Президенты Владимир Путин "2019 йылда Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығын байрам итеү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Башҡортостан Башлығы иҫтәлекле дата хөрмәтенә "Башҡортостандың 100 йыллығына - 100 яңы объект" тигән киң ҡоләмле акцияны тормошҡа ашырырға тәҡдим итә. Улар ниндәйерәк объекттар булырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?***

**(Башы 1-се биттә).**

***Миңһылыу АБДУЛЛИНА, уҡытыусы:*** Нисәмә йылдар ҡаҙыныу эштәре алып барылған "Өфө-2" ҡаласығында боронғо Башҡорт ҡалаһы асыҡ һауалағы музей комплексы ҡалҡып сығырға тейеш. Әгәр ошо мөмкинлектән файҙаланып, бығаса тормошҡа ашмай килгән ниәттәрҙе үтәп ҡалмаһаҡ, тарих та, киләсәк тә беҙҙе ғәфү итмәҫ. Унан һуң, Башҡортостан 2020 йылда Бөтә донъя фольклориадаһын үткәреү хоҡуғын алды. Уға әҙерлек тә бөгөн үк башланырға, ә республика юбилейы бөйөк Урал батыр еренең аҫабаһы башҡорттоң тарихын, мәҙәниәтен, телен данлау йүнәлешендә бер этәргес булып торорға тейеш. Бының өсөн "Урал батыр" эпосы геройҙары һынландырылған асыҡ һауалағы музей-комплекс төҙөлөүе лә маҡсатҡа ярашлы булыр ине.

***Гөлнур ҠОЛҺАРИНА, Бөтә Рәсәй билбау көрәше федерацияһы ағзаһы:*** Республикала милли көрәш киң таралыу алған, үҙ федерацияһы булған спорт төрө һаналһа ла үҙенең айырым бинаһы (комплексы) юҡ. Ә ҡайһы бер республикаларҙа махсус Көрәш комплекстары төҙөп ултыртҡандар. Алыҫ йөрөргә кәрәкмәй, миҫал өсөн шул уҡ Татарстан Республикаһын килтерергә була. Уларҙағы комплекстарҙа төрлө кимәлдәге чемпионаттар һәм турнирҙар ойоштороу өсөн ҙур зал, дөйөм физик әҙерлек үтеү, күнекмәләр һәм уҡыу өсөн залдар, хатта көрәш музейҙары урынлашҡан. Һуңғы ваҡытта халҡыбыҙҙың милли спорт төрҙәренә һәм уйындарына иғтибар арта башланы, яңыраҡ уҡтан атыу буйынса ярыштар тергеҙелде. Бәлки, Көрәш һарайын (Дворец борьбы) айырым ғына асыу мөмкинлеге булмаһа, уны Милли спорт төрҙәре һарайы (Дворец национальных видов спорта) тип атарға булыр ине. Был саҡта халҡыбыҙҙың барлыҡ спорт төрҙәре ойошмалары бер ҡыйыҡ аҫтында тупланып, улар кемгәлер өйҙәш булып түгел, ә үҙ бинаһында үҙҙәре хужа булып йәшәр, эшләр, яңынан-яңы ҡаҙаныштары менән ҡыуандырып торор ине, тип уйлайым.

***Дамир ЙӘНЕКӘЙЕВ, инженер:*** Башҡортостан халҡының 40 проценты самаһы ауылда йәшәй, республиканың юбилейы уңайынан төҙөләсәк йәки тергеҙеләсәк 100 объект исемлегенә ауыл халҡының мәнфәғәтен күҙ уңында тотҡан төҙөлөштәр ҙә булыуы мөһим. Юҡһа, ауылдарҙағы һуңғы социаль әһәмиәтле учреждениелар ҙа ябылып, күпме кеше эшһеҙ ҡалды, шул арҡала ҡыҫҡартыуға эләккән эшкә яраҡлы категория сит төбәктәргә хеҙмәт итергә мәжбүр. Ә был бер ҙә беҙҙең файҙаға түгел - көс башҡа төбәктәр файҙаһына түгелә, республика халҡы тарафынан түләнгән һалым икенсе субъекттар ҡаҙнаһын байыта. Әгәр ауылдарҙа ябылған объекттар - мәктәптәр, клубтар - ҡабаттан асылһа, бына был, исмаһам, юбилейға ҙур бүләк булыр ине. Яңы объекттар төҙөү йәки реконструкция эштәре алып барыу тураһында һөйләгәндә ҡалаларҙы ғына түгел, ауылды ла күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай, сөнки юбилей бит ҡала халҡы өсөн генә түгел, тотош республика өсөн яңы уңайлыҡтар һәм мөмкинлектәр булдырып ҡалыу сараһы ла.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**1 июлдән 30 августа тиклем 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда яҙылыу бара. Хаҡтар 2016 йылдың икенсе яртыһындағыса, йәғни 50665 индекслы гәзитебеҙгә 574 һум 32 тингә яҙыла алаһығыҙ.**



● Быйылғы икенсе ярты йыллыҡ өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгәндәр 15 сентябргә тиклем яҙылып, гәзитте октябрҙән алдыра ала. 3 айға яҙылыу хаҡы - **287 һум 16 тин**.

● Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең **бүләктәргә** лайыҡ була килә. Июль-августа 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән **20 кеше 2017 йылға "Башҡортса дини календарь"**, **өс кеше Флүр Ғәлимовтың "Аҙғын тәүбәһе"**, шулай уҡ башҡа китаптарға лайыҡ буласаҡ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - **258 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **258 һум**.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән 2016 йылдың беренсе кварталында халыҡтың йән башына йәшәү минимумы 8839 һум күләмендә билдәләнде. Эшкә һәләтле халыҡ өсөн ул - 9363, пенсионерҙарға - 7167 һәм балаларға 9018 һум тәшкил итә. 2016 йылдың беренсе кварталында халыҡтың йән башына йәшәү минимумы 8691 һум тәшкил итте. Эшкә һәләтле халыҡ өсөн ул - 9205, пенсионерҙарға - 7061 һәм балаларға 8856 һум булды.

✓ Башҡортостан федераль ҡаҙнанан граждандарҙың айырым категорияларын рецепт буйынса дарыуҙар, медицина әйберҙәре, дауалаусы туҡланыу продукттары менән тәьмин итеү өсөн субвенция аласаҡ. Рәсәй Хөкүмәтенең бойороғона ярашлы, төбәккә ошо маҡсатта өҫтәмә рәүештә 625 миллион һумдан ашыу аҡса бирелә.

✓ 2001 йылдан башлап илдә ашлыҡҡа эске хаҡтарҙы тотороҡландырыу өсөн тауар интервенциялары үткәрелә. 2009 йылдан Берләшкән иген компанияһы интервенция үткәреү буйынса дәүләт агенты булып тора. Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, быйыл 15 районда 29 хужалыҡ иген интервенцияларында ҡатнашырға һәм фондҡа 185 мең тоннанан ашыу иген тапшырырға ниәтләй.

✓ Ишембай ҡалаһына "Хеҙмәт ҡаһарманлығы һәм дан ҡалаһы" тигән халыҡ-ара почетлы исем бирелде. Был ҡарарҙы Дәүләт-ара герой-ҡалалар союзы президиумы ҡабул итте. Документҡа ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы, осоусы-космонавт Виктор Горбатко ҡул ҡуйҙы.Ишембай "Ватан алдындағы хеҙмәттәре, фашист илбаҫарҙарына ҡаршы көрәштә күрһәткән батырлығы, хеҙмәт ҡаһарманлығы өсөн, һәм Икенсе донъя һуғышы тамамланыуға 71 йыл тулыу уңайынан" ошо маҡтаулы исемгә лайыҡ булды. Ишембай менән бер рәттән Златоуст, Улан-Удэ, Фрязино ҡалаларына ла шундай исем бирелде.

✓ 2017 йылғы Берҙәм дәүләт имтиханы расписаниеһы билдәле булды. Төп этап 26 майҙан 30 июнгә тиклем уҙа. 14 марттан 7 апрелгә тиклем имтиханды ваҡытынан алда тапшырырға мөмкин. Расписаниеның проектын Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт әҙерләгән. 31 августа тиклем ведомство repina@obrnadzor.gov.ru электрон адресына расписаниеның проектына тәҡдимдәр ҡабул итә.

✓ Бик матур итеп ситтәге капиталды саҡырып та ҡараны ил етәкселеге, амнистия иғлан итте, тик аҡсаһының аҙ ғына өлөшөн булһа ла Рәсәй һаҡлыҡ банкылырына килтереп һалыусы булдымы икән - ишеткән юҡ әле.



УҠЫП СЫҠТЫМ...

# КЕМ ҠУЛЫНДА КӨС?

**"Киске Өфө" гәзитенең 34-се һанындағы "Тураһын әйткәндә..." рубрикаһында баҫылып сыҡҡан "Осон оска ялғарғамы, лайыҡлы эш хаҡы талап итергәме?" тигән мәҡәләне уҡып сыҡҡас, шуға өҫтәп, мин дә ҡайһы бер фекерҙәремде белдереп китергә уйланым, сөнки "Киске Өфө"нөң был һаны баҫылып сыҡҡас, шәмбе - 20 августа Мәскәүҙә Бөтә Рәсәй уҡытыусылары кәңәшмәһенең йомғаҡлау ултырышында Рәсәй Премьер-министры Д.Медведев ҡатнашты һәм мәғариф өлкәһендәге ҡайһы бер мәсьәләләргә асыҡлыҡ индерҙе.**



Әйткәндәй, пленар кәңәшмә башланыр алдынан Хөкүмәт башлығы уҡытыусыларҙы РФ Мәғариф һәм фән министрлығының яңы етәксеһе Ольга Васильева менән таныштырҙы. Ольга Юрьевна ваҡытында хор дирижеры белеме алһа, аҙаҡ тарих факультетын һәм Дипломатия академияһын тамамлай. Рус православиеһының илһөйәрлек эшмәкәрлеге буйынса докторлыҡ диссертацияһы яҡлаған. Төрлө урындарҙа эшләй. Министр вазифаһына Д. Медведев тәҡдиме менән күсерелә, уға тиклем РФ Президенты хакимиәте хеҙмәткәре булып эшләй, илһөйәрлек тәрбиәһе мәсьәләләре менән шөғөлләнә; карьераһы дин, православие, сиркәү тематикаһы менән бәйле. Ҡайһы бер сығанаҡтар О. Васильеваның эшмәкәрлегендә консерватив ҡараштар өҫтөнлөк итеүен билдәләй.

Шулай итеп, Премьер Д. Медведев Мәскәүҙә булып үткән август кәңәшмәһендә тағы ниндәй яңы фекерҙәр әйтте һуң? Тәү сиратта ул уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәреү кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Дәүләттең бурысын ул мораль һәм матди яҡтан да уҡытыусы эшенең абруйын арттырыуға "максималь дәрәжәлә булышлыҡ итеүҙә" күреүен билдәләне. Уҡытыусыларҙың эш хаҡтары төбәк буйынса уртаса килемгә еткерелгән һәм аҙна һайын тип әйтерлек танышып барған отчеттарҙан күренеүенсә, "ул дөйөм һәм тотош алғанда ярайһы кәнәғәтләнерлек", тине Премьер. Росстат мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙә уҡытыусыларҙың уртаса эш хаҡы - айына 32 мең һум тәшкил итә (Алтайҙа - 17 меңдән алып, Чукоткала - 76 меңгә тиклем), Мәскәү уҡытыусылары иһә ошо йылдың ғинуар - март осоронда айына 66,3 мең хеҙмәт хаҡы алып эшләгән. Ә шулай ҙа был йәһәттән бухгалтериялар эшендә асыҡлыҡ һәм аңлайышлылыҡ етешмәүе билдәләнде. Уҡытыусыларға эш хаҡы иҫәпләүҙә улар өсөн уңайлы моделде һайлау, ә, бәлки, элекке системаға ҡайтыу ихтималлығы хаҡында ла һүҙ барҙы, ләкин барыбер мәсьәләгә нөктә ҡуйылманы. Уны бер кем: министр ҙа, губернатор ҙа, мәктәп директоры ла ҡуя алмай әлегә, ә уҡытыусылар үҙҙәре генә хәл итә ала, үҙҙәренә ҡулай булғанса, һәм беҙ уны иҫәпкә аласаҡбыҙ, тине Д. Медведев кәңәшмәлә. Әйткәндәй, отчеттар тураһында ла икеле-микеле фекер ҡалды. Уҡытыусы отчет төҙөү менән шөғөлләнергә түгел, ә уҡытырға тейеш, тине Премьер. Асыҡланыуынса, уҡытыусылар һәм мәктәп директорҙары яҙған отчеттарҙың 80 проценты уҡыу-уҡытыу эшмәкәрлегенә бөтөнләй ҡағылмай булып сыҡты, быға сик ҡуйырға ваҡыт. "Ләкин отчет эшен бөтөнләй туҡтатмағанда ла, уны сикләргә кәрәктер", тине Хөкүмәт етәксеһе.

"Уҡытыусылар шундай власҡа эйә - был хаҡта премьер-министрҙар хыяллана ғына ала", тип әйткән Черчилль, тип кинәйәләне Д. Медведев. "Гәҙел һүҙҙәр, ләкин үҙ яғымдан мин, илебеҙ Хөкүмәте мәктәптәрҙе үҫтереү һәм уҡытыусыларға ярҙам итеүгә үҙ ҡулындағы аҙ булмаған власты файҙаланасаҡ, тип ышандырам тине. "Шикләнмәгеҙ, был власты беҙ файҙаланасаҡбыҙ", тип ҡабатланы ил Премьеры. Хәйер, йәшәрбеҙ - күрербеҙ, шулай бит, йәмәғәт?

**Гәҙилә ИЛБУЛОВА,**
**уҡытыусы.**

---

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу " һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

---

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# БАЙЛЫҠ - БЕР АЙЛЫҠ

**"Киске Өфө" гәзитенең 33-сө һанында баҫылып сыҡҡан "Ишара"ны ҡыҙыҡһынып уҡып сыҡтым. Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай, халҡыбыҙҙың романдарға торошло, киң һәм тәрән мәғәнәле, шул уҡ ваҡытта ике-өс кенә һүҙ эсенә лә һыйҙырып әйтелгән тос аҡылын кәүҙәләндергән "Кәфендең кесәһе юҡ" тигән әйтемде бөгөнгө көнөбөҙгә ҡарата бик урынлы ҡулланған, һай, афарин!**

Әлбиттә, автор беҙҙең эраға тиклем үк йәшәгән Македонский-Зөлҡәрнәй хаҡындағы хәлде бәйән итә, ләкин уны уҡыған уҡыусы, һис шикһеҙ, бөгөнгө ғибрәттәрҙе күҙҙән үткәрә. Бына бит, журналист оҫталығы: бөгөнгө сереп байыусы әҙәмдәр хаҡында бер һүҙ ҙә әйтмәйенсә лә уларҙың барыһын да беҙҙең күҙ алдына теҙҙе лә баҫтырҙы автор. Ҡыйыш тоҫҡап, тура атыу ана шул була инде! Быныһы ла халҡыбыҙ кинәйәһе. Бөгөнгө байҙар менән һоҡланырға, ғорурланырға ла булыр ине ул, юғиһә, беҙ уларҙы гел генә әрләйбеҙ, нәфрәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Һун, ә бит башҡаса мөмкин дә түгел, сөнки улар Македонскийҙың аяҡ бармаҡтары тырнағына ла тормай! Йыйын уғрылар, илде талауcылар, тәүбә-тәүбә! Ул тиклем миллиардтарҙы ниңә йәшереп, сит ил банкыларында тыҡшырып тота икән улар? Ил мәнфәғәтенә эшләһен ине хет ул миллиардтар, аҡмаһа ла, тамып торор ине, бәлки, дөйөм файҙаһына булыр ине. Быға күрә. Бына ошонда ла хатта ҡара эселеген күрһәтә улар, сөнки урланған аҡсаны кире илгә ҡайтарыуҙан шыртлайҙар. Ҡараҡтың бүрке янасаҡ та баһа ул саҡта. Бик матур итеп ситтәге капиталды саҡырып та ҡараны ил етәкселеге, амнистия иғлан итте, тик аҡсаһының аҙ ғына өлөшөн булһа ла Рәсәй һаҡлыҡ банкыларына килтереп һалыусы булдымы икән - ишеткән юҡ әле. Улар фәҡәт сит ил капиталын арттырыуға эшләйҙәр.

Һуңғы ваҡыт закон һаҡсылары хаттин ашып байыған бер нисә губернаторҙы ҡолағынан һөйрәп аҡса һаҙлығынан сығарып ултыртты ла ул рәшәткә артына, тик улар, әйтеүемсә, ришүәтсе һәм законһыҙ юл менән байыусы чиновниктарҙың бер нисәүһе генә. Ә илдә күпме улар - берәү ҙә әйтә алмай. Уларҙы ҡолаҡтарынан һөйрәп сығарыу эше генә туҡталып ҡалмаһын инде, тәфтишселәребеҙгә Хоҙай ныҡлыҡ бирһен. Либераллек ғәфләтә килеп баҫа күрмәһен, тип теләйек.

Мине шулай ҙа бер һорау борсой: ана шул фаш ителгән уғрыларҙың миллиардтары конфискациялана микән ул? Әллә ҡурҡытыр өсөн генә тартып алына ла кире эйәләренә биреләме икән? Шуныһы аптырата: саманан ашып байыуҙың ни мәғәнәһен күрә икән был ҡомһоҙҙар? Ярай, үҙенең, балаларының, уларының балаларының ғүмерҙәренә етерлек тупланды ла, ти, аҡса, тик шунан артығы нимәгә кәрәк икән - яуап таба алмайым. Ябай халыҡтың социаль хәленә ҡарағанда, байҙарҙың былдай самаһыҙлығы менән килешеп булмай. Әлегесә, кәфендең кесәһе юҡ икәнлеген улар, бәлки, белмәйҙәрҙер?

**Фәрит ИШБУЛДИН,**
**хеҙмәт ветераны.**

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓10 сентябрҙә Өфөлә яҡшы йолаға әүерелгән "Хәрби бейеклек" патриотик йыр фестивале уҙа. Был юлы сара Салауат Юлаев майҙанында ойошторола. "Хәрби бейеклек" фестиваленә илдең төрлө ҡалаларынан башҡарыусылар һәм ҡунаҡтар килә. Байрам киске сәғәт 6-ла башлана, тамаша бушлай.

✓Өфөлә яңы Затон күперендә асфальт түшәлә. Тиҙҙән автомобилдәр ошо күперҙән ҡалаға инә башлаясаҡ. Ҡала хакимиәтендә хәбәр итеүҙәренсә, әлеге мәлдә 836 метрҙың 500-ҙә эштәр башҡарылған. Бөгөн Затон күпере республиканың ҙур инфраструктура проекты һанала. Объект составында 61 метр оҙонлоғонда йәйәүлеләр өсөн ер өҫтө үткәүеле төҙөү ҡаралған.

✓Өфөлә юмористик әҫәрҙәргә конкурс иғлан ителде. Уны ойоштороусылар - Башҡорт дәүләт филармонияһы һәм "Ҡыҙыҡ һәм Мәҙәк" сатира һәм юмор театры. Әҫәрҙәр монолог, диалог, скетч йәки интермедия жанрында булырға мөмкин. Эштәр 25 августан 25 октябргә тиклем ҡабул ителә. Еңеүселәрҙе аҡсалата призлар көтә. Электрон почта: bayim@mail.ru ("Ҡыҙыҡ һәм Мәҙәк" конкурсына тигән билдә менән). Белешмә өсөн телефон: 8-961-047-72-02.

✓9 сентябрҙә Сибайҙа IV Төбәк-ара мөнәжәт башҡарыусылар конкурсы ойошторола. Бәйгелә мөнәжәт, нәсихәт, Мәүлит Ямалетдинов эшкәртеүендә Ҡөрьән сүрәләре номинациялары буйынса еңеүселәр билдәләнә. Конкурсты ойоштороусылар - Республика халыҡ ижады эргәһендәге Сәсәндәр мәктәбе, Сибай ҡалаһы хакимиәте, Сибай сәнғәт колледжының "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе, "Агиһәй" йәмәғәт ойошмаһы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты.

✓Ошо көндәрҙә "Матбуғат донъяһы" нәшриәтендә филология фәндәре кандидаты Нияз Сәлимовтың "Халыҡ сәсәне Вәлиулла Ҡоломбәтов" тигән китабы донъя күрҙе. Китап танылған һүҙ оҫтаһы, мәғрифәтсе Вәлиулла Ҡоломбәтовтың тыуыуына 135 йыл тулыуға бағышланған. Йыйынтыҡта сәсәндең тормош һәм ижад юлына байҡау яһалған, уның шиғырҙары, ҡобайырҙары, йырҙары һәм әкиәттәре ингән. Сәсән-мәғрифәтсенең бай мирасы тупланған йыйынтыҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, студенттар һәм фольклор менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн файҙалы буласаҡ.

✓ Өфө медицина колледжын үҙ бурыстарына яуапһыҙ ҡараған ойошмалар етәкселәренә өлгө итеп килтерергә мөмкин. Бында парковка урыны ла, уңайлы пандус та бар.



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҺӘР КЕМГӘ УҢАЙЛЫ БУЛҺЫН!

**Өфөлә "Уңайлы мөхит" дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу дауам итә. Уның маҡсаты - хәрәкәт итеүе ауыр булған граждандар төркөмөнә торлаҡ йорттарға һәм социаль инфраструктура объекттарына инеү уңайлылығын тәьмин итеү.**

Был йәһәттән йәмәғәт хәрәкәте активистарын йәлеп итеп, Өфө ҡала хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм тәҙәкләндереү идаралығы Р. Зорге урамындағы объекттарҙа сираттағы шундай тикшереү уҙғарҙы. Идаралыҡ начальнигы Ғәфүр Ҡылысбаев белдереүенсә, барлыҡ объекттарҙа ла тиерлек етешһеҙлектәр бар. Бик йыш пандустар ауышлығының нормативҡа тура килмәүе, парковка урындарының һәм яндауырҙарҙың булмауы билдәләнә. Ойошмалар етәкселәре был мәсьәләгә күҙ йомоп ҡарай.

Өфө медицина колледжын үҙ бурыстарына яуапһыҙ ҡараған ойошмалар етәкселәренә өлгө итеп килтерергә мөмкин. Бында парковка урыны ла, уңайлы пандус та бар. Ауыр хәрәкәт итеүселәр өсөн айырым инеү урыны булдырылған, унда персоналды саҡырыу төймәһе лә эшләй һәм персонал шунда уҡ ярҙамға ашыға. Бинаға ингәндә насар күреүселәрҙең хәрәкәте уңайлылығы өсөн тактиль плиткалар һалынған, колледжда нимә ҡайҙа урынлашҡанын күрһәтеүсе мәғлүмәт таблоһы ҡуйылған. Беренсе ҡатта хатта махсус йыһазландырылған санузел бар.

Ҡала мөхите барыһы өсөн дә уңайлы булырға тейеш. Хәрәкәт итеүе ауыр булған категорияны беҙ физик мөмкинлеге сикләнгән төркөм тип әйтергә күнекһәк, был исемлеккә балаларҙы ла, оло йәштәгеләрҙе лә, ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙҙарҙы ла, ауыр йөк күтәреүсене лә, мәсәлән, сәйәхәтсене лә индерә алабыҙ. Тимәк, уңайлы мөхит барыһына ла кәрәк. Шуға күрә хәҙер һәм киләсәктә объекттарҙы реконструкциялағанда, яңы объекттар төҙөгәндә бөгөнгө етешһеҙлектәрҙе күҙ уңында тотоп, уларҙы булдырмау зарур.

Әйткәндәй, ауыр хәрәкәт итеүсе граждандарҙың биналарға һәм ҡоролмаларға тотҡарлыҡһыҙ инеүе буйынса талаптар төҙөлөш нормалары һәм ҡағиҙәләре тупланмаһында бар һәм уны үтәмәү административ яуаплылыҡҡа килтерә. Шулай уҡ махсус парковка урындары булмау өсөн дә 50 мең һумға тиклем штраф ҡаралған.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР

# ӘҘӘМСӘ БУЛМАНЫ БЫЛ!




**7 августа Халыҡ-ара паралимпия комитеты Бөтә донъя допингка ҡаршы агентлыҡ комиссияһының докладын өйрәнгәндән һуң Рәсәй спортсыларын Рио-де-Жанейролағы Паралимпия уйындарынан ситләтеү тураһында ҡарар ҡабул итте. Рәсәй йыйылма командаһы составында Башҡортостандан 13 спортсы ҡатнашырға тейеш ине.**

Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Халыҡ-ара паралимпия комитетының Рәсәй йыйылма командаһын Рио-де-Жанейролағы Паралимпия уйындарынан ситләтеү тураһында ҡарарын кешелекһеҙлек тип атаны.

- Халыҡ-ара паралимпия комитетының бер ниндәй дәлилһеҙ Рәсәй йыйылма командаһын уйындарҙан ситләтеү тураһында ҡарары - кешелекһеҙлек. Ул юридик принциптарға ла, дөйөм халыҡ әхлағына ла яуап бирмәй. Юғары ҡаҙанышлы спорт паралимпиясылар өсөн ярыш ҡына түгел. Спортта еңеү яулап, улар яҙмышҡа саҡырыу ташлай. Беҙ ошо килеп тыуған хәлдә ентекле тикшерергә тейешбеҙ. "Таҙа" спортсыларҙы халыҡ-ара кимәлдә яҡлау механизмдарын булдырырға кәрәк, - тине республика етәксеһе. - Башҡортостан Паралимпия хәрәкәтенең данлы традициялары бар. Спортсылар һәм тренерҙар уларҙың хеҙмәттәрен шик аҫтына ҡуйырға маташыусыларға еңеүҙәр менән яуап бирәсәк. Йәмғиәттең һәм властың бурысы - уларға ошо йәһәттән төрлө яҡлап ярҙам күрһәтеү.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БЕЛЕМЛЕ УМАРТАСЫ БӘЙГЕ ТОТА



**Үткән аҙна урталарында Өфөлә XVI республика умартасылар һәм X республика йәш умартасылар, шулай уҡ умартасылар династиялары конкурстары үтте. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте, Башҡортостан Рсепубликаһының ауыл хужалығы министрлығы, Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса фәнни-тикшеренеү үҙәге, Башҡорт дәүләт аграр университеты тарафынан ойошторолған конкурста 48 районда 63 умартасы һәм 29 райондан 33 йәш умартасы көс һынашты.**

Умарта, бал ҡорто тиһәләр, ниңәлер, шул умартаны рөхсәтһеҙ асып, уҫал бөжәктәрҙән таланған кеше күҙ алдына килә. Был көлкө түгел, әлбиттә. Әйтеүҙәренсә, уртаса ҡәүҙәле кеше өсөн 250-500 ҡорт сағыуы үлемесле һанала. Ә бал ҡорто ағыуынан аллергия менән яфаланыусыға иһә, бер сағылыу ҙа үлем ҡурҡынысы менән янай. Умартасылар, ғәҙәттә, бер ниндәй бирсәткәһеҙ умарта аса, сағылмай ҙа, сағылыуҙан да ҡурҡмай. Бында "көслө берҙе еңер, белемле менде еңер" тигән мәҡәл тап-таман тура килә. Сағылыу ҡурҡынысы янағанға күрә лә, умартасы һәр саҡ иғтибарлы, һаҡ ҡыланырға, үҙ эшен белеп эш итергә, һәр хәлдә, белемле булырға бурыслы. Әлеге конкурста ҡатнашыусылар ошо өлкәгә ҡағылышлы теоретик һәм практик мәсьәләләрҙе тиҙ ҙә, дөрөҫ тә сисергә тейеш ине. Балалар ҙа ололарҙан ҡалышмай, тест һорауҙарына матур итеп яуап бирҙе, умартаның өҫкө бүлкәтен дөрөҫ итеп йыйҙы, яңы айырылған күскә оя әҙерләп күрһәтте, көҙгө осорҙа бал ҡортҡарының һанын, көсөн арттырыу сараларын һанап сыҡты, "нәҙекәй бил"дәрҙе төрлө паразит бөжәктәрҙән һаҡлау өсөн ниндәй дарыу яҡшыраҡ икәнлеген дә әйтеп бирҙе.

Шулай итеп, "Йәш умартасы" конкурсы еңеүсеһе исемен Ейәнсура районынан Илнур Әмикәсов яуланы. Миәкә районынан Рәсим Вәлишин 2-се урын алып ҡыуанды, ә еңеүселәр исемлеген Иглин районы егете Сынғыҙ Ишембаев йомғаҡланы. Әйткәндәй, Ишембаевтар умартасылар династиялары араһындағы конкурста ла һынатманы - 3-сө урын яуланы. Был ярышта беренселекте Ейәнсура районынан Иҫәнсуриндар яулап алды, Баҡалы районынан Миңнуллиндар иһә, ышаныслы рәүештә икенсе баҫҡысты биләне. Ә республиканың иң көслө умартасыһы исеме Баҡалы районынан Азат Миңнуллинға бирелде. Икенсе урынды Әбйәлилдән Мәҙинә Ибраһимова ҡулдан ысҡындырманы. Өсөнсө урын Ғафури районынан Рәдис Халиков өлөшөнә төштө. Еңеүселәр Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығы әҙерләгән иҫтәлекле бүләктәр, маҡтау ҡағыҙҙары, миҙалдар менән бүләкләнде. Номинацияларҙа еңеүселәргә БР Мәғариф министрлығы бүләктәре әләкте.

Башҡортостандың иң яҡшы, иң әүҙем умартасыларын ҡотлар өсөн сараға "Апимондия" Халыҡ-ара умартасылар ассоциациялары федерацияһы президенты Филипп Маккейб, ошо ойошманың Рәсәйҙәге бүлексәһе генераль сәркәтибе Риккардо Джаннони-Себастьянини һәм Рәсәй умартасылары милли берлеге президенты Арнольд Бутов килгәйне. Улар Башҡортостанда балаларға умартасылыҡ һөнәрен өйрәтеү буйынса ҙур эш алып барылыуына, "Йәш умартасы" конкурсының инде унынсы йыл уҙғарылыуына һоҡланыуын йәшермәне. Маккейб әфәнде иһә, үҙе лә умартасылыҡ менән 5 йәштән таныш икәнлеген белдерҙе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быйыл ямғырҙар аҙ яуыуы арҡаһында, үләндәр кипте, бал ҡорттары көсһеҙләнде. Бер ағай, ҡорттар ҡышларлыҡ бал йыйҙы ул йыйыуға, тип тынысландырҙы былай. Быйыл маҡсат, бәлки, мул уңыш йыйып алыу ҙа түгелдер - ҡорттарҙы имен ҡышлатыу. Ошондай ваҡыттарҙа бөгөнгө конкурсҡа әҙерләнеп, белем һәм тәжрибә туплаған ағайҙарға, апайҙарға, ҡусты-һеңлеләргә төбәлә инде өмөтлө күҙҙәребеҙ: улар башҡорт тоҡомло бал ҡорттарын имен ҡышлатыуҙың иң дөрөҫ юлын ҡулланыр, башҡаларға өйрәтер. Конкурстың төп маҡсаты ла шул бит.**

Илгиз РӘХИМОВ әҙерләне.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓10 сентябрҙә Бөрйән районының Иҫке Собханғол ауылында "Бөрйән балы - башҡорт даны" тип аталған халыҡ-ара этнофестиваль ойошторола. Сарала ҡатнашыу өсөн ғаризалар 8 (34755) 3-62-42, 8 (34755) 3-62-86 телефондары буйынса ҡабул ителә, e-mail: bursanicks@mail.ru.

✓Урман янғыны хәүефе арҡаһында "Башҡортостан" милли паркы 28 августҡа тиклем туристарҙың килеүен сикләне. Был хаҡта парк хакимиәте хәбәр итә. "Шүлгәнташ", "Башҡортостан" ҡурсаулыҡтарында, "Моразым тарлауығы" тәбиғәт паркында ут сыҡты. Был янғындарға ҡоро йәшен разрядтары сәбәпсе булды. Мәләүез районы биләмәһе - "Күперле" карст күпере, Ҡотоҡ-Сумған мәмерйәләре тулыһынса ябыҡ. Бөрйән һәм Күгәрсен райондары сигендәге биләмәгә парк хеҙмәткәрҙәре оҙатыуында ғына инергә мөмкин. Нөгөш һәм Йомағужа һыу һаҡлағыстарына, Нөгөш, Үрек һәм Ағиҙел йылғаларына ил асыҡ.

✓Башҡортостанда Өфө - Иглин - Красная Горка - Павловка автомобиль юлының 6,679 саҡрымында Тауыш йылғаһындағы күперҙе ремонтлауға бәйле Өфө районында Кириллово - Иглин районы сиге участкаһында хәрәкәт ябылған. Автомобиль хәрәкәте 30 октябргә тиклем ябыҡ буласаҡ. Өфөнән Иглин районына юл тотоусыларға ремонт участкаһын һамар - Өфө - Силәбе федераль М-5 "Урал" трассаһы аша урап үтергә кәрәк. Дороги-но, Кириллово һәм Грибовка ауылдарында йәшәүселәр Өфөнән ҡайтҡанда ғәҙәти маршрут менән файҙалана ала.

✓Өфөлә IV Республика заманса драматургия һәм режиссура семинар-лабораторияһына ғаризалар ҡабул ителә башланы. Конкурста Башҡортостанда йәшәүсе теләгән һәр автор ҡатнаша ала. Семинарҙа ҡатнашыу өсөн 1 октябргә тиклем һуңғы ике йылда рус, башҡорт һәм татар телдәрендә яҙылған пьесаларҙы ебәрергә кәрәк. Башҡорт һәм татар телендәге конкурс эштәренең рус теленә тәржемәһе булырға тейеш. Максималь күләме - 40 бит. Автор тураһында мәғлүмәттәрҙе, ҡыҫҡаса ижади автобиографияны, пьесаның исеме, жанры күрһәтелгән әҫәрҙе dramaturgiya@inbox.ru адресы буйынса ебәрергә мөмкин.

✓Өфө режиссеры Вадим Вәлиуллиндың "Кредит" исемле фильмы "Кыҫкаса" бөтә Рәсәй ҡыҫҡа метражлы кино фестивале лауреаты булды. Фильм иң яҡшы сценарий өсөн бүләкләнгән. Фильмда дауалап булмай торған сиргә дусар булған ҡыҙҙың ипотека кредитын түләүе хаҡында бәйән ителә. 2016 йылдың июнендә "Кредит" "Кинотавр" кинофестивалендә лә еңеүсе булды.

**✓ Әгәр һеҙгә инвестиция килешеүе төҙөргә тәкдим итәләр икән, был һеҙҙе уйланырға мәжбүр итергә тейеш. Сөнки төҙөүсенең ошо юл менән төҙөлгән килешеүгә закон талаптарын ҡағылдырмаҫҡа тырышыуы бик ихтимал.**



АЛДАЙҘАР!

# ӨЙЛӨ БУЛАМ, ТИП...

## төп башына ултырма



**Торлаҡ төҙөү күләме буйынса уңышлы 10 төбәк иҫәбенә ингән эре ҡалалар өсөн "алданған өлөшсөләр" проблемаһы бөгөн дә көнүҙәк булып ҡала. Төҙөлөп ятҡан йортта фатир алырға ниәт итеп, мутлашыусылар ҡулына эләкмәҫ һәм алданыусылар исемлеген тулыландырмаҫ өсөн нимә белергә кәрәк?**

Граждандарҙың аҡсаларын төҙөлөштә өлөшсө булараҡ килешеү нигеҙендә йәлеп иткән ойошмалар менән мөнәсәбәте 214-се Федераль закон ("Өлөшсө булараҡ төҙөлөштә ҡатнашыу тураһында..."), шулай уҡ "Кулланыусылар хоҡуғын яҡлау тураһында" закон нигеҙендә көйләнә.

Тәү сиратта төҙөүсе тураһындағы мәғлүмәтте анализларға кәрәк: компания төҙөлөш баҙарында нисә йыл эшләй, ниндәй объекттарҙы төҙөгән һәм ниндәй уңышҡа өлгәшкән. Был мәғлүмәттәр асыҡ сығанаҡтарҙа бар, шунда уҡ башҡаларҙың баһаламаһын да уҡырға мөмкин. Мотлаҡ рәүештә БР Арбитраж судының рәсми сайтына инегеҙ, унда анығ төҙөлөш компанияһы теге йәки был суд процесында ҡатнашамы-юҡмы, процестың характеры, уның банкротлығы тормошҡа ашырылмаймы икәнлеге тураһында мәғлүмәт алырға мөмкин.

Аҡсаны төҙөлөштөң нуленсе циклында индерергә теләп, торлаҡты түбән хаҡҡа алыу мөмкинлеге тураһындағы ымһындырғыс рекламаға ышанмағыҙ.

Артабан төҙөлөш компанияһының аҡса йәлеп итеүҙең ниндәй ысулын һайлауына иғтибар итергә кәрәк. 214-се Федераль закондың 1-се статьяһына ярашлы, түбәндәге ысулдар билдәләнгән: өлөшсө булып ҡатнашыу тураһындағы килешеү нигеҙендә; торлаҡ сертификаттары эмитенты сығарыу юлы менән; был эш менән шөғөлләнеүсе кооперативтарҙың эшен көйләүсе федераль закондарға ярашлы, торлаҡ-төҙөлөш һәм торлаҡ туплау кооперативтары аша. Башҡа ысулдарҙы закон тыя.

Әгәр һеҙгә инвестиция килешеүе төҙөргә тәкдим итәләр икән, был һеҙҙе уйланырға мәжбүр итергә тейеш. Сөнки төҙөүсенең ошо юл менән төҙөлгән килешеүгә закон талаптарын ҡағылдырмаҫҡа тырышыуы бик ихтимал. Бындай килешеү төҙөһәгеҙ, атап үтелгән Федераль закон буйынса гарантияларға (төҙөүсе килешеү шарттарын боҙған осраҡта, граждандарға юғалтыуҙы кире ҡайтарыу буйынса махсус гарантиялар; боҙолған хоҡуҡтар һәм законлы ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү өсөн законда ҡаралған ысулдарҙы тулыһынса файҙаланыу; властың вәкәләтле органдары тарафынан һөҙөмтәле ярҙам алыу) эйә булмайһығыҙ.

214-се Федераль закондың 4-се статьяһының 4-се өлөшөнә ярашлы, төҙөлөштә өлөшсө булып ҡатнашыу килешеүендә биш мотлаҡ пункт булырға тейеш. Беренсенән, унда төҙөүсе проект документацияһына ярашлы күп фатирлы йортто йәки күсемһеҙ милектең башҡа объектын сафҡа индереүгә рөхсәт алғандан һуң өлөшсөгә биреләсәк анығ объекттың билдәләмәһе яҙылырға тейеш. Икенсенән, документта төҙөүсенең төҙөлөштә ҡатнашыусы өлөшсөгә тейешле өлөштө тапшырыу ваҡыты тураһында мәғлүмәт булырға тейеш. Өсөнсөнән, килешеү хаҡы, уны түләү тәртибе һәм ваҡыты. Дүртенсенән, төҙөлөштәге өлөш объектына гарантия ваҡыты күрһәтелергә тейеш. Бишенсе пункт - төҙөүсенең килешеү буйынса ҡаралған бурыстарын үтәүҙе тәьмин итеү ысулдары. Ошо пункттарҙың береһе генә булмағанда ла, килешеү төҙөлмәгән тип һанала. Бынан тыш, килешеүҙең Росреестрҙа теркәлеүе мотлаҡ.

Килешеү төҙөгәнгә тиклем төҙөүсенән төҙөлөшкә рөхсәт ҡағыҙын, шулай уҡ күп фатирлы йорт төҙөү өсөн алынған ер участкаһына милек йәки ҡуртым хоҡуғын раҫлаусы дәүләт теркәүе тураһында документ талап итергә, уның проект декларацияһы ҡайҙа баҫылып сығыуын белешергә кәрәк. Проект декларацияһы менән танышып сыҡҡандан һуң объектты тулыһынса күҙаллай алаһығыҙ. Әгәр был документтар булмаһа, төҙөүсенен төҙөлөш өсөн аҡса йәлеп итергә хоҡуғы юҡ.

Былардан тыш, ул танышыу өсөн ойоштороу документтарын, дәүләт теркәүе тураһында танытма, һалым органында иҫәпкә ҡуйылыуы тураһында танытма, финанс-хужалыҡ эшмәкәрлеге тураһында отчет, раҫланған йыллыҡ отчет, бухгалтер балансы, аудитор һығымталары менән таныштырырға бурыслы. Был документтар менән танышыу уның финанс хәлен һәм уның менән килешеү төҙөү ярайммы, юҡмы икәнен асыҡларға ярҙам итә.

Бары тик ошо нормалар үтәлгәндә генә һалынған аҡсаларығыҙ юғалмаясына, ә инде төҙөлөш тамамланғандан һуң яңы фатирҙа өй түйлай алыуығыҙға гарантия буласа.

Хөрмәтле өфөләр! Әгәр төҙөлөштә өлөшсө булараҡ ҡатнашыуға бәйле һорауҙарығыҙ булһа, Өфө ҡала округы хакимиәтенең Кулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса бүлек белгестәренән (347) 235-99-45, 237-23-04, 263-01-26 телефондары буйынса йәки үҙегеҙ йөшөгән урында ҡабул итеүгә яҙылып, консультация ала алаһығыҙ.

**Өфө ҡала хакимиәтенең Мәғлүмәт-аналитика бүлеге хеҙмәте.**

ҠЫҪҠАСА

# МӘКТӘПТӘР ӘҘЕРЛӘНӘ...

✓ Ҡала хакимиәте төҙөкләндереү эштәренә комплекслы ҡарай. Йорт эргәләре территорияларына асфальт һалыу менән бер рәттән, уларҙа балалар майҙансыҡтары урынлаштырыла, ер килтерелеп, клумбалар һәм газондар яһала, ултырып ял итеү өсөн эскәмйәләр ҡуйыла, сүп-сар һауыттары урынлаштырыла һәм контейнерҙар майҙаны ремонтлана. Һуңғы 4 йылда торлаҡ йорттар ихатаһындағы 200 майҙанда уйын ҡоролмалары һәм спорт-уйын комплекстары урынлаштырыла һәм йыл һуңынаса тағы ла 56 адрес үҙ сиратын көтә.

✓ Өфөлә мәктәптәр һәм баҡсалар балаларҙы ҡабул итеүгә 99 процентҡа әҙер. 25 августҡа белем биреү учреждениеларында ремонт эштәре 100 процентҡа тамамланасаҡ. 23 августа ҡала хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәлә Мәғариф идаралығы етәксеһе Елена Хаффазова ошо хаҡта белдерҙе. Уның әйтеүенсә, 80 бинаны - 36 мәктәптә, 40 балалар баҡсаһын һәм дүрт өҫтәмә белем биреү учреждениеһын капиталь ремонтлау өсөн ҡала бюджетынан 100 миллион һум аҡса йүнәлтелде. Бынан тыш, юл-транспорт хәүефһеҙлегенә ҙур иғтибар бүленде. Әҙерлек осоронда мәктәптәр янында 300 юл билдәһе, 10 светофор ҡуйылған һәм 16 мең квадрат метр юл тамғалары һыҙылған. Быйыл мәктәптәр һәм балалар баҡсалары өсөн ике тапҡырға тиерлек күберәк дәреслектәр һәм уйынсыҡтар һатып алынған. 2016 йылда 12,2 мең уҡыусы беренсе класҡа бара. Ҡалала бөтәһе 107,1 мең уҡыусы белем ала.

✓ Башҡортостандың Мәғариф министрлығы дөйөм белем биреү учреждениеларында электрон белем биреүҙе үҫтереү өсөн республика Башлығы гранттарына дәғүә итеүгә документтар ҡабул итә башлай. Конкурста ҡатнашыу өсөн ғаризаларҙы 6 сентябргә тиклем бирергә кәрәк. Гранттарҙың дөйөм суммаһы - яҡынса 30 миллион һум. Субсидиялар уҡытыусыларҙы электрон белем биреү технологияларына өйрәтеү, ата-әсәләрҙе өйрәтеү моделен әҙерләү һәм тормошҡа ашырыу, һәләтле балаларҙы һайлап алыу һәм артабан улар менән эшләү, электрон балалар баҡсаһы, электрон мәктәп әҙерләү, түңәрәк эше моделдәре һәм башҡа йүнәлештәр буйынса бүленә. Документтар ҡабул итеү урыны: Өфө ҡалаһы, Театр урамы, 5/2, 204-се бүлмә, көн һайын (ял һәм байрам көндәренән тыш) иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем.

✓ Баш ҡала халҡының һәм килгән ҡунаҡтарҙың яратҡан урынына әүерелгән Салауат Юлаев исемендәге баҡсала үҙенсәлекле декоратив архитектура яҡтырткысы ҡуйылды, шуның һөҙөмтәһендә аэропорт яғынан ингәндә бындағы өс беседка һәм аҫылмалы күпер төрлө төҫтәргә күмелә. Дөйөм алғанда баҡса территорияһында 125 светодиод прожектор ҡуйылған, улар төрлө яҡтыртыу мөйөшө аҫтында 65 мең төрлө төҫ бирә ала. Яҡтылыҡ сығанаҡтары туҙан һәм һыу инмәҫлек корпустар менән һаҡлана. Идара итеү контроллер һәм дүрт сплитер ярҙамында үҙәкләштерелеп башҡарыла. Бындай яҡтыртыу техникаһының һуңғы ҡаҙаныштарының береһе булған сығанаҡ әлегә Өфөнән башҡа Рәсәйҙең бер ҡалаһында ла юҡ. Барлыҡ кабелдәр ҙә вандаллыҡтан һаҡланһа ла, ҡала хеҙмәттәре өфөләрҙе һәм баш ҡала ҡунаҡтарын декоратив прожекторға ғына түгел, ҡаланың барлыҡ инфраструктура элементтарына һаҡсыл мөнәсәбәттә булырға саҡыра. Сөнки был эштәрҙең барыһы ла халыҡтың уңайлылығы өсөн эшләнә.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Дерматит

❖ Ҡыҙыл таптар булып ҡалҡҡан дерматиттан ҡотолоу өсөн 1-әр өлөш һырлан (череда), кесерткән, күгүлән (спорыш) һәм еҙ төймә (пижма), 2-әр өлөш меңъяпраҡ үләне, мышар емеше, гөлйемеш, 3 өлөш һары мәтрүшкәне термосҡа һалып, 0,7 литр ҡайнар һыу ҡойорға, төнө буйы төнәтергә, иртән һөҙөргә һәм көнөнә өс тапҡыр яртышар стакан эсергә, шулай уҡ таптарға һөртөргә. Бынан тыш, 2 ҡалаҡ календула үләнәнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә һәм тәнгә һөртөргә.

### Юғары ҡан баҫымы

❖ Юғары ҡан баҫымын йайлау өсөн быяла һауытҡа ат ҡуҙғалағы тамырын (корень конского щавеля) ваҡлап тултырырға, өҫтөнә араҡы ҡойорға, 7-10 көн төнәтергә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр 25-әр тамсы эсергә.

❖ 50 грамм һоло, 1-әр балғалаҡ гөләйемеш менән әнәлек емешен киптереп, ваҡларға һәм кистән 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, иртән һөҙөргә һәм ярты стаканын иртән, яртыһын йоклар алдынан эсергә. Көн һайын яңынан әҙерләргә.

### Тонзиллит

❖ Тамаҡ нығ ауыртҡанда 1 стакан йылы һыуға ярты балғалаҡ аш содаһы, бер семтем тоҙ, 1 тамсы йод өҫтәп, көнөнә 5 тапҡыр тамаҡты сайҡатырға.

❖ Шешеүҙе бөтөрөү өсөн иртән миндалиналарға алоэ һуты (1 ҡалаҡ) һәм бал (3 ҡалаҡ) һөртөргә була.

❖ Йыш ҡына тонзиллит йөрәккә бирә. Йөрәк мускулын нығытыу өсөн 1 ҡалаҡ әнәлек сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡасын ябып 2 сәғәт талғын утта быҡтырырға, тик ҡайнатмаҫҡа. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашар алдынан 3-әр ҡалаҡ эсергә.

### Катаракта

❖ Алманың өҫкө өлөшөн ҡырҡып алып, үҙәген алырға, эсенә бал ҡойорға, ҡырҡып алынған өлөшө менән кире ябырға. 2 көндән һуң бүленеп сыҡҡан һутты быяла һауытҡа ҡойоп алырға. Иртәле-кисле күҙҙәргә 1-2 тамсы тамыҙырға. Дауаланыу курсы - 1 аҙна ярым.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу методикаһын яңы талаптарға яраҡлаштырып эшләргә кәрәк. Сөнки әлеге көндә беҙ нигеҙләнеп уҡытҡан методик ҡулланмалар XX быуат балалары өсөн булдырылған, улар иҫкергән.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

**Башҡорт халыҡ медицинаһында дарыу үләндәрен файҙаланыу тарих төпкөлөнә барып тоташа. Шифалы үҫемлектәрҙе йыйыу, ҡулланыу формаһы дауалау маҡсатына ҡарап билдәләнгән. Май айында һәм июнь башында, йәғни, сәскә атыу осоронда, үҫемлектәр айырыуса шифалы тип иҫәпләнгән.**

Үҫемлек яңы, сей килеш йәки киптерелгән рәүештә ҡулланылған. Киптереү өсөн шифалы үҫемлекте шәлкем итеп бәйләгәндәр ҙә күләгә, ҡараңғы ҡоро һәм үтәләй ел өрөп торған урынға элгәндәр. Бер йәки бер нисә шифалы үҫемлектән дауа әҙерләнгән.

Бына мәтрүшкәнән әҙерләнгән төнәтмә ысулы: бер ус шифалы үләнде ҡәҙимге сәй кеүек бешергәндәр һәм үҙен генә йәки һөт ҡушып йоҡо алдынан йылы килеш 1-2 стакан эскәндәр. Тағы ла бер рецепт: бер ус мәтрүшкә һәм бер ус гөлйемеш сәскәһен бер литр һыуҙа сәй кеүек әҙерләп эскәндәр.

Байтаҡ шифалы үҫемлек нервы-психик ауырыуҙарҙы дауалағанда ҡулланылған. Мәҫәлән, баш ауыртыуҙан, баш әйләнеүҙән һәм шаулауынан төнәтмә рәүешендә мәтрүшкә, һары мәтрүшкә, бәйғәмбәр сәскәһе, меңъяпраҡ, ҡыҙыл көртмәле япрағы, миләш емеше, бесәй үләне тамыры һәм ғәҙәттәге сәй файҙаланылған. Шул уҡ маҡсатта киптерелгән онталған аҡһырғаҡ тамырын еҫкәгәндәр.

Йоҡоһоҙлоҡ менән интеккәндә, төнгә ҡаршы мәтрүшкә, һары мәтрүшкә, томбойоҡ тамырынан әҙерләнгән төнәтмә эсергәндәр. Ныҡ тулҡынланып китеүҙе, психик ярһыуҙы баҫыу өсөн бесәй үләне тамыры, мәтрүшкә, йүкә сәскәһе, хәҙрәт үләне япрағы, айыу көпшәһе тамыры һәм япраҡтары төнәтмәһе йәки ҡайнатмаһы ҡабул ителгән. Башҡортостандың ҡайһы бер райондарында, мәҫәлән, Бөрйән, Белорет яҡтарында, халыҡ медицинаһы белгестәре һөйләүенсә, рухи-психик төшөнкөлөк, эс бошоу һымаҡ күренеш булғанда, бәғәнәш япрағынан йәки уның емеше һәм тамырынан яһалған төнәтмә эскәндәр. Айыу көпшәһе тамырынан әҙерләнгән ҡайнатма менән эскеселәрҙе дауалағандар.

Физик хәлһеҙлек, ныҡ ябығыу күҙәтелгәндә, яҡшы туҡланыу менән бер рәттән андыҙ тамырынан әҙерләнгән дауа ҡулланылған. Ошо уҡ маҡсатта гөлйемештән һәм ҡара һарына тамырынан әҙерләнгән дауа ҡабул ителгән. Ҡан аҙайғанда, туҡланыу рационына кишер менән ҡыҙыл сөгөлдөрҙө индергәндәр, гөлйемеш тамыры ҡайнатмаһын эскәндәр. Күреүебеҙсә, был осраҡта сигнатура күҙәтелә - төҫө менән ҡанға яҡын матдәләр ҡабул ителә. Ҡояш йәки эҫе һуҡҡанда барлыҡҡа килгән хәлһеҙлекте бөтөрөү өсөн мүк еләге ҡайнатмаһын эсергә кәңәш иткәндәр.

Зәңгенән һауығыу ниәтендә ужымдың йәш үләнен сей килеш ашай торған булғандар. Күп кенә шифалы үҫемлек йөрәк ауырыуҙарынан ҡулланылған. Йөрәк ауыртыуын, йөрәк тулауын баҫыу өсөн һәм ғөмүмән йөрәк сирҙәренән мәтрүшкә, һары умырзая, ынйы сәскәһе, әрем, гөлйемеш (япрағы, емеше), бәғәнәш емеше, ҡурай еләге, балан, ҡара бөтлөгән, дунала, ҡыҙыл көртмәле емештәре, бесәй үләне тамыры, артыш еләгенән әҙерләнгән ҡайнатма йәки төнәтмәне ҡабул иткәндәр. Артыш шулай уҡ халыҡ санитарияһында ла киң ҡулланылған.

Тын юлдары, үпкә ауырыуының төп сәбәбе һыуыҡ тейеүгә ҡайтып ҡала. Был осраҡта ла иң яҡшы сара тип тирләткес дауа биреү һанала. Шунлыҡтан тымау тейһә, сөскөрөү, йүткереү йонсотҡанда, тамаҡ ауыртҡанда, тауыш бөткәндә, үпкә шешкәндә, тирләткес дауаларға ҙур иғтибар бирелгән. Ошо йәһәттән ҡара һәм ҡыҙыл ҡарағат емеше (япрағы ла), ҡурай еләге, ҡыр сейәһе, ер еләге, мүк еләге, йүкә сәскәһе, бесәй ҡойроғо, ҡыҙыл борос ҡуҙағы, әрем һәм әсе әрем ҡайнатма рәүешендә эҫе килеш эселгән. Тирләү өсөн балды ла файҙаланғандар: уны йә эскәндәр, йә күкрәк тәңгәлен ыуғандар. Тирләү өсөн ингаляция ла ярҙам иткән. Бының өсөн эҫе һыуға кейәү үләне йәки мәтрүшкә һалғандар һәм үлән һыуынан килгән быуҙы һулағандар.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**

ӘЙТӘГҮР!

**Белем усаҡтарында яңы уҡыу йылына ҡыҙыу әҙерлек тамамланып килә. Мәғариф буйынса үткәрелгән Бөтә Рәсәй һәм республика кимәлендәге август кәңәшмәләрендә иң актуаль проблемалар уртаға һалып тикшерелде, хәл итеү юлдары барланды. Кәңәшмәләрҙең һөҙөмтәһе, киләһе уҡыу йылына ҡуйылған маҡсаттар тураһында педагогтарҙың үҙҙәренән һораштыҡ.**



# БАҘНАТҺЫҘ УҠЫТЫУСЫ...

## ҡыйыу шәхес тәрбиәләй алмай

***Фаягөл ӘМИРХАНОВА, Ишембай ҡалаһы, Ә-З.Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы:*** Быйыл миңә республика һәм Бөтә Рәсәй кимәлендәге мәғариф буйынса август кәңәшмәләрендә ҡатнашыу бәхете тейҙе. Был сараларҙан алған фәһем, тәжрибәм менән уртаҡлашып китәм. Мәғариф буйынса республика август кәңәшмәһенән һуң мин үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнамай, заман менән бергә ҡыйыу атларға кәрәк, тигән һығымтаға килдем. Ниндәй генә реформа булмаһын, уны тормошҡа ашырыу иң тәүҙә уҡытыусы иңенә төшә, шуның өсөн, нисек кенә ҡыйын булһа ла, яңы технологиялар ҡулланыу, электрон белем биреүҙән баш тарта алмайбыҙ. Беҙҙең халыҡтың психологияһы шулайыраҡмы икән, йыш ҡына "Нимәгә кәрәк был?" тигән фекер ишетергә тура килә, күнелдә яңылыҡтарҙан ҡурҡыу, баҙнатһыҙлыҡ йәшеренгән. Беҙгә ҡурҡмаҫҡа, закондарҙы һәм хоҡуҡтарҙы белергә, бөтә мәсьәләләрҙе өйрәнеп, индерелгән яңылыҡтарҙы үҙ эшебеҙҙә ҡулланып ҡарап, ыңғай һәм етешһеҙ яҡтарын күрһәтеп өйрәнергә кәрәк. Тәҡдим ителгән һәр нәмәне һүҙһеҙ генә ҡабул итер урынға, уны анализлап, фекер алышыуға сығарырға тейешбеҙ. Мәғариф буйынса Бөтә Рәсәй август кәңәшмәһендә лә ошо мәсьәлә көнүҙәк проблемаларҙың береһе, тип билдәләнде. Мәғариф өлкәһендәге ыңғай үҙгәрештәрҙе артабан үҫтереү юлдарын эҙләү буйынса тәҡдимдәрҙе етәкселеккә дөрөҫ итеп еткереп барыу мөһим. Уҡытыусы мәғлүмәтле, ҡыйыу булһа, уның һөнәри статусы ла күтәреләсәк, етәкселәр менән бәйләнеш һәм эшлекле фекер алышыуға ла этәргес был. РФ Хөкүмәте етәксеһе Д. Медведев: "Беҙ педагогҡа нисек уңайлы, шулай эшләргә әҙербеҙ. Шуға күрә һеҙҙән тәҡдимдәр көтәбеҙ", - тип әйтә икән, тимәк уй-фекерҙәрҙе еткерергә кәрәк. Бик күп коллегаларым шулай итте лә, һәр кемде борсоған проблемалар, һорауҙар күтәрелде.

Ә бына Мәғариф буйынса республика август кәңәшмәһендә коллегаларымдың һүлпәнерәк ҡатнашыуы күҙгә ташланды. Был уҡытыусыларға ҡарата дөрөҫ булмаған мөнәсәбәттән килеп сыҡмаймы икән, тип тә уйлап ҡуям. Сөнки уҡытыусы быныдай фекер алышыу майҙансыҡтарында әүҙем ҡатнашһа, үҙ фекерен белдергәне өсөн аҙаҡ бер кем тарафынан да баҫым яһалмауына ышанырға тейеш. Әйтергә кәрәк, Мәғариф буйынса Бөтә Рәсәй август кәңәшмәһендә әлегә Рәсәй халыҡтары телдәрен уҡытыуға ҡағылышлы, төбәк компоненты тураһында мәсьәләләр ҡуҙғатылманы. Шулай уҡ РФ Мәғариф һәм фән министрлығы сайтында асылған махсус фекер алышыу битендә киләһе йылда үтәсәк кәңәшмәлә ошо мәсьәлә буйынса айырым майҙансыҡ эшләүен һорап, мөрәжәғәт итергә мөмкин. Әлегә уҡытыусының йәмғиәттәге статусы, уҡытыусы үҫешенең системаһы һәм педагогтың һөнәри стандарттарын камиллаштырыу, мәктәптә белем биреүҙең инфраструктураһы, ҡағыҙ эшен кәметеү, яңы белем биреү һөҙөмтәләре буйынса фекер алышыу майҙансыҡтары эшләне. Әйткәнемсә, педагогтың һөнәри статусын күтәреү буйынса фекер алышыуҙа ҡатнаштым һәм барыһынан да ҡурҡҡан, үҙ фекерен әйтә алмаған, баҙнатһыҙ уҡытыусы ҡыйыу шәхес тәрбиәләй алмай, тигән һығымтаға килдем.

***Индира ҠАЗЫХАНОВА, Салауат районы Малаяҙ башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы:*** Быйыл республика буйынса мәғариф конференцияһының милли мәғарифҡа арналған фекер алышыу майҙансығында ҡатнаштым. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуға ҡағылышлы бик күп мәсьәләләр, Башҡортостан Республикаһында милли мәғарифты үҫтереүҙең яңы концепцияһы ҡаралды. Заманса технологиялар, электрон белем биреүгә ҡағылышлы темалар күтәрелде, оҫталыҡ дәрестәре күрһәтелде. Былар беҙҙең өсөн яңылыҡ түгел, Малаяҙ башҡорт гимназияһында күптән ошо юҫыҡта эш алып барыла. Һәр синыф бүлмәһе кәрәкле техника менән йыһазландырылған, электрон журналдарыбыҙ бар, уҡытыусыларҙың эшен еңелләштереү һәм уҡыусыларҙың иғтибарын дәрескә йәлеп итеү, сифатлы белем биреү өсөн бар шарттар тыуҙырылған. Бөгөн мине тәү сиратта балаларҙың беренсе синыфҡа туған телен белмәй килеүе борсоуға һала. Малаяҙ ауылында эшләгән ике балалар баҡсаһында ла башҡорт төркөмдәре юҡ, балалар гимназияға рус телендә аралашып килә. Тәү сиратта был башланғыс синыф уҡытыусыларының эшендә ҡыйынлыҡ тыуҙыра, улар балаларҙы туған телендә һөйләшергә яңынан өйрәтә. Уҡыусылар үҙҙәре башҡорт телен бик теләп уҡый уҡыуға, ләкин урта синыфҡа күскәндә ата-әсәләр менән артабан башҡорт телен туған тел булараҡ уҡыуҙың мөһимлеге тураһында әңгәмәләр үткәрергә тура килә. "Башҡорттарға аңлатамын башҡортлоҡто", тигән һүҙҙәрҙең хаҡ булыуына, мәғәнәһенә төшөнәһең инде. Тәү сиратта, туған телгә ҡарата һөйөү ғаиләлә тәрбиәләнергә тейеш, ата-әсәләр баланың башҡортса һөйләшеүенең мөһимлеген аңларға, шуға булышлыҡ итергә бурыслы. Ауылда оло быуын кешеләренең балаларына вата-емерә русса һүҙ ҡушыуын ишетеүе күнелде ҡыра. Шуға күрә, киләсәктә балалар баҡсалары һәм мәктәптәр араһында тығыҙ бәйләнеш булдырылһа, милли мәктәптәрҙә эшләгән педагогтарҙың эшенә лә ыңғай йоғонто яһар ине. Балаларҙы башҡорт рухлы, үҙебеҙҙең милли йолаларға ылыҡтырып, туған телебеҙгә һөйөү тәрбиәләп үҫтереү өсөн был бик мөһим аҙым буласаҡ. Мәғариф буйынса республика август кәңшмәһендә балалар баҡсалары һәм белем биреү усаҡтары бер йүнәлештә эшләргә тейеш, тигән һүҙҙәр булды. Киләсәктә ошо йәһәттән эш атҡарылыр, милли мәғарифҡа иғтибар тағы ла артыр тип көтәм.

***Рәсимә АЛЛАМОРАТОВА, Р. Ғарипов исемендәге Башҡорт республика гимназия-интернаты:*** Мәғариф буйынса республика август кәңәшмәһенең "Күп мәҙәниәтле мәғариф арауығында милли мәғарифты фәнни-методик яҡтан тәьмин итеү" темаһына арналған фекер алышыу майҙансығы беҙҙең гимназия-интернат нигеҙендә үткәрелде. Шуға күрә, милли мәғариф өлкәһендәге актуаль проблемалар буйынса барған ултырышта, унан һуң фекер алышыуҙа һәм оҫталыҡ дәрестәрендә әүҙем ҡатнаштым. М. Аҡмулла исемендәге БДПУ ғалимдары Әхмәт Сөләймәнов, Гөлнур Бохарбаева һәм коллегаларым менән берлектә "Урал батыр" эпосы буйынса оҫталыҡ дәресе күрһәттек. Беҙ Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарына яраҡлы, эпосты уҡыусыларҙың метакомпетенцияһын формалаштырыу сараһы булараҡ тәҡдим иттек. Дөйөм алғанда, кәңәшмәнән һуң үҙем өсөн бына ниндәй һығымта яһаным: башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу методикаһын яңы талаптарға яраҡлаштырып эшләргә кәрәк. Сөнки әлеге көндә беҙ нигеҙләнеп уҡытҡан методик ҡулланмалар XX быуат балалары өсөн булдырылған, улар иҫкергән. Бөгөн XXI быуат, заман балалары компьютер, төрлө заманса технологиялар, роботтар менән мауыға, фекерләү рәүештәре лә икенсе төрлө. Уларҙы дәрескә ылыҡтырыу, темаға төшөндөрөү, әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡырға күндереү, рух тәрбиәләү өсөн уҡытыусыға ла ошо техник прогрестан артта ятып ҡалмаҫҡа кәрәк. Әлбиттә, методик ҡулланмаларҙы ғалимдар практик уҡытыусылар менән берлектә төҙөргә тейеш. Сөнки уҡыусыға нимә кәрәк, уға нисек юл табырға икәнен бары тик мәктәптә эшләгән педагогтар ғына белә. Беҙҙең белем усағы педагогтары был йәһәттән әүҙем рәүештә эшләргә, методик ҡулланмалар төҙөүҙә ҡулдан килгәнсе ярҙам итергә әҙер.

Бынан тыш, Мәғариф буйынса республика август кәңәшмәһенең яңы форматта үткәрелеүе оҡшаны. Киләсәктә милли мәғариф буйынса үткәрелгән фекер алышыу майҙансыҡтарына Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә эшләгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ла саҡырылһа, аралашыу тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ барыр ине, тип уйлайым.

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ТАРИХЫНАН

# ПОЛК МУЛЛАЛАРЫНЫҢ...

## ғәскәрҙәге тәртипте, һалдаттарҙың рухын һаҡлағаны

1920 йылдың 27 мартында хәрби комиссариаттың сәйәси-ағартыу идаралығы Башҡортостандың хәрби частары һәм учреждениеларына йома көнөн ял тип иғлан итеүҙе һорап, Башҡорт хөкүмәтенә (Башревкомға) мөрәжәғәт итә: *"Прошу рассмотреть вопрос о еженедельном дне отдыха для войсковых частей, находящихся на территории малой Башкирии т. к. большинство гарнизона и башчастей состоит из башкир, прошу Вашего распоряжения об отдаче приказа, что войсковые части и учреждения Б.С.Р. должны праздновать пятницу"*[14].

1920 йылдың июненә тура килгән сираттағы Ураҙа ғәйетен дә Башҡорт хәрби комиссариаты байрам көнө тип иғлан итә. 12 июндәге фарманы менән комиссариат байрам көндө бөтә ғәскәрҙәргә ашатыуҙы икеләтә арттырырға бойорға: *"По случаю праздника "Ураза байрам" предписываю всем частям Войск и учреждениям выдать красноармейцам и военнослужащим в первый день этого праздника паек в двойном, а во второй день в полуторном размере"*.


ПРИКАЗ № 303

Народного Комиссариата по военным делам Башкирской Советской Республики

Гор. Стерлитамак 12 июня 1920 года.

§ 1.

По случаю праздника „УРАЗА БАЙРАМ" предписываю всем частям Войск и учреждениям выдать красноармейцам и военнослужащим в первый день этого праздника паек в двойном, а во второй день в полуторном размере.

Зам. Народного Комиссара по Военным делам Башкирии А. Кшмурзин 1.

Врид. Военного Руководителя Ярошевич.

(По Отделу Снабжения)

*Ураҙа ғәйете айҡанлы Башҡорт хәрби комиссариатының фарманы. 1920 йылдың 12 июне.*

Мосолман байрамдарын фронттағы башҡорт ғәскәрҙәре лә үткәрә. Мәҫәлән, Муса Мортазин үҙенең китабында: *"24, 25 и 26 августа Башкирская бригада праздновала свой праздник "Курбан Байрам", во время которого было получено пополнение в количестве 100 лошадей и 100 человек из Башкирии"*, - тип яҙа[15].


*Башҡорт ғәскәренең мисәте. 1918 йыл.*

Әммә Башҡортостан автономияһы һәм башҡорт ғәскәрҙәренең советтар яғындағы хөрриәте оҙаҡҡа бармай. 1920 йылдың яҙына советтар аҡтарҙан өҫтөнлөк алғас, Башҡортостан һәм уның хәрби көстәренең үҙаллылығын сикләргә керешә. РСФСР Хәрби революцион советы 23 апрелендәге фарманы менән Башҡортостандағы башҡорт ғәскәрҙәрен Волга аръяғы округ хәрби комиссариатына буйһондора (Быға тиклем улар тик Башҡорт хәрби комиссариатына буйһонған була). 1920 йылдың апрель аҙағында Польша менән һуғыш башланыу һылтауы менән Ырымбур янында торған Муса Мортазиндың атлы бригадаһы фронтҡа оҙатыла. Совет хөкүмәтенең 19 майындағы декреты менән Башҡортостандың автономия хоҡуҡтары ҡырҡа сикләнә. 1919 йылдың 20 мартындағы килешеү буйынса хәрби округ хоҡуҡтарына эйә булған һәм РСФСР Хәрби революцион советына буйһонған Башҡорт хәрби комиссариаты Волға аръяғы округ хәрби комиссариатына туранан-тура буйһондорола. Был декрет менән риза булмайынса, Башҡорт хөкүмәте эшен ташлап китә.

Башҡорт эшмәкәрҙәре властан киткәс, большевиктар артабан башҡорт ғәскәрҙәрен бөтөрөү эшен дауам итә. 1920 йылдың июнендә Новгород губернаһында торған Башҡорт кавалерия дивизияһы бер полкка ҡалдырылып, Украинаға Мортазин бригадаһына ҡушыла. Шул уҡ йылдың көҙөндә Башҡорт хәрби комиссариатының запас ғәскәрҙәр идаралығы бөтөрөлә. 1921 йылдың яҙында Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы һәм Мортазиндың атлы бригадаһы ла таратыла. Башҡортостанда торған запас ғәскәрҙәр ҙә бөтөрөлә.

Шулай итеп, Граждандар һуғышы осоронда башҡорт ғәскәрҙәрендә ислам дине ҙур урын биләй. Башҡорт хөкүмәтенең хәрби көстәре милли армия ғына түгел, ә ысын мәғәнәһендә мосолман ғәскәре булараҡ та төҫ ала. Ислам дине башҡорттарҙың хәрби символикаһындағы ғына түгел, милли идеологияһында ла сағылыш таба. Милли мәнфәғәттәр өсөн көрәшкә әйҙәгәндә, Башҡортостан автономияһы етәкселеге һалдаттарҙың дини тойғоларына ла мөрәжәғәт итә. Аҡтар яғында булған саҡта дәһри большевиктар хакимлығы менән көрәш изге һуғыш булараҡ төҫ ала. Фронтта башҡорт ғәскәрҙәрендә әхлаҡты, тәртипте полк муллалары тота, уларға Башҡорт хөкүмәтенең сәйәсәтен, аңлатыу эшен алып барыу бурысы һалынған була.

Ҡыҙылдар яғына сыҡҡас та башҡорт ғәскәрҙәрендә ислам диненең тотҡан урыны әллә ни үҙгәрмәй, тип әйтергә була. Һуғыш шарттарында большевиктарға, тәү сиратта, яҡшы һуғышҡан ғәскәрҙәр кәрәк була. Улар башҡорт ғәскәрҙәренең эске торошона ҡыҫылмай. Шуға күрә лә ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, элекке полк муллалары хәрби комиссарҙар итеп тәғәйенләнә. Башҡорт хәрби комиссариатының фарманы менән Ураҙа һәм Ҡорбан ғәйеттәре башҡорт ғәскәрҙәрендә байрам ителә. Башҡорт хәрби символикаһы ла аҡтар яғындағынан бигүк айырылмай. Символиканың төп элементы булып ярым ай менән йондоҙ тора.

Большевиктар аҡтарҙы еңеп алғансы, башҡорт ғәскәрҙәренең үҙаллылығына түҙергә мәжбүр була, шулай уҡ ғәскәрҙәге дин торошона ла күҙ йомоп ҡарай. Аҡтарҙан өҫтөнлөк алғас, тәүҙә башҡорт ғәскәренең иреклеген сикләй, артабан берәмләп тарата.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы.**
**(Аҙағы. Башы 33-34-се һандарҙа).**

*[14]ЦИА РБ. Ф.1107. Оп.1. Д.10. Л.26.*
*[15]Муртазин М.Л. Башкирия и башкирские войска в Гражданскую войну. М., 2007. 157-се бит.*

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1743 йылдың 29 июлендә** сығышы менән Ырымбур крайынан булған билдәле рус шағиры Г.Р.Державин тыуған.

➔ **1743 йыл** - Троицк нығытмаһына нигеҙ һалына. 1784 йылдан - өйәҙ ҡалаһы.

➔ **1744 йылдың 15 марты** - "Ырымбур губернаһы булдырыу һәм Өфө провинцияһын һәм шул ерҙәрҙә төҙөләсәк бөтөн нығытмаларҙы уның ҡарамағына буйһондороу тураһында"тигән указ сығарыла.

➔ **1745 йыл** - Екатеринбургтан алыҫ түгел урында Рәсәйҙә тәүге алтын яткылығы табыла.

➔ **1745 йыл** - Воскресенскиҙа И. Твердышев менән И. Мясниковтың баҡыр иретеү заводы төҙөлә.

➔ **1747 йыл** - Нязепетровскиҙа П.Осокиндың домна заводы төҙөлә.

➔ **1749 йыл** - И.Коробовтың Касли заводы төҙөлә.

➔ **1750 йыл** - Сембер сауҙагәре Мясников Преображенский (хәҙерге Йылайыр районы) баҡыр иретеү заводына нигеҙ һала.

➔ **1752 йылдың 22 сентябре** - Уралдағы ҡаҙна заводтары менән идара итеү өсөн Өфөлә Ырымбур тау начальствоһы булдырыла.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Беренсе бүлек

### Евразияла йәшәүсе боронғо халыҡтарҙың этник тарихы

Боронғо башҡорттарҙы беҙҙең эраға тиклем 16-сы меңйыллыҡта "билиш-бриг" йәки "ҡырылған башлы ҡәүем" тип атағандар. Был осорҙа Волга йылғаһы территорияһында Умай-бич (Һомай) хакимлыҡ итә, артабан идаралыҡ Джам ҡартҡа, шунан Таргиз-уғырға тапшырыла. Таргиздың хакимлыҡҡа килеүе хөрмәтенә "Аратэб" храмы төҙөлә, байрамға тирә-яҡтан күп халыҡ йыйыла. Байрамдан һуң Джам ҡарт үҙҙәренең һорауы буйынса "билиш-бриг"тарға грек Агилына ҡайтырға рөхсәт итә.

Гректар "билиш бриг"тарҙы "фригеит" йәки "пеласг" тип атап йөрөткән, "билиш-бриг"тар иһә үҙҙәрен "аҡ ҡой" (грекса ахейҙар) тип белгән. Был атама Грецияның боронғо халҡы "пеласг" менән "ахей"ҙы аңлата. Ахей батыры Геракл (боронғо башҡорттарҙа Гүр улы) б.э.т. VI тиклем Лидий батшаһы Крез ("Көрәш" һүҙенән). ( Геродот, Тарих, М., 2001 708-се һ.б. биттәр).

Афинаның боронғо ҡалаһы - "Бүләр-кекан" ("кекан" - "бейек ҡәлғә"), гректар уны "Пелар-Гикон" тип атап йөрөтә (Тарих, М., 2001, 720-се бит). Б.э.т. VII быуатта Анатолия (Греция) табибы Аристейҙың (Мәрмәр диңгеҙе буйындағы Проконнес тигән урындан) Рифей (Уралтау) тауҙарына оҙайлы сәйәхәт яһағанлығы билдәле. Ул саҡта Уралтауҙың төньяҡ битләүҙәрендә гиперборей Аполлондың ғибәҙәтханаһы урынлашҡан. Сәйәхәттән ҡайтҡас, Аристей унда күргәндәрен үҙенең "Аримаспея" (93, 179-сы бит) поэмаһы баҫылған өс китабында яҙа. Поэманың беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән өлөштәрендә Боронғо Уралда йәшәүсе холоҡтары һәм йолалары буйынса ҡырағайыраҡ ҡәүемдәр хаҡында мәғлүмәт бар. Был өлөштәрҙә шулай уҡ аҙналар буйына төньяҡтан, "Борей" диңгеҙенән иҫкән көслө елдәрҙән һаҡланыр өсөн гиперборийҙарҙың йәнлек тиреләренән тегелгән кейемдәр кейеүе бәйән ителә. Гиппократ (460- 370 й.й. б.э.т.) корреляция (нервы, ҡан тамырҙары һәм эске секреция биҙҙәре ярҙамында айырым органдар функциялары бәйлелеге) төшөнсәһен индерә. Уның буйынса индивид, хатта тотош халыҡтар формалаша. Ғалимдың оҙайлы ҡыштар, көслө ел-бурандар шарттарында йәшәүсе төньяҡтағы Ойкуменға, шулай уҡ Аҙау (Азов) диңгеҙенән Рифейҙа (Уралтау) йәшәүсе боронғо ҡәбиләләр тарихын өйрәнеүгә иғтибары тап шул сәбәп арҡаһында.

Башҡа авторҙар төньяҡ елдәре барып етмәгән күршеләш йәшәгән исседон һәм аримас гиперборийҙарын мифоэпик ҡәбиләләр итеп һүрәтләй (Доватур һ.б., 1982, 265-се бит). Татищев үҙенең хеҙмәттәрендә түбәндәгесә яҙа: "Страленберг Себер буйлап йөрөгәндә ижад иткән, айырыуса география менән булышҡан, үҙҙәрен гиперборийҙар тип атауҙарынан риза булыусыларҙың төньяҡ ерҙәрен картаға төшөргән" (171, 94-се бит). Рифей тауҙарына Аристей барып ҡайтҡандан һуң бер быуат үтеүгә, Көньяҡ Урал тураһындағы мәғлүмәтте беҙгә Геродот ("Тарих атаһы") еткерә. Ул Көньяҡ Уралда йәшәүсе скифтарҙың йәшәйешенә, көнкүрештәге йолаларына, бигерәк тә дин үҙенсәлегенә һәм хәрби тормошона ентекле туҡтала. Геродот үҙе менән әңгәмәләшеүселәрҙең һүҙенә таянып, Боспорҙан алып Көньяҡ Уралға тиклем сауҙа юлында йәшәүсе ете халыҡ тураһында бәйән итә.

**(Дауамы бар).**

✓ *Минең төп бурыс - балаларымды милләтемдең лайыҡлы шәхестәре итеп тәрбиәләү. Улар туған телде лә, туған мәҙәниәтте лә, халыҡ ижадын да, классик әҙәбиәтте һәм музыканы ла, альтернатив йүнәлештәрҙе лә белеп үҫәләр.*



# ДОҒАЛАРЫМДЫ

## туған телемдә еткерәм Хоҙайға

**Зөһрә Бураҡаеваны һәләтле кинодраматург, республика кимәлендә үткән күп тамашаларҙың, эстрада концерттарының юғары кимәлдәге сценарийҙар авторы, яҙыусы, тәржемәсе, шағирә итеп беләбеҙ. Ул ижад иткән әллә күпме проекттар, тормошҡа ашырған идеялар, ижади башланғыстарға этәргән фекерҙәрҙе һанаған ғына кеше юҡтыр. Уның йәшәйеше беҙҙең рубриканың төп асылына ла тура килә: милләтебеҙгә бынамын тигән балалар үҫтерә. Гәзит уҡыусыларыбыҙға халҡыбыҙҙың тағы ла бер һәләтле ҡыҙҙарының береһе менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

**▶ Бөгөн һин үҙеңде кем итеп күрергә теләйһең? Ниндәй ижад йүнәлешен яҡыныраҡ тояһың?**

- Яҙыусы итеп. Бығаса яҙышыуҙы төрлө сәбәптәр менән артҡараҡ шылдырып килдем. Хатта, бәлки, бөтөнләй тотонмам, тигән уйҙарҙы йөрөткән айҙарым, йылдарым да аҙ булманы. Әммә мин барыбер ижади халәттән ҡотола алманым, бары уны кисектереп кенә килдем. Яҙышмағанда ла мин был процестың эсендә булдым, уйлап йөрөнөм, уйымдан ғына үрҙем дә һүттем, үрҙем дә һүттем. Бер яҡтан, был, бәлки, минең өлгөрөү юлым да булғандыр...

**▶ Үткән юлың, башҡарған эштәрең тап ошо яҙыусылыҡҡа алып килеүсе баҫҡыс та булғандыр әле. Нимәнән башланды барыһы ла?**

- Әсәйемә эйәреп, мин дә филолог булырға әҙерләндем. Шуны белеп, шуны күреп үҫкәс, осоштарың да шул юҫыҡта булыуын теләйһең бит. Башҡорт теле буйынса олимпиада еңеүсеһе булғас, миңә юғары уҡыу йортона инеү өсөн бер генә имтихан тапшырырға кәрәк ине. Тик мин Мәскәүҙең Әҙәбиәт институтын һайланым. Минең Мәскәүҙәге студент саҡтарым 90-сы йылдарҙың үҙгәртеп ҡороу осорона тура килде. Ул уҡыу йортонда белем алыусы халыҡ, үҙегеҙ беләһегеҙ, күберәк хис-тойғолар шауҡымында йәшәүселәр һәм заман буталышын, үҙгәрештәрҙе уларҙың төрлөһө төрлөсә кисерҙе, әммә береһе лә битараф ҡала алманы. Беҙ, йәш кенә ҡыҙсыҡтар, шул кисерештәр тулҡынында ҡайнашҡандар араһында йөрөгән булабыҙ. Ашауҙа ла, кейенеүҙә лә, башҡа кәрәк-яраҡтар буйынса ла мохтажлыҡ, ҡурҡыныс-хәүеф артты, тик беҙ бирешмәйбеҙ, турғайҙар кеүек сорлашып йөрөй бирәбеҙ. Шулай сыныҡтыҡ. Һәм шул әҙәбиәткә ғашиҡ шәхестәр араһында уҡырға һәм көн итергә тырышыу, мине яҙыусылыҡҡа инселәп, тәүге мөһөрөн баҫҡандыр. Тик Башҡортостанға ҡайтҡас, оҙаҡ ваҡытымды кинематографияға бүлдем. Гөлсирә апай Ғиззәтуллина: "Һылыу, яҙ әле һин, яҙ", - тине осрашҡан һайын, әсәйем: "Эх, ниндәй белем әрәм була", - тип уфтанды. Ә минең өсөн был ике кешенең фекере бик ҡиммәтле. Оҙон һүҙҙе ҡыҫҡарта төшкәндә, бығаса башҡарған режиссер, сценарист, тәржемәсе һ.б. хеҙмәттәремдең барыһы ла мине бөгөнгө ижадыма алып килгәндер, тим.

**▶ Зөһрә, һинең ниндәй атай-әсәйҙең балаһы икәнеңде беләбеҙ. Һәм, ғәҙәттә, билдәле шәхестәрҙең балалары йә уларҙың нуры менән яҡтыртыла, йә уларҙың күләгәһендә ҡала. Һин, ниңәлер, был ҡалыпҡа инмәгәнһең. Һиңә үҙеңдең "икенсе Бураҡаева" икәнлегеңде иҫбатларға тура килдеме?**

-Быны Бураҡаевтарҙың балаларының барыһына ла иҫбатларға тура килде. Абзыйымдың һәм минең тәүге хикәйәләрем донъя күргәс, әсәйемә: "Мәрйәм, эй өлгөрһөң, балаларың өсөн дә яҙаһың", - тиҙәр ине. Миңә лә, әсәйең ярҙам итәләр, ҡала ҡыҙы башҡорт телендә яҙа алмай, тиеүселәр булды. Әммә ваҡыт үтеү менән барыһы ла үҙ урынына ултырҙы. Хәҙер инде, киреһенсә. Мәрйәм Бураҡаеваның пьесаһы Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт театрында ҡуйылғас, бер билдәле генә ағай "Әсәйең өсөн һин яҙҙыңмы?" тип һораны. Мин быны комплимент һымаҡ ҡабул иттем.

**▶ Әлеге ваҡытта һин әҙәбиәттең проза өлкәһенә йәшең, тормош тәжрибәң буйынса ла өлгөрөп килгән ҡатын-ҡыҙһың. Рәсәй кимәлендәге әҙәби еңеүҙәрең, уңышлы әҫәрҙәрең етерлек. Шунда ла һин әҙәбиәттә ҡатын-ҡыҙға, нисектер, ситһетеп ҡарауҙарын, уны артыҡ етди ҡабул итмәүҙәрен тояһыңмы? Ир-егеттәрҙән айырмалы, әҙип ҡатын-ҡыҙға һәр әҫәре һайын был илаһи донъяла уның да урыны бар икәнлекте иҫбатларға тура килә кеүек түгелме?**

- Әҙәбиәттә "Ҡатын-ҡыҙ прозаһы", "ҡатын-ҡыҙ темаһы" тигән ҡараш бар, әлбиттә. Был һәр саҡ булған һәм буласаҡ. Нисек кенә тигәндә лә, ҡатын-ҡыҙ бик нескә психолог. Ир-егет яҙыусы хатта үҙе хаҡында ла ҡатын-ҡыҙ әйтеп бирә алғанды әйтеп бирә алмай. Ошоно һиҙгәндәр һәм ҡатын-ҡыҙ тарафынан конкуренция ҡурҡынысы тойғандар гүзәл зат ижадына юғарынан ҡарап маташа, әлбиттә. Ә аҡыллы ирҙәр ижадта ла, башҡа мәсьәләләрҙә лә ҡатын-ҡыҙҙы конкурент итеп күрмәй, уға хөрмәт менән ҡарай.

**▶ Зөһрә, бына мин һине аш бүлмәһендә картуф әрсеп ултырған сүрәттә күҙ алдына килтерә алмайым. Һин, нисектер, һәр ваҡыт ерҙән айырыла биреп осоп йөрөгән зат кеүегерәкһең. Ә шулай ҙа ғәҙәти тормош хасмы ул һиңә?**

- Мин Ҡыҙ йондоҙлоғонда тыуғанмын. Был - романтизм менән реализмды берләштергән ер билдәһе. Ваҡытты йәлләй, уның ҡәҙерен белә торған кешемен. Былары - бер булһа, икенсенән, мин бит өс баланы яңғыҙ күтәреп килгән әсә лә. Үҙ туғандарымдан башҡа был өлкәлә бер ниндәй ҙә ир-ат ярҙамы юҡ. Ошоларҙы ишеткәндән һуң да мине "күк есеме" тип әйтә алыр инеңме? Йәғни, минең бер минут та буш ваҡытым юҡ, мин, бына әле самалап әйткәндә, һуңғы бер ун йылдан ашыуҙыр, комбайн шикелле бары эш менән мәшғүлмен. Шунан сығып, үҙегеҙ уйлағыҙ инде...

**▶ Балаларыңдың аталарынан айырылырға йөрьәт иткән саҡта һин үҙ көсөңә ышандыңмы? Мөхәббәт, балаларҙы етем итмәү, ғаилә яуаплылығы, тигән төшөнсәләрҙе еңер ниндәй сәбәптәр булды?**

- Ике тапҡыр тормошта булдым. Тормош иптәштәремдең икеһе лә ижад кешеләре. Уларҙың ижадта ла, тормошта ла - үҙ юлы. Беҙ юлдарыбыҙҙы берләштерә алманыҡ, шуға бергә түгелбеҙ. Сәбәбе шул ғына. Ике тапҡырҙа ла эске донъяһы бер төрлөрәк булған кешеләрҙе һайлағанмын, бер үк сценарийҙы ике тапҡыр ҡабатлағанмын булып сыға. Мин уларҙы ғәйепләмәйем. Уларҙың да мине ғәйепләп йөрөгәнен ишеткәнем юҡ. Улар миңә бынамын тигән балалар бүләк итте - шуға рәхмәтлемен уларға ла, яҙмышыма ла.

Балаларымды аҫырыу, үҫтереү, уҡытыу - тулыһынса үҙемдең яуаплылыҡта. Аллаға шөкөр, күңел төшөнкөлөктәрен дә, матди ауырлыҡтарҙы ла туғандарым ярҙамында еңеп сығып киләм. Минең төп бурыс - балаларымды милләтемдең лайыҡлы шәхестәре итеп тәрбиәләү. Уларға үҙем белгәнде, үҙем тойғанды еткерергә ашығам. Улар туған телде лә, туған мәҙәниәтте лә, халыҡ ижадын да, классик әҙәбиәтте һәм музыканы ла, альтернатив йүнәлештәрҙе лә белеп үҫәләр.

Өс балам да Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында уҡыны. Быйыл иһә Айназа ҡыҙым 9-сы кластан һуң Өфө сәнғәт училищеһына рәссамлыҡҡа уҡырға инде. Быға тиклем ул музыка мәктәбендә думбыраға йөрөгәйне, әммә рәссам булыу теләге тыуыу менән мин уны Өфөләге иң яҡшы түләүле студияға уҡырға бирҙем. Шуға ла ул ҙур конкурстан еңел үтеп, уҡырға инеү бәхетенә эйә булды. Айназа бәләкәй саҡта



✓ *Күп балалы әсә стрестарға ла бирешеп бармай, апатияға бирелмәй, физик яҡтан ғына түгел, рухи яҡтан да сыныҡҡан була. Ул энергиялы, хәрәкәтсән, балалар аураһында оҙайлы булғанға эске донъяһында ла негативҡа урын аҙ.*



"Рәхмәт" комедияһында уйнаны, әммә атаһы яғынан билдәле артистар ғаиләһенән булһа ла, сәхнәгә ынтылманы. Үҙенең хисле донъяһында йәшәй ул.

Ә бына уртансы ҡыҙым - 6-сы класҡа уҡырға барған Айсулпан - кескәй сағынан уҡ лидерлыҡҡа ынтылды, сәхнәлә сығыш яһарға яратты. Ҡайһы өлкәлә булһа ла, бирелеп эшкә тотона, алдынғылыҡты бирмәҫкә тырыша. Спортҡа бик ынтыла, әммә спорт менән ныҡлап шөғөлләнеп китер өсөн музыканы, башҡа шөғөлдәрҙе оноторға кәрәк шул. "Тамыр" студияһына бәләкәстән йөрөнө, төрлө тапшырыуҙарҙа ҡатнашты. Роман Пожидаевтың "Урман һуҡмағы", Ләйсән Сөләймәнованың "Сулпан" балалар фильмдарында төп ролдәр башҡарҙы, һуңғы ваҡытта Таңсулпан һылыуымдың

# ЛА...

киноһында төштө. Музыка мәктәбендә думбыра менән шөғөлләнә, "Дуҫлыҡ" халыҡ инструменттары ансамбленә йөрөй. Үҙе лә, ансамбль менән дә байтаҡ конкурстарҙа ҡатнашты, лауреат исемен яуланы. Бейеү студияһында ла шөғөлләнә, халыҡ ижады менән ныҡ ҡыҙыҡһына.

Юрматы улым бишенсе класҡа бара. Ул әлегә ныҡлап асылып етмәне, үҙен төрлө өлкәлә һынап ҡарай. Быйыл әсәйем менән Гөлнур апайым программаһына ҡоролған, хәҙер инде данлыҡлы "Йәйләү" лагерында ял иткәндә ҡурай менән ҡыҙыҡһынып, әле бер нисә көй һыҙғырта башланы. Математика яғынан шәп, компьютерҙы ла яҡшы белә. Техник өлкәгә китһә, яҡшы булыр ине, әлбиттә. Үҙе телгә бик отҡор, фәлсәфәүи фекерле егет. "Яҙыусы булырһың", тип шаяртһам, "Юҡ инде, бер ғаиләгә ул тиклем яҙыусы кәрәкмәй", ти.

Балаларым башҡортса бик яҡшы һөйләшә. Бик ғәҙел, ихлас күңелле, ярҙамсыл һәм хәйләһеҙ балалар, шуға ла был тормошта уларға еңел булмаясаҡ, әлбиттә. Әммә шулай булыуҙарында минең дә өлөшөм бар бит - мин бик шатмын.

**▶ Балалар менән яңғыҙ ҡалғас, "әсәйемдең яҙмышын ҡабатлайым бит" тип уйлағаның булманымы? Мәрйәм апайға ла бит иңендә биш баланы яңғыҙ күтәрергә тура килә...**

- Ысынлап та, башта "Әсәйем булдырған, мин дә бирешмәм", тигән фекерҙә инем. Әммә тора-бара үҙемдә ундай уҡ көс юҡ икәнлекте аңланым. Әгәр ҙә ағайым, әсәйем, апайҙарым һәм һылыуым булмаһа, мин ни эшләр инем икән, тигән уй башыма йыш килә хәҙер. Һәм тағы ла, мин бит балаларымдың атайҙарына кейәүгә сыҡҡас, асылыма хас булғанса, ғаилә тормошона бар ихласлығымды арнағайным. "Кейәүгә сығып, балалы булайым да, айырылайым", тип планлаштырылмағайны бит. Шуға ла яңынан йәшәү тәмен тойоу өсөн дә ярҙам кәрәк булды миңә. Әммә мин тулы ҡанлы тормош менән йәшәүсе зат, үҙемде бер бахыр, ҡорбан итеп тойоу миңә хас түгел. Тормошом өсөн дә, Хоҙай биргән һәләттәремде асыу өсөн дә, ул ебәргән ҡыуаныстар, мөмкинлектәр өсөн дә үҙем яуаплымын. Ни өсөн мин үткәндәргә үкенмәйем? Сөнки Хоҙай әле аҫҡан юлдар, кисергән кисерештәрем, мин ҡайнаған мөхит - барыһы ла бәхет. Мин ошо бәхетем өсөн дә яуаплымын, шуға уның ҡәҙерен беләм, шөкөр итеп йәшәйем. Хоҙай аҫҡан юлдарҙың береһендә мин оло мөхәббәтемде лә таптым.

**▶ Был йәштә "мөхәббәт" тигән һүҙҙән ҡурҡмайһыңмы? Берәүҙән дә тартынмай, ғорур ҡарап, "ғашиҡ булдым" тип әйтә алаһыңмы?**

- Әлбиттә. Мин бер ваҡытта ла үҙ теләктәремде һәм фекеремде белдереүҙән ҡурҡманым. "Мөхәббәттә кеше әллә ниндәй батырлыҡтар эшләй ала", тигән хәбәр буш һүҙ ул. Тормошта ла батыр булған кеше генә эшләй ул батырлыҡтарҙы. Ә тормоштағы ҡурҡаҡтар һөйөүҙә лә хәстрүш була.

Яңғыҙ сағымда кистәрен эштән ҡайтып киләм дә, паркта парлашып йөрөгән ғашиҡтарҙы күреп, "Өфө буйлап бер ошолай парлашып йөрөп, романтик мөнәсәбәттәр күреп, ир-егет хөрмәтен татып булманы инде", тип уйлана инем. Һәм көтмәгәндә килеп тыуған яңы мөнәсәбәттәрем миңә былаларҙың барыһын да бирҙе: йәштәр кеүек осрашыуҙарға ла йүгерҙем, рок-концерттарға йөрөнөм, көнләштем, яндым-көйҙөм, Уға ҡарата булған хистәрем менән бартирә яғымды яраттым. Иң мөһиме - ижад итергә көс асылды. Әгәр ошо торошом булмаһа, мин дә, бәлки, үҙ-үҙҙәренә бикләнеп йәшәгән ҡатындар кеүек, донъяны ҡара-һорола ғына күреп ултырған булыр инем. Нисек кенә күҙ тейеүҙән ҡурҡһам да, әйтәйем, мин бөгөнгө халәтем менән ҡәнәғәт, бик ҡәнәғәт...

**▶ Тормош бөтөнлөгө нимә ул һинең өсөн? Балаларҙамы?**

- Ул минең күңел бөтөнлөгөм. Әгәр ҙә минең күңелем бөтөн була икән, минең янымдағы балаларымдың да, яҡындарымдың да күңеле бөтөн булып, тормошом да бөтөн була. "Балалар хаҡына йәшәү" тигәндә лә ошо урында инҡар итәм. Кеше балалар хаҡына түгел, ә үҙе хаҡына балалары менән бергә йәшәргә тейеш. Һин уларҙы насарлыҡтан ҡурсалаусы, уларға мөмкин тиклем ярҙам итеүсе генә. Улар айырым йән булып яратылған, камил кешеләр. Улар һинең донъяңды тулыландырырға түгел, ә үҙ донъялары менән бәхетле булырға хаҡлылар. Ә һин улар менән бәхетлеһең, тик үҙ юлың, үҙ бурыстарың тураһында онотмаҫҡа тейешһең. Шул саҡта ғына әсәйҙәр һәм балалар мөнәсәбәте, кем кемгә нимә тейеш, тигән күҙлектән түгел, ә һәр кем бәхетле булыуы менән яҡын кешеһен бәхетле итә, тигән күҙлектән сығып ҡоролалыр.

Был балаларға ғына түгел, яратҡан кешеңә лә, туғандарыңа ла, дуҫтарыңа ла ҡағыла. Һин бер кемде лә бурыслы итмәйһең, һиңә лә бер кем бер нимә тейеш түгел. Һөйөүҙе һәм бәхетте һығып алып булмай, уға шарттар ғына тыуҙырырға кәрәк. Ә һауа бөтә башлай икән - ғәйеплене эҙләүҙән толҡа юҡ, артабан кит тә бар. Кәрәк булһа - ҡыуып етерҙәр, кәрәк булмаһа - үҙ юлдары менән китерҙәр.

Һинең бәхетең һәм азатлығың - ул Хоҙайҙың ҡөҙрәтен танып белеүҙер. Шуны ла әйтеп үтәйем: мин Хоҙайға үҙ кисерештәремде Ул миңә биргән телдә белгертәм, доғаларымды ла туған телдә еткерәм. Балаларым күңеленә лә ошо хәҡиҡәт һалынған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы" рубрикаһын кемдәрҙер "Киске Өфө" һары матбуғат баҫмаларын ҡабатлай башланымы?" тип ҡабул итте. Рубриканың маҡсатын аңламағандарға тағы бер тапҡыр иҫкәртеп үтәбеҙ: был әңгәмәләрҙә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ милләт әсәһе бурысын үтәү юлындағы кисерештәре, яныуҙары, ҡатмарлыҡтары тураһында һөйләй. Ғәҙәттә, ҡатын-ҡыҙҙар бик оҙаҡ үҙенең идеаль ишен эҙләй һәм бала табыу йәшен уҙҙырып ебәрә, йә булмаһа, башҡа милләт вәкиле менән ғаилә ҡороп, башҡа милләткә балалар үҫтерә. Әммә беҙҙең арала ирҙән уңыу-уңмауға, балаларын яңғыҙы үҫтереүгә ҡарамаҫтан, үҙенең милләт әсәһе бурысын мотлаҡ үтәргә кәрәк икәнен аңлаған, шул яҙмышын ҡабул иткән, милләт әсәһе булыуҙы оло бәхеткә һанаған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа бихисап. Был рубрикабыҙ шундай ҡыҙҙарыбыҙ менән асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙәрҙе үҙ эсенә ала һәм "Бер нигә ҡарамай, милләтеңә балалар үҫтер!" тигәнгә ишаралай.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

ҒАИЛӘ ҺАБАҠТАРЫ

# ИРҘӘРГӘ НИМӘ КӘРӘК?



**Ғаиләлә иң тәүге талаш-тартыш ҡатын-ҡыҙҙың ир-егетте үҙ күҙлеге аша ҡарауынан килеп сыға. Йәнәһе, улар бер ғаилә булғас, икеһе лә бер төрлө уйларға, бергә хәл итергә, бергә йөрөргә тейеш һ.б., һ.б.**

Был күренеш хатта егет менән ҡыҙ саҡта уҡ, әле ғаиләгә тиклем үк, барлыҡҡа килә. Ҡыҙ егеттең уныңса ғына уйлауын, эшләүен, йәғни тулыһынса үҙенең ҡарамағында булыуын теләй, талап итә. Ысынында иһә улай ғына булмай шул. Ә нимә кәрәк һуң ул ирҙәргә? Ғаилә психологтарының тикшеренеүҙәре ошондай һөҙөмтәләрҙе биргән. Ирҙәргә өс нәмә кәрәк икән. Беренсеһе, үҙенең кәрәклеген тойоу. Икенсеһе, ирекле булыу. Өсөнсөһө - уны нисек бар, шулай ҡабул итеүҙәре. Тик был теләктәр бер-береһе менән йыш ҡына һыйышмай китә. Өйләндең икән - иркең тарая, өйләнмәһәң, берәүгә лә кәрәгең юҡ кеүек. Ҡатының менән уртаҡ тел таба алмаһаң, азатлыҡ та юҡ, кәрәклек тә. Нисегерәк хәл итергә был мәсьәләне?

Ир-егет үҙенең кәрәкле икәнлеген тойһон өсөн баштан уҡ ғаилә менән идара итеүҙе уның ҡулына бирергә кәрәк, тип яҙалар. Тик беҙҙең ҡатындар был идара итеүгә түҙә алмай китә бит әле. Уларға бит тиҙ арала күренгән эштәр кәрәк. Ә ирҙәр улар бер үрҙе яулай ҙа, ял итеп ала, унан икенсе үргә ынтыла. Бер үрҙе яулаған ваҡытта икенсеһе хаҡында уйлай ҙа алмай. Улар бер ынтылышты тамамламайынса, икенсеһенә үрелмәй. Быны ошо сиратланышты аңларға кәрәк. Был саҡта ир-егет үҙенең ғаиләлә кәрәкле булыуынан рухи күтәрелеш ала.

Ирҙәргә, ҡатын-ҡыҙҙан айырмалы рәүештә, бер үҙе генә була ала торған айырым урын талап ителә. Был спорт зал, гараж, бүлмә йәки балыҡҡа, һунарға йөрөү ҙә булырға мөмкин. Елде йортта бикләп тотоп булмаған кеүек, ир рухын да кәртәлә йәшәтеүҙән яҡшылыҡ көтмә. Бындай осраҡта ул көйөнә, тупаҫлана, мыжый башлай. Ә ярты көн булһа ла үҙ "мәмерйәһендә" булып килһә - тыныслана, яйланып китә. Был уның шулай теләгәненән түгел, ә тәбиғәте шундай булғандан килә.

Ир кешене өйрәтеп тә, әрләп тә, ҡурҡытып та үҙгәртеп булмай икәнде аңлатып тороуҙың кәрәге лә юҡтыр. Ирен үҙгәртергә тотонған ҡатындарҙан улар ҡасыу яғын ҡараясаҡ. Ҡасмаған хәлдә, талаш-тартыштың ахыры ла булмаясаҡ. Шунлыҡтан, йә уларҙы нисек бар, шулай ҡабул итергә, йә йонсотмаҫҡа -уны нисек бар, шулай ҡабул итәсәк икенселәр табыласаҡ.

Был фекерҙә ирҙең ирлек намыҫын тапамау, уның иркен сикләмәү, киреһенсә, күберәк яуаплылыҡ һалыу һәм нимәнелер үҙаллы хәл итеүен көтә белеү аҡылы һалынған. Һынап ҡарағыҙ әле.

# НИСӘ БАЛА ТАБЫРҒА?



**Рәсәйҙә бала табыу йәшендәге бер ҡатынға 1,6 бала тура килә, ябай итеп әйткәндә, бер йәки ике. Өс бала табыусылар 6 процент ҡына. Бала ҡартайта, тигән аҡылды баштарына һеңдергән әсәйҙәр ауырлы йөрөү һәм бала бағыуҙы ҡартайыу процесын шәбәйтеүсе кире күренеш итеп ҡабул иткән.**

Ә ысынында йөклөлөк, бала имеҙеү һәм бала менән мәшәҡәтләнеү ҡатын-ҡыҙҙың ҡартайыу процесын тотҡарлаусы иң һөҙөмтәле бер сара икән. Табиптар ҙа ҡырҡтан һуң үҙеңде яҡшы тойоу, йөҙ-төҫтө һаҡлау һәм артыҡ һимермәү өсөн 3-4 бала табырға кәрәклекте иҫбатлаған.

Бөгөн ҡатын-ҡыҙҙың аналыҡ, һөт биҙҙәре кеүек ҡатын-ҡыҙ ағзалары ауырыуҙарына дусар булыуы ла уларҙың ауырлылыҡты аҙ кисереүендә. Ағзалар үҙ функцияларын аҙ үтәй йәки бөтөнләй үтәй алмай ҡартая һәм ауырыуға әүеререлә. Уйлап ҡараһаң, заманында 8-10-ар бала тапҡан апайҙар ниңә ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарын белмәгән, сөнки уларҙың ағзалары үҙ тәғәйенләнеше менән мәшғүл булған һәм ҡандары ике-өс йыл һайын алышынып торған. Күп балалы ҡатындар ғүмерҙәрендә яҡынса 40-50 күрем күрһә, ике балалы ҡатын быны 450-500 тапҡыр кисерә һәм был уға насар йоғонто яһай икән. Тәбиғи рәүештә етлеккән ҡатындың репродуктив системаһы 6-9 балаға иҫәпләнгән. Балалар араһындағы айырма иһә ике-дүрт йәшкә. Был арауыҡта организм үҙенә кәрәкле витаминдарҙы ла туплап һәм ял итеп өлгөрә, тиелгән. Йәғни, тәбиғәт үҙе белә.

Күп балалы әсә стрестарға ла бирешеп бармай, апатияға бирелмәй, физик яҡтан ғына түгел, рухи яҡтан да сыныҡҡан була. Ул энергиялы, хәрәкәтсән, балалар аураһында оҙайлы булғанға эске донъяһында ла негативҡа урын аҙ, ыңғай, матур тойғоларҙы күберәк кисерә. Бөтөн был ыңғай күренештәр һәм кисерештәр күп балалы әсәгә оҙағыраҡ йәш һәм һөйкөмлө булып ҡалыуға булышлыҡ итә.

Борон, хатта борон да түгел, бынан ҡырҡ-утыҙ йыл элек һәр йортта 6-8-10-ар бала булған. Боронғо заман хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Тимәк, ҡатын-ҡыҙ үҙенең тәбиғи тәғәйенләнешен үтәгән. Бөгөн ауылдарҙа быны яртыһы йәки яртыһынан аҙырағы үтәлһә, ҡалала бөтөнләй үтәлмәй тиерлек.

Шулай итеп, ҡатын-ҡыҙҙар, һеҙҙе косметология салондары, диета һәм яһалма ҡаш-керпек түгел, ә бала табыу күпкә йоғонтолораҡ йәшәртәсәк, сәләмәтерәк итәсәк. Табығыҙ бала, ғаиләгеҙгә шатлыҡ, яҡты эмоциялар, бәхетле мәшәҡәттәр алып ҡайтығыҙ.

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА.**

**✓ Тотош арҡам менән кемдеңдер ҡыҙыҡһыныусан күҙәтеүен тойҙом, әммә ҡайырылып ҡарап текәлеүсене асыҡларға бик теләһәм дә мәҙәниәт йортонда борғаланыуҙы килештермәй, һенағастай ҡатып ултыра бирҙем.**

Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# САҠЫР МИНЕ ЗӘҢГӘР КИҢЛЕКТӘРГӘ...

(Повестан өҙөк)



1

...Курсанттарҙы аҙна һайын увольнениеға сығаралар. Тәҡдим ителгән хеҙмәтләндереүҙәр сикләнгән, иғтибарҙы йәлеп итерлек күңел асыу саралары наҡыҫ булған хәлдә лә, ҡалаға сығырға атлығып торалар. Көнө буйы иректә ирәүәнләүҙе бер ни ҙә алыштыра алмай шул. Бына сират, ниһайәт, миңә лә етте.

Артыбыҙҙан КПП-ның шыуҙырмалы тимер ҡапҡаһы шаҙырлап ябылыуы булды, ялға сыҡҡан төркөм өйкөлөшөп үҙәк майҙанға килде һәм бер аҙҙан ҡеҙимге кейенгән ҡала халҡы араһында буталып, ҡомға һеңгән һыуҙай юҡҡа ла сыҡты. Мин дә тәғәйен генә барыр ерем, осрашыр кешем булмағас, майҙан уртаһында яңғыҙым аңшайып тороп ҡалдым да, битараф ҡиәфәттә янтирәмде бер аҙ тамаша ҡылғас, майҙанға терәлеп урынлашҡан паркҡа инеп, суйырташ һуҡмаҡтың ике яғына теҙелгән эскәмйәләрҙең береһенән урын алдым.

Сентябрь айының икенсе яртыһы. Миҙгелдең салт аяҙ балҡыштан гөлтләп тоҡанған мәле. Илаҫлектән, йылымыс елаҫлектән шаңғырап торған моңһоу ҙа, хозур ҙа, сабыр ҙа әбейҙәр сыуағы. Тик бында көҙ беҙҙең яҡтарға ҡарағанда һуңлаңҡырап килә, шуға күрә паркты ураҡҡан ҡара сағандар, аҡ тирәктәр, бөҙрә өйәңкеләр миҙгел ялҡынында дөрләп янмайҙар, уларҙың тәлгәштәренә, суҡтарына яңы-яңы һиҙелер-һиҙелмәҫ һарғылт таптар яғылған. Ағастар юғарыла ҡуҙғыған талғын һауа ағымын һиҙгер эләктереп алалар ҙа нимәләр хаҡында ипле генә шыбырҙашалар. Билдәле, ҡара сағандарҙың япраҡтары ҡаты, шырт, шуға күрә лә улар бер-береһенә ишетелеп бәрелешә, ә йәй уртаһында мамыҡ осорған тирәктәрҙең тауышы наҙлы ла, йомшаҡ та. Ҡаршылағы бейек өйәңкелә ҡарашымды оҙағыраҡ туҡтаттым. Таныш, яҡын, ҡәҙерле ағас, ул тыуған ауылымдағы өй алдарында, йәнә клуб тәҙрәһенең төбөндә үҫә. Кискеһен өлкәндәр өсөн ҡуйылған киноны шул ағастың башына менеп, йәйелгән ҡолаҫҡа оҡшаған йыуан ботаҡҡа теҙелешеп ултырып, Нәғимә ҡарсыҡтың ылашынан урланған ҡаты ҡоротто имә-һура тәҙрә үтә ҡарай торғайныҡ, хас та ҡуналҡаға, тәнәүгә менгән тауыҡтар инде. Хуш еҫле, үҙенсәлекле әскелтем тәмле ауыл ризығы иҫемә төшкәс, ауыҙыма эркелгән ҡара һыуҙы ҡылҡылдатып йотоп ҡуйҙым. Урынға талашып, этешеп-төртөшөп өйәңке башынан ҡолап та төшәбеҙ ҡайһы саҡ, тәкмәсһәк тә, һинд йә балалар өсөн тыйылған киноны ҡарау теләге еңә барыбер, ауыртҡан ерҙе өрөп-ыуып, кейемдәге туҙанды ҡаға һалып, ағас башына кире үрмәләйбеҙ.

Төпһөҙ зәңгәр күктә семтем дә болот әҫәре күренмәй, тышау буйы күтәрелергә өлгөргән ҡояш-йомғаҡтан түбәнгә ҡарай йылы, яҡты нур ептәре тағатыла. Тирә-йүн, баш осондағы баҙыҡлығы уңа төшкән зәңгәр сатыр оҙайлы йоҡоға талыр алдынан була торған йыбаныулы рәхәтлек кисерә. Ошо тынлыҡ тағы ла аҙна-ун көн тирәһе дауам итер ҙә, теге йонсоҡкос мыжыҡ ямғырҙар килеп, ыжғыр елде юлдаш итеп алып, һуңға ҡалған юлсылай, көнө-төнө тәҙрә быяларын сиртергә керешер, асманды төҫһөҙ болоттар ҡаплар, ер томан юрғанын ябыныр. Тик әле бөтә тәбиғәт өлөшөнә төшкән көмөшөнә, көн сыуағына ҡыуана. Ҡултыҡлашҡандай итеп бер-береһенә тағылып алған ике ҡыҙ аяҡтарыма эләгерҙәй булып, терәлеп тиерлек эргәмдән генә үттеләр ҙә эскәмйә аша барып ултырҙылар. Юҡтан ғына ҡыҙыҡ табып көлөшөп алалар, ара-тирә минең яҡҡа һынаулы, саҡырыулы ҡараш ташлайҙар, яндарына барып, башлап һүҙ ҡушыуымды көтәләр шикелле. Ҡалала бухгалтерҙар әҙерләүсе училище бар тип ишеткәйнем, был икәү шунан булырға тейеш. Берәүһе иңенә ҡәҙәр төшкән, үрелмәгән һары-ерән сәсле, өлгөргән арыш башағына оҡшаған аҡһыл ҡашлы, һайыҫҡан йомортҡаһылай һипкелле йөҙлө, өҫтөнә лә аҡ борсаҡ төшкән киң итәкле сей һары күлдәк кейгән. Әйтерһең, ҡабығынан әле генә арынған тауыҡ себеше. Икенсеһе яңы мәктәп партаһы артынан сыҡҡан үҫмер ҡыҙый, хәрәкәттәре килбәтһеҙ, һыны әрпеш өйрәк бәпкәһен хәтерләтә, ул ултырып сыҙамаған ҡулсыр бала ише сандалыйға тартым туфлилы ҡамыт аяҡтарын бәүелтә, ҡайта-ҡайта тымаулы төмөз танауын тартып-тартып ала. Әрһеҙ, һөмһөҙ ҡыйшаңлаҡтарҙы күрмәмешкә һалышып, ҡарашымды ситкә алдым. Һанламай йөҙ сөйөүемде оҡшатмаған Себеш асыҡ, ишетелерлек итеп, уларға күңелемдән ҡуйған баһамды минең тарафҡа сипылдап оҙатты: "Бешмәгән!" Үпкәләнеләр булыр, тороп уҡ киттеләр.

Эргәләге афишалар таҡтаһына күҙ һалдым. Кинотеатрҙа күп тапҡырҙар ҡараған, һәр күренеше таныш, актерҙарҙың һүҙҙәре ятланып бөткән кинофильмды күрһәтәләр икән. Ҡыҙыҡ түгел. Мәҙәниәт һарайында Калининград филармонияһынан килгән артистар ҡатнашлығында классик музыка концерты. Башланырға ғына тора. Таң тишегенән ҡуйғандар, моғайын да, кеше йөрөй һалып бармаған берәй үтемһеҙ нимәләр инде шунда. Һайланаһы түгел, көндө нисек тә үткәрергә кәрәк бит. Майҙандағы асмалы тәҙрәһе тротуарға ҡараған киоск-кассаға барып, дүрт-биш кешенән уҙмаған сиратҡа баҫып билет алдым. Ишек ауыҙындағыларға юл биреп, урынымда бер аҙ тапанғас, эскә үттем. Иркен фойела тамашасылар артыҡ күп түгел, улары ла шартына тап килтереп кейенгән; ҡатын-ҡыҙҙар киске күлдәктә, ир-аттың бер нисәүһенең өҫтөндә килешле, тышҡы түш кеҫәһенән аллы-гөллө ҡулъяулыҡ осо күренгән смокинг, иҙеүҙәрендә күбәләк, мин генә һалдат формаһында, шул парад кейемендә булған хәлдә лә аҡҡоштар араһына яңылыш килеп ингән ҡара ҡарғалай башҡаларҙан айырылып күренәм. Парлашып йөрөп яҡкан, йә бәләкәй генә ҡор яһап, түңәрәккә баҫҡан халыҡ тауыштарын баҫып, ипле генә әңгәмәләшә, аралаша, үҙҙәрен зыялы, тәрбиәле тота, әйтерһең, урта быуаттарҙа затлы һарайға балға йыйылған аристократтар. Ят күҙҙәргә артыҡлап салынырға теләмәй, мөйөшкәрәк барып баҫтым. Ысынлап та, бында концерт тыңлау һылтауынан йыйын эшһеҙҙәр, әрәмтамаҡтар һәм ялҡауҙар йыйылғандыр. Ошо мәлдә төпһәндең төбөндә ятҡан, биләмәһе 50-60 йорттан уҙмаған Сыуаҡтау ауылында эләгеп-йығылып,ең һыҙғанып ураҡ ураларҙыр, картуф ҡаҙаларҙыр, баҡсаларын, кәртә-ҡураларын ҡышҡылыҡҡа әҙерләйҙәрҙер. Өҫкә асыҡ түшле смокинг кейеп, муйынға күбәләк тағып иген игеп, ер һөрөп булмай. Һәр кемдең үҙ мөхите шул, ә минең ыҙмам ауылым эргәһендәге Аҡтау ҡаяһы бейеклегенән ары китмәгәндер. Шул юғарылыҡтан, шул йәшәйештән ары күтәрелә алмамдыр.

Өсөнсө ҡыңғырауҙан һуң артҡа ҡалыңҡырап ярым ҡараңғы залға үттем. Бындағы бәрхәт тышлы, ҡәнәфигә оҡшаш йомшаҡ ултырғыстарҙа ултырыу үтә лә яйлы, беҙҙең клубтағылар ише ҡымғырлаған һайын ығырлап-шығырламайҙар, ризаһыҙ сыйнамайҙар. 15-20 башҡарыусыны берләштергән симфоник оркестр түргә урынлашырға ла өлгөргән. Тотош арҡам менән кемдеңдер ҡыҙыҡһыныусан күҙәтеүен тойҙом, әммә ҡайырылып ҡарап текәлеүсене асыҡларға бик теләһәм дә мәҙәниәт йортонда борғаланыуҙы килештермәй, һенағастай ҡатып ултыра бирҙем. Оҙон итәкле ҡыҙыл атлас күлдәк кейгән оло йәштәрҙәге конферансье йыбаныулы тауыш менән тәүге номерҙы иғлан итеүе булды, сөрәкә башында ялбыр аҡ сәстәре һибелеп таралған, иҙән таҡтаһылай йоҡа кәүҙәле, тәбәнәк буйлы етеҙ хәрәкәтле дирижер йүгерә-атлай сәхнә уртаһына сығып та баҫты. Ул биленән бөгөлөп, итәғәтле эйелгәндән аҙаҡ, ҡалҡыу урынға күтәрелеп оркестрға боролдо һәм мөғжизәле, ноталарға һыймаҫ тауыштар иленә осорға йыйынғандай, ҡоласын йәйеп, дәртле талпынып, ҡулындағы таяғын болғап ебәргәйне, ян-тирәгә сихри, серле ауаздар таралды, тамашасыларҙы, шул иҫәптән мине илаһи киңлеккә, төпһөҙ бейеклеккә әйҙәп алып китте лә тылсымлы бауҙарға тағылған моң бишегендә наҙлы тирбәтергә, бәүелтергә тотонդо.

Үҙемде таныш түгел, әммә күптән көткән әкиәт иленә барып юлыҡҡандай хис иттем. Бер-бер артлы Шопен, Шуберт, Рахманинов, Чайковский, Свиридов, Бетховен, Бах әҫәрҙәре яңғыраны. Бөйөк композиторҙар ҡабатланмаҫ тылсым эйәләре булған икән дә баһа! Осраҡлы, теләкһеҙ генә сәфәргә сығып, көтмәгәндә күптән эҙләгән табышына килеп юлыҡҡан юлсылай, концертҡа хайран ҡалдым, арбалдым. Залда шылт иткән тауыш та ишетелмәй, һәр кем яттар өсөн хис йоҙағы менән бикләнгән серле эске донъяһына сумған. Моң ҡояш нурылай, иҫкән елдәй һәммәһенә тигеҙ бүленә, тигеҙ таратыла, һәм шул уҡ ваҡытта һәр кем уны үҙенсә ҡабул итә, үҙенсә тоя.

Концерт тамамланды. Тамашасылар аяғөҫтө баҫып алҡышлағандан аҙаҡ, симфоник оркестрҙы гөлләмәләргә күмде, залдан "браво", тип ҡысҡырған тауыштар ишетелде.

Дөйөм ағымға эйәреп, майҙанға сыҡтым да, башҡа барыр ерем булмағас, кире паркҡа бороларғайным ғына, артымдан кемдеңдер баҙнатһыҙ сәләмләүен ишеттем:

- Һаумыһығыҙ?

Көтөлмәгәнлектән һиҫкәнеп боролоп ҡарағайным, минән ике-өс аҙым ситкәрәк замполитыбыҙҙың ҡатыны баҫҡан, имеш. Өҫтөндә ҡыҫҡа, кәүҙәһенә һылашып торған аҡ төҫтәге костюм һәм балаҡ остары киңәйә барып бөткән, тәненең нескәлектәрен сағылдырған клёш салбар. Алтын ялатылған оҙон сылбырға беркетелгән бәләкәй аҡ сумочка яурын аша һалынған. Аҡтан-аҡ фонда һөйкөмлө йөҙ тағы ла ағарыңҡырап киткән төҫлө, ә саманан тыш яҫы эшләпә аҫтынан сығып таралған, үрелмәгән бөҙрә сәстәр ҡара болоттай күренәләр. Ҡатын, әйтерһең, мода журналының битенән сыҡҡан да, күҙләүселәрҙе һоҡландырып, салонға фотосессияға китеп бара. Ер аҫтынан ҡалҡҡандай ҡапыл пәйҙә булған таныш һынды шәйләгәс, саҡҡа ғына юғалыңҡырап ҡалдым.

- Яңылышмаһам, һеҙ беҙҙең һалдат шикелле?

Әйтелгәндәрҙе "Һеҙ беҙҙең ялсымы?" тигән һымағыраҡ ҡабул иттем. Офицер йәмәғәте икәнлеккә баҫым яһап түбәнһетмәксе, мыҫҡылламаҡсы.

- Ғәфү итегеҙ, һеҙҙең һалдат түгел, ошо ҡалалағы сержант мәктәбенәнмен! - Сибәрлек алдында бәлйерәп төшмәгәнлегемде иҫбатларға теләп, ярайһы уҡ тупаҫ яуапланым да, "юнылмаған ботаҡлы бүрәнә"нән һалдырып, эстән үҙемде тиргәп ҡуйҙым.

- Килешһеҙ һүҙҙәремде иғтибарға алмағыҙ берүк, кисерегеҙ. Уйымдағын уйлап әйтмәйем шул ҡайһы саҡ. - Өндәшеүсе әле әйткәндәренә үкенгәндәй, ғәфү үтенгәндәй, шулай тине лә подиумдан барғандай килешле баҫып, йәнәшәмдән төштө. Мин дә көтмәгәндә тап булған юлдашымдың атлауына яраҡлаштырып, аҙымдарымды һәлмәкләттем. Ҡаршыбыҙға осрағандар беҙгә аптыраңҡырап ҡарап уҙалар, ә майҙан уртаһындағы һәйкәл янында туңдырма ялаған ике курсант асҡан ауыҙҙарын йоморға онотҡан. Ҡала бәләкәй шул, бер-береһен танып-белеп бөткәндәр. Паркҡа инеп, минең өсөн таныш эскәмйәгә ултырҙыҡ. Күҙ ҡырыйым менән генә яныма күҙ һалдым. Ҡатынды бына ошолай яҡындан, терәлеп тиерлек тәүләп күреүем.

**(Дауамы бар).**

*✓ Халҡыбыҙҙың аҡылы, тормош тәжрибәһе тупланған һүҙҙәрҙе мин әҫәр туҡымаһында ялтырап торһон өсөн генә тағып ҡуйманым, ә уларҙың тәрән мәғәнәһен бәғзе ваҡиғаларға, идея-йөкмәтке айышында үҙемә таяныс итеп алдым.*



САЛАУАТ ЮЛАЕВ ПРЕМИЯҺЫНА ТӘҠДИМ ИТЕЛДЕ

**Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына тәҡдим ителеүселәр исемлегендә яҙыусы Гөлнур Яҡупова ла бар. Уның менән уҡыусылар араһында киң танылыу яулаған "Ҡатындар" трилогияһы хаҡында әңгәмәләшәбеҙ:**

# ӘҘӘМ ҮӘ ҺАУА БАЛАЛАРЫ ХАҠЫНДА...



**➔ Трилогия "Ҡатындар" тип аталһа ла, әҫәрҙә ир-ат образдары ла бихисап, хатта тигеҙ бер нисбәттә бирелгән дә һымаҡ?**

- Ысынлап та шулай. Был һорауҙы миңә осрашыуҙарҙа уҡыусыларым да биргеләй. "Һеҙ бит ирҙәрҙе илатырлыҡ әҫәр яҙғанһығыҙ. Ниңә беҙ тормош ауырлығын ҡатын-ҡыҙ иңенә һалабыҙ икән?"- тине бер уҡыусым, ир затынан. Икенсе берәүһе интернеттан хат һалды: "Ҡатыным донъяһын онотоп, төн йоҡламай уҡығас, ниндәйерәк китап был, тип күҙ йүгертеп кенә алырға иткәйнем, айырыла алмай, тотош уҡып сыҡтым. Ғәжәп иттем: Ватан һуғышы, афған, чечня ваҡиғалары, Әхмәҙин - Бүреһуҡҡан ҡарт, Сәмиғуллин, Әмин абый, ә төп героиня Нуриянның тормош юлдашы Фатих, ә тағы фельдшер Әүхәт, тағы... Һанап та бөтөрөрлөк түгел ир-ат образдарын да!"

Быңдай хаттарға мин ҡыуанып яуап бирәм, тимәк, үҙем хыял иткәнсә, "Ҡатындар" ғаилә китабы булып бара. Мин бит Әҙәм үә Һауа балалары, ишләләр ҡорған йәмғиәт хаҡында яҙҙым, героиняларым амазонка түгелдәр (әйткәндәй, тарихтың ошо хаҡтағы биттәренә лә саҡ ҡына иғтибар бүлеп киттем). Ғөмүмән, хатты күп алам. Скайп аша айырым кешеләр, коллективтар ҙа бәйләнешкә сыға, телефон хаҡында әйтеп тә тормайым... Себер, Силәбе, Ырымбур яҡтарында ла уҡыусыларым күп. Түбән Варта ҡалаһында башҡорт, татар телле уҡыусылар исеменән китапханасы Зөлфиә Заһиҙуллина бәйләнешкә сыҡты, 30 дана китап һораны, вахта менән эшләгән Артур тигән егет аша биреп ебәрҙем. Күпмелер ваҡыттан ундағы китап һөйөүселәр, йыйылышып, конференция уҙғарғандар, аҙаҡ миңә фотолар килеп төштө... Ҡыҫҡаһы, китапҡа сиктәр, алыҫ аралар ҡамасау түгел.

**➔ Трилогияла ғаилә, ир менән ҡатын мөнәсәбәте, бала тәрбиәләүгә ҡағылышлы мәҡәл-әйтемдәр киң ҡулланыла. Мәҫәлән: "Бер һөйгәнем өсөн алтмыш һөймәгәнде һөйөрмөн", "Атайлы бала - арҡалы", "Ир ҡайғыһы - итәктә, бала ҡайғыһы - йөрәктә" һ.б., уларҙы әҫәргә башҡорт халҡының тел байлығын күрһәтер өсөн индерҙегеҙме?**

- Һеҙ әйткән маҡсатҡа ла өлгәшелә, әлбиттә. Әммә халҡыбыҙҙың алтын аҡылы, тормош тәжрибәһе тупланған һүҙҙәрҙе мин әҫәр туҡымаһында ялтырап торһон өсөн генә тағып ҡуйманым, ә уларҙың тәрән мәғәнәһен бәғзе ваҡиғаларға, яҙмыштарға, геройҙарымдың холоҡ-фиғеленә бәйләп, идея-йөкмәтке айышында үҙемә таяныс итеп алдым. Тәүге мәҡәл ҡолаҡҡа йыш салынмай, ә бит уның эстәлеге, тәрбиәүи асылы иҫ киткес фәһемле. Уны мин трилогияның икенсе китабына (романына) исем итеп ҡуйҙым һәм ул тотош сюжет ҡоролошон бәйләүсе еп булып торҙо. Елеге, ерлеге был әйтемдең Толпарлы килендәре: һөйгән йәре артынан ят яҡтарға килеп ереккән, уның хаҡына тағы алтмышты (сакраль мәғәнәле һан), тимәк, нәҫел-ырыуын, халҡын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һөйгән, үҙ иткән Таһура - Йәнкиҫәк, Фариза, Заһира образдары аша күрһәтелә. Бер һөйгәне артынан Украинаға киткән Мәүлиҙә лә шул уҡ юҫыҡта ҡылыҡһырлана. Автор булараҡ, ҡатын-ҡыҙ затының ҡәҙере, бәхете хаҡында төптән уйланыр йәштәге, ул һәм ҡыҙ әсәһе, өләсәй йәшендәге автор булараҡ, был тәңгәлдә яҙғандарымдың йәш быуындың зиһененә үтеп инерлек булыуына өлгәшергә ынтылдым. Нотоҡ уҡыманым. Ә геройҙарымдың тормошо, донъяға ҡараштары аша үткәрҙем үҙемдең өгөттәремде. Йәғни, кеше, яҙмыш елдәре ҡайҙа ғына ташламаһын, үҙенең ватанына рухи тоғролоҡ һаҡларға, милләтенең бәҫен төшөрмәй йәшәргә тейеш. Әҫәремдәге Ҡырымдан төшкән килен Таһура, төп героиня Нурияның бәйәндәренә Татар әбекәй булып "Ҡыҙ бала" тигән беренсе китапта уҡ килеп инә, ҙур башҡорт ауылының һөйөклө кешеһенә әүерелә, оҫта тегенсе даны менән ғүмер һөрә, Силәбе ҡыҙы үҙе сибәр, үҙе егәрле Фаризаның тимерсе Хәйруллаға булған мөхәббәте күп йылдар буйы ауылдың күҙенән, теленән төшмәй, ә Баймаҡ ҡыҙы уҡытыусы Заһира йәш ҡыҙҙарҙы был яҡтарҙа ятыраҡ һөнәргә, балдаҡ аша үткәрерлек дебет шәл - үәл бәйләргә, өйрәтә... Мәүлиҙә Донецк университетында профессор дәрәжәһенә етә.

**➔ Трилогияла Сәмәй ҡортҡа, Көнсөл Маһый, Салпа Сәғүрә, Зоя һ.б. кеүек кире образдар ҙа бар, уларҙың әҫәрҙәге роле ниндәй?**

- Үҙенән-үҙе шулай килеп сыҡты, кире геройҙарыма ла аҡланырға форсат бирелде. Төрлө юлдар менән килде улар рухи таяныс табыуға: самогонсы Сәмәй ҡарсыҡ Күктән ишара алды, Көнсөл Маһыйҙың өлкән ҡыҙы Миңзәлә һөйгәне Әшрәфте ҡыҙғаныуы арҡаһында уның яратҡаны Әсмәнең өйөнә ут төртөп, шул үрт эсендә үҙе һәләк булды, кесе ҡыҙы Миләүшә хыянатсыл, үҫсел исеме күтәреп, сит илгә сығып китте. Маһыйҙың тиреһенә инеп ҡараным - сыҙарлыҡ түгел! Миләүшәне ауылға ирен, ике малайын эйәртеп ҡунаҡҡа ҡайтарҙым, хәлен саҡ ҡына еңеләйттем, ә инде улы Айсыуаҡтың аҡыллы, һөймәлекле егет булып үҫеп етеүе әсәнең ҡартлығын ҡояшлы итте. Салпа Сәғүрә ауылдағы иң һылыу ҡыҙҙарҙың береһе булып, буй еткерә. Һөйгән егете менән мөхәббәттәре нисек кенә ҡайнар булмаһын, ҡауыша алмайҙар. Ҡыҙ башҡа берәүгә кейәүгә сыға, тик уны үҙ итә, ярата алмай. Ире лә ҡатынына ҡырыҫ була, йылы һүҙҙәрҙән, наҙҙарҙан мәхрүм итә. Ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа ауылға ҡайтҡан һөйгәне менән осрашып, Сәғүрә донъяһын онота. Ире уны бик ҡаты туҡмай. Йөрәге ҡатҡан ҡатын иренән айырылырға теләй, тик тыуаһы бала хаҡына тороп ҡала. Ҡыҙы тыуғас, уны ярата алмай, сөнки бөтә бәхетһеҙлеген шул сабыйҙан күрә, өйөндә лә, эшендә лә әрләшеүҙән башы сыҡмай. Ауылда уға Салпа ҡушаматы тағалар: яһил, яман, тимәк. Мөхәббәт кешеләрҙе күккә лә күтәрә, упҡынға ла ташлай... Әммә минең ошо героиняма ла тормошта тоталҡа биргем килде: ҡыҙы Менәүәрәнең шағирәлек һәләте асылды, ул кесе туғандарына таяныс булды, ауылдың һөймәлекле балаһына әйләнде - Сәғүрә йәшәү мәғәнәһен тапты, тәбиғи асылына баҡты.

Ҡатын-ҡыҙ йәмһеҙләнһә, донъя һынлы донъя үҙе төҫ ташлай. Ә ниндәй ҡатын йәмһеҙ? Бәхетһеҙ, күңел халәте бола, керле ҡатын. Тормош ауырлыҡтарына бөгөлөп төшмәһен, сабырлығы һынмаһын, матур булһын ҡатын-ҡыҙ! Ғаиләгә таяныс, илгә ҡалҡан булыр ир-ат ысын мәғәнәһендә көслө зат булып ҡалһын! Әҙәм үә Һауа балалары Ерҙә әҙәмсә, мөхәббәтле ғүмер һөрһөндәр - әҫәремдәге кире образдар ҙа ошо мөҡәддәс теләгемде уҡыусыларыма еткерешә һымаҡ...

ЗАУЫҠ

Радик ХӘКИМЙӘН

# БЕҘ БУРЫСҠА ЙӘШӘМӘНЕК ЕРҘӘ...



Заманында көслө, дәртле инек,
Тау-таштарҙы аҙмы аҡтарҙыҡ!
Башҡарылған эштәр байтаҡ булды,
Һирәк кенә хатта маҡталдыҡ.

Эшкә саптыҡ таңдар атыу менән,
Беләктә көс, ҡөҙрәт булғанда,
Бүлмәнек беҙ эште аҡ, ҡараға,
Ҡаршы барҙыҡ дауыл-буранға!

Яман һуғыш, аслыҡ, ялангаслыҡ,
Төшһә лә бит беҙҙең яҙмышҡа,
Зарланманыҡ, тырыш хеҙмәт менән
Нур өҫтәнек илгә, тормошҡа!

Яҡты хыял, өмөт йәшәтте бит
Ил хәстәре булды иңдәрҙә,
Заман йөгөн тартып өйрәндек беҙ,
Ауырлыҡтарҙы гел еңергә!

Беҙҙең ҡулдан бар ҙа килә ине,
Күпме бейек йорттар ҡалҡтылар,
Баҫыуҙарҙа иген гөрләп үҫте,
Нефть фонтандары аттылар.

Белер өсөн күктең күп серҙәрен
Юлдар һалдыҡ Айға, Ҡояшҡа,
Бар йыһанды гиҙеп йондоҙҙарға
Ил байрағын илттек "Юлдаш"та.

Йәшнәп торған йылдар уҙып бара,
Беҙҙең яҙмыш шулдыр, күрәһең,
Дөрләп янған ғүмер-усаҡтар һис,
Кинәт кенә һүнә күрмәһен.

...Әй был донъя! Хыял офоҡтары,
Саҡ(ы)ра беҙҙе һаман гел йыраҡ,
Беҙ бурысҡа йәшәмәнек ерҙә,
Юлдарыбыҙ булды аҡ һәм хаҡ.

Үлсәй бит ул кемдең кемлеген,
Үҙ баһаһын бирә һәр кемгә лә,
Еркәйенә бәйләй кендеген.
Үҙе теләгәнсә һынай беҙҙе
Тормош - дарья, ә мин - бер елкән,
Ҡаршы йөҙәм ярһыу ташҡындарға,
Яҙмыш тигәндәре шул микән?
Тормош - көрәш,
тотош бәйге бит ул.
Һүндермәйек хатта күмерен -
Халҡым өсөн, тыуған илем өсөн
Уттай янып үтһен ғүмерем!

## Ҡушамат менән данлылар
### (шаярыу ҡатыш)

Беҙҙә, Ҡыйғыла, кешеләр,
Ҡушамат менән данлы,
Ҡайсаҡ ҡырыҫ булһалар ҙа,
Барыбер изге йәнле!

Йылдар үткәс, әгәр килһәң,
Дуҫтарыңа Ҡыйғыға,
Онотһаң исем-шәрифен,
Төшмә һис тә ҡайғыға!

Ҡушаматын хәтерләһәң,
Дуҫыңды табышырҙар,
Мәҙәк хәлдәр һөйләй-һөйләй
Күңелдәр ҡауышырҙар.

Ниндәй генә ҡушамат юҡ:
"Ябалаҡ", "Торна", "Сыпсыҡ",
Хатта "Айыу", "Бүре" лә бар,
"Ата ҡаҙ", "Ҡуян", "Бурһыҡ".

"Профессор"ҙар бар дипломһыҙ,
"Агроном"дар, "Табип"тар...
Ошо ҡушаматтарҙа бит
Үҙенсә бер хаҡлыҡ бар.

Һалдат хеҙмәтен үтмәгән
Хәрбиҙәр ҙә етерлек,
"Капитан"дар, "Майор"ҙар бар,
"Полковник" - иҫ китерлек!

Ҡушамат юҡҡа бирелмәй,
Кәрәк уны аҡларға,
Холҡоң менән, эшең менән,
Кер төшөрмәй һаҡларға.

...Яҡташтарым бик күптәрҙе
Таный шулай затынан,
Ҡушаматтар ғүмер буйы
Йөрөй кеше артынан!

## Әй, был тормош!

Әй, был тормош!
Хәҡиҡәтте ниңә
Гел хаталар аша өйрәтә?
Һабаҡ бирә мең ғазаптар менән,
Һыуға һала, утта көйрәтә.
Тормош - бизмән,
унан һис бер биҙмәм,

## Донъя серле

Был донъяны аңлап бөтмәҫлек шул,
Елеп-сабып ғүмер үтһә лә,
Кеше һис тә йәшәүҙәрҙән туймай,
Йәйҙәр үтеп, көҙҙәр етһә лә.

Был донъяны аңлап бөтмәҫлек шул,
Яныпяныпйөрәк талһа ла,
Ғүмер ҡапҡалары ябылырға
Саҡ-саҡ ҡына ара ҡалһа ла.

Был донъяны аңлап бөтмәҫлек шул,
Үтелгән юл дөрөҫ, хаҡ һымаҡ,
Заманалар киҫкен үҙгәрһә лә,
Тыуыр көндәр булыр аҡ һымаҡ!

Был донъяны аңлап бөтмәҫлек шул,
Мәңге серҙәр инде, моғайын,
Шул серҙәрҙе сисеп ғүмер үтә,
Дөрөҫ яуап табыу бик ҡыйын...

## Йәшәргә һуңлай

Кеше, никтер, йәшәргә гел һуңлай,
Үлергә ул һис тә һуңламай,
Әллә инде Хоҙай Тәғәләнән,
Үтенеп-үтенеп ғүмер һорамай.

Серле, донъя! Күсәрендә зырлап
Бер туҡтауһыҙ һаман әйләнә,
Ерҙә йәшәү бәхет булһа ла бит,
Ҡоролғандар тылсым-хәйләгә.

...Ғүмер йомғаҡтары тиҙ һүтелә,
Донъя аша үтә тәгәрәп.
Йәндәр кинәт Ғаләмдәргә күсә,
Бәхет ҡошон эҙләй-эҙләй,
Ғүмер йомғаҡтарын һүтеп.

Юлда күпме ҡаршылыҡтар,
Һикәлтәләр көтөп тора,
Шатлыҡтар йыш урап үтә,
Ҡайғы-һағыш иңгә ҡуна.

Ҡаҡҡылай ҙа, һуҡҡылай ҙа,
Яҙмыштарҙың хәтәр еле,
Еңел генә бирелмәй шул,
Был тормоштоң һәр бер үре.

Һынай тормош бәндәләрҙе,
Һыуҙан алып, утҡа һала,
Яңылыштарҙан, хаталарҙан
Йөрәктәрҙә яра ҡала.

Сәстәргә лә ҡарҙар ята,
Ярһыу хистәр инде үтә,
Ә шулай ҙа кеше һаман,
Бәхет, шатлыҡ өмөт итә.

...Ерҙә йәшәү - үҙе бәхет,
Тормош матур, тормош гүзәл,
Донъя һис тә һөйөп туймаҫ -
Ул - мәңгелек йәшел үҙән!

ИНТЕРНЕТТАН



# С ВИТАМИНЫ...

## кемгә файҙалыраҡ?

■ "Совет спорты" баҫмаһы Zee News сайтына һылтанма яһап, һимеҙ кешеләргә фитнесты С витамины ҡушылған аҙыҡ өҫтәмәләре алыштыра ала, тип яҙа. Бындай һығымтаға Колорадо университеты ғалимдары килгән. Был файҙалы витаминды даими ҡулланыу йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына күнегеүҙәр яһаған кеүек тәьҫир итә икән. Тулы кәүҙәле кешеләрҙә эндотелин аҡһымы әүҙемлеге һөҙөмтәһендә ҡан тамырҙары эшмәкәрлеге боҙола, был иһә йөрәк менән бәйле проблемаларға алып килә. Был аҡһымдың әүҙемлеген даими спорт менән шөғөлләнеү генә түбәнәйтә ала. Шуға ла ғалимдарҙың яңы асышы бындай категория кешеләр өсөн еңеллек килтерәсәк. С витамины ҡан тамырҙары эшмәкәрлеген яҡшырта. Һис юғында, С витамины ҡабул иткәндән һуң организмға дәрт өҫтәлеп, кеше үҙе лә һиҙмәстән күнегеүҙәр эшләй башлауы ла бар. Шулай ҙа Швейцария ғалимдары ла был витамин спортсылар өсөн кәрәкле, тип иҫәпләй.

■ Үҙҙәрен агрессив тотҡан ир-егеттәрҙең үҙҙәренә ышанысы түбән була. Дөйөм алғанда, бөтөн ир-аттарға ла ирҙәрсә ҡылыҡтар, мәҫәлән, үҙендә хәүеф аҫтына ҡуйыу, психоактив матдәләр ҡулланыу, агрессияға бирелеү хас. Атланталағы ауырыуҙарҙы контролдә тотоу һәм профилактикалау үҙәге тикшеренеүселәре үҙен ысын ир-егет итеп тоймаған ир-аттарҙың ҡылыҡтарын тикшереп ҡараған. Һынауҙарҙа 18 йәштән 50 йәшкә тиклемге 600 кеше ҡатнашҡан. Улар үҙҙәренең ҡылыҡтары тураһында һөйләгән, уның фекеренсә, ысын ир-егет ниндәй булырға тейеш тигән һорауға ла яуап биргән. Ғалимдар асыҡлауынса, кем үҙен етерлек кимәлдә ҡыйыу һәм көслө тип иҫәпләмәй, улар күпкә агрессивыраҡ булған. Ундайҙар үҙенә ҡорбан табып, уға зыян килтереүҙән дә тартынмай, алкоголдә лә йышыраҡ ҡуллана.

■ Раш университеты ғалимдары яңы диета уйлап тапҡан. MIND диетаһы тип аталған был диета когнетив тайпылыштарҙы (хәтер, аҡыл кеүәһенең һәм башҡа когнетив функцияларҙың түбәнәйеүе) булдырмаҫҡа ярҙам итә. 4,7 йыл дауам иткән һынауҙарҙа 960 өлкән йәштәге кеше ҡатнашҡан. MIND диетаһын тотҡандарҙың баш мейеһе 7,5 йәшкә йәшерәк булып сыҡҡан. Йәғни, улар был тайпылыштар менән башҡаса туҡланыусыларға ҡарағанда һуңыраҡ осрашҡан. Диета 15 компоненты үҙ эсенә ала. 10 төркөм аҙыҡ-түлек - мейе өсөн файҙалы, ә 5 төрлө ризыҡтан - ҡыҙыл иттән, майлы аҙыҡтарҙан, фастфудтан, майҙан һәм маргариндан, тәм-томдан баш тартырға кәрәк. Ғалимдар билдәләүенсә, сәләмәт булырға теләгән кеше көн һайын 3 порция ярма, йәшел япраҡлы йәшелсәләр ашарға тейеш. Ҡапҡылап алыу өсөн сәтләүектәр ҡулланылһын. Борсаҡ кеүек ҡуҙаҡлыларҙы көн аша ашарға кәрәк. Шулай уҡ аҙнаһына ике тапҡыр ҡош ите, еләктәр, балыҡты аҙнаһына бер тапҡыр булһа аҙерләү мөһим. Бынан тыш, көнөнә 1 балғалаҡ аҡ май рөхсәт ителә. Сырға килгәндә, ул көнөнә 1 порциянан артыҡ булырға тейеш түгел.

■ Ҡайһы берәүҙәр ябыҡыу өсөн диета тотҡандан һуң ит ризыҡтарынан баш тарта. Бындай кешеләргә соя нигеҙендәге диета тоторға мөмкин, ти табиптар. Соя - тәбиғи продукт, ул насар холестерин күләмен кәметә, майҙарҙы яндырырға булышлыҡ итә. Әммә соя продукттарын ун көндән дә оҙағыраҡ ашарға ярамай. Диета мәлендә тулыһынса тәм-томдан, икмәктән, макарондарҙан, картуфтан баш тартырға кәрәк. Йәшел сәй һәм һыу эсеү файҙалы.

ҺАБАҠТАР

# ОНОТОЛМАЙ АТАЙ ТӘРБИӘҺЕ!



**Бөгөн бесәнгә ҙур машина менән барырға булдым әле. Көндөҙ бер аҙ сабып, ә инде кискеһен бер нисә күбәне тейәп алып ҡайтырға ине иҫәп. Ауылдан өс-дүрт саҡрым ара үткәс, юл ситенән йүгереп барған йәш егетте ҡыуып еттем. Һай-һай, бесәнгә ныҡ ашыға был егет, тиҙлеген иң юғарыһына һалып алған да, саң-ҡойон уйнатып елдерә генә!**

Ултыртып алдым. Был егеттең атаһы менән беҙ бер яҡта бесән эшләйбеҙ. Улар бесәнгә күбергәген ат менән йөрөй, ә бына мин машина менән, тигәндәй. Күршенең өлкән улы, нишләптер, сабынлыҡҡа һуңлап китеп бара. Ара-тирә уға күҙ һалғылап, башымды сайҡап ҡуям. Ай-һай, тиккә генә һуңламаған йәш егет. Бер әтнәкәһе бар бында. Ярай, ауыл ерендә йәшәйбеҙ бит, был турала берәй хәбәр ишетелер әле, тип, үҙенә һүҙ ҡатмай ғына барам.

Ә был ғаилә эшкә бик әрһеҙ, ғаилә башлығы балаларын тәртиптә тота. Артыҡ ҡаты ла бәрелмәй ул балаларына, артыҡ өгөт-нәсихәт тә уҡымай, тигәндәй. Әммә балалары уның ауыҙына ғына ҡарап тора. Ғәжәп, бына ошо ғаиләнең өлкән улы бесәнгә һуңлап китеп бара! Ыһылдап бөткән, урынында ултырып сыҙай алмай хатта. Төшөп йүгерергә лә риза, әммә машинаны уҙып, артыҡ алға китә алмаҫын да аңлай, күрәһең. Иғтибар итә ҡуйҙым: егеттең маңлайы ҡыҙарған да инде. Әллә һағыҙаҡ саҡҡан, әллә берәй нәмәгә төкөгән. Апаруҡ шәп эләккәнгә оҡшай. Егет уны усы менән әйләнгән һайын тигәндәй ышҡып ала. Шул арала беҙ уларҙың сабынлыҡ тапҡырына барып та еттек, егетем рәхмәт әйтергә лә онотоп, сабып сығып та китте...

Әлләә ауылдың башҡа ығы-зығыһы был хәлдән өҫтөнөрәк булды, әллә уны үҙем күҙ уңынан ысҡындырып ебәрҙем. Әммә был егет тураһында ауылда әллә ни хәбәр ишетелмәне. Шуға күрә был хәлде күптән онотоп та бөткәйнем инде мин. Ошо хәлдән һуң ун йыллап ваҡыт үтеп киткәс, бер осрашҡанда теге егет үҙе һөйләп бирҙе.

- Йәш саҡ - алйот саҡ, көслө саҡ бит инде, - тип һөйләп китте ул. - Көндөҙгө эштәр ни тиклем күп булһа ла, кистәрең барыбер клуб тирәһендә үтә. Киске уйынға сығыр алдынан ауыл егеттәре бер аҙ "төшөрөп" ала торғайны. Йәнәһе лә, күңел күңел күтәреү өсөн эсәләр. Ә мин бөтөнләй эсмәйем. Егеттәр хатта үпкәләй торғайнылар. Йәнәһе лә, мин уларҙы хөрмәт итмәйем, тиң күрмәйем. Әммә артыҡ ҡыҫтамай ҙа торғайнылар. Күпме ошолай йөрөгәнмендер, белмәйем, әммә бер кис араҡылы һауытты миңә лә килтереп тотторҙолар. Бына мин көрөшкәгә, дөрөҫөрәге, ҡойолған араҡыға, аптырап ҡарап торам, ә эстә ике уй көрәшә. Береһе, эсмә был шайтан һыуын, ти. Әммә икенсеһе күңелдә ҡоторта. Уныһы шайтан булған икән. Быны аҙаҡ ҡына аңланым. Бына шул шайтан, төп күтәрә һуҡ та ҡуй, иптәштәрең һимаҡ була алмайһыңмы ней, ти. Миндә ике уй көрәшә, ә минең ҡәтғи ҡарарға килергә ваҡытым тар. Сөнки егеттәр ҡабаландыра. Шәберәк тота һал, һауыт берәү генә, беҙҙең дә эске килә, башҡаларҙы көттөрмә, йәнәһе. Күп уйлап торманым, күтәрә һуҡтым да ҡуйҙым тегене. Бына шулай тәү тапҡыр шайтан һыуы тәнемә, ә шайтан үҙе йәнемә үтеп инде. Минән бындай батырлыҡты көтмәгән егеттәр хатта үҙҙәре бер аҙға шаңҡып ҡалғандай булдылар. Шунан инде арҡаны тапап, мине маҡтап ташланылар. Бына, исмаһам, егет, тиҙәр. Белмәй генә йөрөгәнбеҙ, маладис булып сыҡтың, тиҙәр. Бындай шәп егет икәненде нишләп алдан белгертмәнең, һайһай, бигерәк баҙнатһыҙ икәнһең, тиҙәр. Һин бит үҙебеҙҙең егет булғанһың, тиҙәр. Миңә рәхәт булып китте, хатта күңел күтәрелеп, яуырындар турайып, бер башҡа үҫеп киткәндәй

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# КЕМГӘ ТАБЫНАБЫҘ?



**Аллаһҡа ғибәҙәт итмәгәс, бүтән нәмәләргә ышанырға, табынырға әҙер генә торабыҙ икән.**

Аллаһы Тәғәлә китабы Ҡөрьәндәге: "Мин ендәрҙе һәм кешеләрҙе фәҡәт Миңә ғибәҙәт ҡылһындар өсөн генә барлыҡҡа килтерҙем", - тигән аятты ("Елгәреүселәр" сүрәһе, 51:56) элек бик уҡ аңлап етмәй инем. Беҙҙең ошо донъяға килеүебеҙҙең берҙән-бер маҡсаты - Аллаһҡа табыныуымы икән, тип аптырана инем. Шулай ҙа бер баҫмала, ғалимдар кеше организмында табыныу гены (русса - ген поклонения) тапҡан, тип уҡығас, был турала ныҡлап уйлана башланым. Хәҙер аңланым: кешеләр, ысынлап та, нимәгәлер ышанып йәшәй шул, һәр кем нимәгәлер табыныуға мохтаж, беҙҙең организмда шундай ген табылыуы быны фәнни яҡтан да иҫбатлай. Беҙ, кешеләр, ысынлап та, Аллаһҡа ышанып, Уға табынып йәшәр өсөн яратылғанбыҙ, әммә күпселегебеҙ, шайтан вәсвәсәләренә алданып, үҙебеҙҙең ошо асылыбыҙға яҡынайырға ҡурҡабыҙ, нинәлер, Аллаһтан "ҡасып", Аллаһты "онотоп" йәшәүҙе өҫтөнөрәк күрәбеҙ.

Әммә "табыныу гены" үҙенекен эшләй: Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт итмәгәс, башҡа нәмәләргә ышанырға, табынырға әҙер генә торабыҙ. Аҡсаға, мал-мөлкәткә, түрәгә, карьераға, араҡыға, тәмәкегә, наркотикка, йондоҙнамәләргә, изге тауташ, изге ағас-шишмәләргә, әртистәргә, ялған бәйгәмбәрҙәргә, экстрасенстарға һәм, ахыр килеп, үҙебеҙҙең нәфсегә буйһонабыҙ. Бынан нимә килеп сыға: Аллаһҡа ғына табынмаһаҡ, башҡа ялған илаһтарға (идолдарға) табынып, үҙ тормошобоҙҙо үҙебеҙ боҙабыҙ, Аллаһы Тәғәлә бүләк итеп биргән ғүмеребеҙҙе әрәм-шәрәм итәбеҙ...

Беҙ элек Ленинға, Сталинға һәм башҡа "бөйөк" юлбашсыларға, ә аҙаҡ уларҙың һәйкәлдәренә табындыҡ (сәскәләр һалдыҡ, шиғыр һөйләнек, йыр йырланыҡ, портреттарын тотоп йөрөнөк һәм башҡалар). Инде ул система ҡолағанға егерме йыл үтте, әммә беҙҙә һаман өйләнгән йәштәр ЗАГС-тан һуң Ленин һәйкәленә сәскә һалалар. Ошоно күргәндә мин, балалар ғаилә тормоштарын ботҡа табыныуҙан һәм, ҡайтҡас, өҫтәл артында рюмка менән теләк теләүҙән башлайҙар, уларҙы Аллаһы Тәғәлә ярлыҡаһа ине, тормоштары боҙолмаһа ине, тип теләп ҡалам. Беҙ ҙә үҙ ғүмеребеҙҙәге күпме мәжлестәрҙә араҡыны алдыбыҙға ҡуйып, рюмкаға табынып, яҡшы теләктәр теләгәнбеҙ. Абсурд! Нисек ер йотмаған беҙҙе! Шуға күрә лә тәне йә рухы ғәриптәр күп тыуалыр ҙа инде донъябыҙға. Статистика әйтеүенсә, беҙҙә ун кешегә бер ғәрип тура килә ти бит...

Бөгөн Башҡортостан ҡалаларында һәм райондарында бер секта ҡатындары өйҙән-өйгә йөрөп, йәки урамда туҡтатып, Ҡөрьәндән аяттар, Библиянан өҙөктәр (уйҙырмалар) уҡып, халыҡты үҙ диненә өндәп маташа (был "Иегова шаһиттары" тигән аҙашҡан төркөм - **Ред.**). Һәм үҙендә мосолманлыҡ рухы йөрөткән башҡорт һәм татарҙарҙың ҡайһы берәүҙәре улар ҡармағына эләгә лә, сөнки был кешеләрҙең "Аллаһы Тәғәлә", "ғибәҙәт ҡылырға кәрәк", "изге күңелле булайыҡ" тигән һәм башҡа өндәүҙәрен ишеткәс, уларҙа әлеге лә баяғы табыныу хисе уяна. Үҙҙәрен "иман юлына баҫтыҡ" тип уйлайҙар, әммә был кешеләрҙең Ҡөрьән аяттарын тик күҙ буяу өсөн генә ҡулланғанын, ысынында иһә уларҙың Исламдан йыраҡ торған, аҙашҡан бер секта икәнен аңларға ғилемдәре етмәй.

Порфирий Иванов алымы буйынса һалҡын һыу менән ҡойоноусылар ҙа ширк ҡыла. Ҡойоноу - ул, әлбиттә, сәләмәтлек өсөн кәрәк нәмә. Ләкин күккә ҡарап, "Учитель,

***✓ Уңышты һайлауҙан баш тартыу уңышһыҙлыҡты һайлауға тиң. Беҙ ижади аҙымдар яһарға тейешлегебеҙҙе аңлайбыҙ, әммә уның урынына ҡыйыуһыҙлыҡ, шикләнеү, үҙ-үҙеңде кәмһетеү комплексы менән ҡәнәғәтләнәбеҙ.***



булдым. Хәҙер уйлап ҡараһаң, оят инде. Ә ул ваҡытта торғанмындыр инде шунда әтәс һымаҡ ҡуҡырайып. Әйтерһең дә, Берлинды бер үҙем яулап ҡайтҡанмын, әй. Былдай маҡтауҙар яуып торғас, тағы берҙе күтәреп һуҡтым. Һай-һай, маладисмын икән дә шул, мәйтәм. Өсөнсөгә һуғайым, тиһәм, теге шайтан һыуы бөткән икән. Шул арала егеттәр ҡайҙалыр йүгереп бара һалып, тағы ла алып килделәр. Ҡалған яғын иҫләмәйем. Аҙаҡтан һөйләүҙәренсә, шарт та шорт бейегәнмен, ниндәйҙер йырҙар йырлап маташҡанмын, егеттәрҙе күккә олғаштырып маҡтағанмын. Ҡыҫҡаһы, ғүмере ҡыланмағанды ҡыланғанмын. Шайтан шулай маймылландырған инде...

Был хәлдең бер генә ыңғай яғы күңелде йыуатып тора: ошо мәлдә күҙ атып йөрөгән ҡыҙыма тәүге тапҡыр хистәремде асып һалғанмын. Уныһы, "Һе, алйот" тигән дә, шатлығынан ҡыя-мыя һикереп, йүгереп ҡайтҡан да киткән. Ә мин уның артынан "Һин үҙең дә алйот" тип ҡысҡырып тороп ҡалғанмын. Беҙҙең мөхәббәттә аңлашыу яҡынса ошолайыраҡ килеп сыҡҡан.

Таң һарыһында сарсап уянып киттем. Бер аҙ ҡайҙа ятҡанымды аңлай алманым. Бына һиңә - мә, ауыл ситендәге ҡарағай төбөндә ятам икән. Әллә үҙем ҡолағанмын, әллә ҡолата һуғып киткәндәр. Уныһын шайтан ғына беләлер. Ауыл апайҙары көтөүгә мал ҡыуған мәл бит. Ҡайҙа ул кисәге Берлинды алған кеүек йөрөгән мәлдәр. Партизан һымаҡ, әрәмә араһына шыуышып инеп китергә тура килде. Тал-муйыл араһында ятҡан мәлдә, ярай әле, апай-еңгәләр күрмәй ҡалды, тип, үҙемде йыуатҡан булам. Әммә иң ҡурҡынысы алда - нисек атайға ҡайтып күренергә? Ҡурҡыта, малай, ә шулай ҙа ҡайтырға кәрәк, сөнки бесәнгә барырға кәрәк бит. Ярай, мәйтәм, ҡайтайым әле. Барыбер ҡайтырға кәрәк, унан күҙ күрер. Әммә күҙгә түгел, ә маңлайға күрергә яҙған икән...

Ошо ерҙә урта йәштәрҙәге ир еңелсә көләмһөрәп ҡуя.

- Мал ҡыуған артҡы ҡапҡанан шым ғына урамға килеп индем. Аллаға шөкөр, әле атай бесәнгә китеп өлгөрмәгән. Ат егелгән, арбаға кәрәк-яраҡ нәмәләр һалынған. Ат алдына һалынған ҡыу бесәнде теләр-теләмәҫ кенә ҡапҡылап тора. Шулай инде, бынау бесән мәлендә кемдең былтырғы бесәнде мөрхәтһенеп ашап торғоһо килһен. Минең урамға килеп ингәнде һиҙеп ҡалған ат, башын миңә бороп, бер аҙ текләп торҙо. Уның ҡарашы миңә, ҡайттыңмы, алкаш, тигән һымағыраҡ тойолдо. Ярай, ат өйҙә булғас, тимәк, өйҙә мине көтәләр. Шулай инде, бесәнде минһеҙ эшләп булмай, унда мин бит төп көс. Был күренештән мин үҙемә өмөтлө һығымта яһай һалам - атай миңә ҡаты бәрелмәйәсәк! Күп булһа, "Улым, һин ҡабат улайтма инде", тигән булыр, тип үҙемде йыуатам. Ошондай өмөтлө уйҙар менән соланға инәм һәм яйлап ҡына өй ишеген аса башлайым.

Иң ҡыҙыҡ мәл тап ошо урында булды ла инде, сөнки минең барлыҡ татлы хыялдар ишек асылыу менән селпәрәмә килде. Башым күренеү булды, атайҙың ҡаты йоҙроғо - шалт маңлайға! Бер урындыҡты биш урындыҡ итеп сәй эсеп ултырған атай ҡайһы мәлдә ырғып торған да, ҡайһы мәлдә мине осора һуҡҡан, әй, уныһын хатта әсәйем дә күреп өлгөрмәгән.

Ә мин... шап итеп солан иҙәненә барып та ултырҙым, аҡырып илап та ебәрҙем. Әллә шаңҡыуҙан, әллә ҡурҡыуҙан, әллә оялыуҙан инде, уныһын кем генә белһен. Шуныһы ҡыҙыҡ, илауҙан туҡтап булмай ҙа ҡуя. Һыным ҡатты ла ҡуйҙы. Минең илағанды күрергә апай-ҡустыларым өйҙән сыҡманы. Ә бына иң бәләкәй ҡустым менән һеңлем сығып, бер килке ҡарап торҙолар. Малай малай инде, ҡустым яуырындарын һелкетеп, һе, тигән булды ла кире өйгә инеп китте. Ә бәләкәй һеңлем мине бер тапҡыр уратып ҡарап сыҡты ла арҡамдан яратып алған булды. "Илама, ағай, илама, хәҙер мин һиңә матур тышлы кәнфит сығарып бирәм", - тип, тупһаны саҡ ашаҡлап өйгә инеп китте. Былдай ҡырын эште ябай кәнфит менән генә төҙәтеп булмағанын аңламай шул әле.

Бына бер мәл һәлмәк кенә баҫып, өйҙән әсәй килеп сыҡты. Асыуынан ни эшләргә белмәй, ат тирәһендә ыуаланып йөрөгән атайға күҙ ташлап алды ла, таж баҡырып ултырған миңә бер килке текләп торҙо. Шунан тыныс ҡына әйтә ҡуйҙы: "Хатта ғына ла атайың йәтеш итте".

Атай мине арбаға ултыртманы. Шул арала башҡалар тиҙ генә үҙ урындарына ултыра һалдылар. Аптырарһың, хатта ат та атайҙың холҡон белеп бөткән, әй. Баяғы теләр-теләмәҫ кенә бесән ҡапҡылап торған атты, әйтерһең дә, бөтөнләйе менән алыштырып ҡуйғандар. Күҙҙәре яна, ҡолаҡтары ҡайсылана, кәүҙә турайған, һабантуй яланында ярышҡа әҙерләнгән атың ары торһон. Хатта алғы аяғы менән ерҙе тырнап алған була. Торғаны менән бер әртис инде. Атай ҡулына дилбегәне алып, бер һелкеүе булды, ат ен һымаҡ сабып сығып та китте. Хатта ҡустылар арбанан ырғып төшөп, ҙур ҡапҡаны ла ябып торманылар. Уныһы елгә шығыр-шығыр бер асылып, бер ябылып тороп ҡалды. Мин тиҙ генә ҡапҡаны яптым да саптым арттарынан. Шул мәлдә һин мине машинаңа ултыртып алып барғайның, ағай. Шул көндән башлап клубҡа сығыу онотолдо. Шул уҡ йылды кәләш алып ебәрҙем. Теге, алйот, тип шатлығынан ҡыя-мыя һикереп йүгереп ҡайтып киткән ҡыҙҙы алдым инде. Аллаға шөкөр, бөгөн кешенән кәм-хур булмай, матур итеп донъя көтәбеҙ. Ара-тирә, һауыт-һаба шылттырап киткән мәлдә, "Һы, алйот", "Һин дә алйот", тип әйтеү беҙҙең ярашыу билдәһе булып тороп ҡалды.

Бер аҙ һөйләшеп ултырғандан һуң йылы һаубуллашып, үҙ өйө яғына ыңғайланы егетебеҙ. Ә эсеү яғы нисек, тип һораманым мин унан. Сөнки өс тиҫтәһен тултырып, дүртенсеһен ыуаҡлай башлаған ир ошо һөйләгән арала ғына әллә нисә мәртәбә маңлайын ышҡып алды. Дә-ә-ә, онотолмай ундай атай тәрбиәһе!

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

помоги!" тиеү - ул шул остазға табыныу була бит. Ошо ваҡытта берҙән-бер ярҙамсыбыҙ булған Аллаһҡа мөрәжәғәт итһәң, яҡшыраҡ булыр ине. Бер танышым ғүмер буйы ошо Иванов алымы менән шөғөлләнде, ныҡ булды. Ләкин бер көн аҫҡысын өйҙә ҡалдырып, тышта яланғас тигәндәй оҙаҡ тороп, ҡаты ауырып китте. Хәҙер урамға ла сыға алмай. Аллаһы Тәғәлә шулай һабаҡ бирә шул, тыңламаһаҡ.

Тағы бер миҫал - йога. Методистар йога күнекмәләрен эшләтә башлағанда табыныу кеүек күренеш һиҙелмәй ҙә һымаҡ, әммә аҙаҡ күнекмәләр мәлендә Буддаға табыныу доғалары ҡулланыла башлай. Бер танышым илле биш йәшкә еткәнсе ни менән генә шөғөлләнмәне: Лазаров, Норбеков, Луиза Хей, Сенильников һәм башҡаларҙың китаптарын уҡыны, йогаға йөрөнө, БАД-тар ҙа һатты. "Барыһын да намаҙ алыштыра, тотон үҙ динебеҙҙе өйрәнергә", тиһәң, "Юҡ, миңә шул-шул авторҙың китаптарындағы күнекмәләр оҡшай", тип ҡаршы сыға торғайны. Ошо көндәрҙә бәхетһеҙлеккә осраны. "Ҡайҙа дин дәрестәре алырға була?" тип шылтыратты...

Ә бер әхирәтемдең улы ҡырҡ биш йәшкә саҡлы күп йылдар буйы медитация менән булышты. Иртән сәғәт дүрттә тороп, үҙенең Һиндостандағы уҡытыусыһына табынып, уға мөрәжәғәт итеп ултырыр ине. Әсәһе лә бер китап күрһәтеп: "Улым өйрәнергә ҡушты", - тип, ул күнекмәләрҙе беҙгә лә тәҡдим иткәс, мин: "Ул беҙҙеке түгел, һаҡ булығыҙ", - тигәйнем. Быйыл был егет ҡаты ауырып китте, табиптар диагноз ҡуя алманылар. Ахыры, Республика дауаханаһына алып барҙылар, унда ла диагноз ҡуя алманылар. Аллаһы Тәғәлә Үҙ рәхимлеге менән уны был донъяла уҡ шулай ҙур һынау менән иҫкәрткәндер. Дауахананан ҡайтҡас, егет сүрәләргә, доғаларға күҙ һала башланы...

Магтар ҙа йышайҙы хәҙер беҙҙең яҡтарҙа. Зал тултырып халыҡ йыйып, кешеләрҙе медитация хәленә индереп, ауырыуҙарығыҙҙан терелерһегеҙ, тип ышандыралар. Халыҡ шуға ышана. Хатта магтың фотографияһын һатып алып, шуның менән дауаланам, тип уйлап, өйҙөң иң түренә элеп ҡуя. Аллаһ һаҡлаһын!

Татарстандан килгән бер маг менән Йоматау санаторийында осраштым. Ул унда палаталарҙы арендаға алып, шунда "дауалау" сеанстары үткәрә ине. Минең палата уның ҡабул итеү бүлмәһе менән склады янында бер баҫҡыс майҙанында булды. Ул кешеләргә хаҡын биш тапҡырға арттырып, аптека дарыуҙары тәғәйенләй. Йәнәһе, был дарыуҙар уның энергияһы менән "зарядланған". Янған ат кеүек йүгерә, көнө-төнө кеше ҡабул итә. Былтыр минең бер танышым Татарстанда шул магта ун көн дауаланып, 60 мең һум аҡсаһын туҙҙырып ҡайтты. Өйөп үләндәр биреп ҡайтарған - аптекалағы 50 һумлыҡ пачкаларҙы 150-шәр һумға һатҡан. Зарядланған үләндәр, ти. Алты айҙан тереләһең, тип вәғәҙә биргән маг. Ләкин киреһенсә булды. Танышымдың элекке ауырыуҙарына тағы икенсе диагноз өҫтәлде. Шулай итеп, күп мал-мөлкәтебеҙҙе алдаҡсыларға биреп әрәм итәбеҙ, ә шул аҡсаны хәйергә биреп китергә йәлләр инек әле.

Аллаһтан ҡурҡыу урынына кешеләрҙән ҡурҡыу, берәйһен Аллаһтан артыҡ яратыу, үлгән кешеләр рухынан ярҙам һорап доға ҡылыу һәм башҡалар - былар барыһы ла ширк ғәләмәттәре. Намаҙ уҡыу, доға ҡылыу - үҙе бит иң яҡшы медитация. Әҙәм балаһы ысын күңелдән намаҙ уҡыһа йә доға ҡылһа, Аллаһы Тәғәлә менән һөйләшкән була. "Миңә доға ҡылығыҙ, Мин һеҙгә яуап бирермен", - тигән Аллаһы Тәғәлә ("Ярлыҡаусы" сүрәһе, 40:60). Беҙгә, мосолмандарға, теләк теләү, ниҙер һорау менән экстрасенстарға түгел, бер Аллаһҡа ғына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Табиптар Аллаһҡа таянып дауалаһа ла сирлеләр тиҙерәк терелә икән. Был турала Америка ғалимдары әйтә. Цитатаны русса килтерәм инде: "Привычка молиться оказывает влияние на жизнь человека, делая его более спокойным, не выходящим из себя по пустякам. Такой не жалуется на одиночество и неудовлетворенность жизнью, не суетится, он легче переносит невзгоды, настроен на мирный лад и благожелателен по отношению к окружающим. У них крепкий иммунитет". Бына шулай, һығымталарҙы һәр кем, моғайын, үҙе эшләр.

**Зәйтүнә КҮҪӘПОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Нимә аласаҡһығыҙ?

Теләктәрегеҙҙе аныҡ билдәләргә өйрәнһәгеҙ, тормоштан үҙегеҙгә кәрәкле бөтөн нәмәне алырһығыҙ. Күпселек осраҡта беҙ ысынбарлыҡта нимә теләгәнебеҙҙе томанлы ғына күҙаллайбыҙ. Һөҙөмтәлә маҡсаттарыбыҙҙың күп өлөшө ҡыҫыр хыялдар атмосфераһында һәләк була. Миңә бик йыш "Нимә теләгәнемде үҙем дә белмәйем", тигәндәрен ишетергә тура килә. Был беренсе аҙымды яһарға теләмәгәнлегеңде аҡлау ғына. Ҡарар ҡабул итмәү, тимәк, хаталанмау! Уңышһыҙлыҡ һәм хуплауға мохтаж булыуы кешеләрҙе тотҡонлоҡта тота.

Уңышты һайлауҙан баш тартыу уңышһыҙлыҡты һайлауға тиң. Ҡыйыуһыҙлыҡ етди проблема - күңел төшөнкөлөгөн тыуҙыра. Беҙ ижади аҙымдар яһарға тейешлегебеҙҙе аңлайбыҙ, әммә уның урынына ҡыйыуһыҙлыҡ, шикләнеү, үҙ-үҙеңде кәмһетеү комплексы менән ҡәнәғәтләнәбеҙ.

Әгәр лайыҡлы маҡсат һайларға һәм тормош планы төҙөргә ваҡытығыҙҙы йәлләмәһәгеҙ, үҙегеҙҙә ныҡлы ышаныс һәм көс тойорһоғоҙ. Маҡсат һайлап, уны төпкө аңға тәҡдим итер алдынан, баһалағыҙ. **Түбәндә яҙылған фильтрация процесы менән файҙаланығыҙ һәм үҙ-үҙегеҙгә шундай һорауҙар бирегеҙ:**

- Ысынлап та мин ошоно теләйемме, әллә бары тик шуны эшләргә тейешмен, бурыслымын тип иҫәпләйем генәме?
- Ҡуйылған маҡсатым ысын ҡиммәттәр системаһына тап киләме?
- Уның тормошҡа ашыу мөмкинлегенә ышанаммы?
- Ул тормошҡа ашҡас, мин яҡшыраҡ булып китәмме?
- Уны барлыҡ нескәлектәрен дә күҙаллай аламмы?
- Ижади интеллекттың хыялымды тормошҡа ашырыуына ярҙам итеренә бөтә йөрәктән ышанаммы?

**Әгәр барлыҡ һорауҙарға ла ыңғай яуап бирһәгеҙ, икенсе баҫҡысҡа - план төҙөүгә күсегеҙ. Бының өсөн һеҙгә түбәндәгеләр кәрәк.**

- Маҡсатты аныҡ итеп билдәләргә. Төпкө аң аныҡлыҡты таный.
- Программаның аныҡ башланыу датаһын билдәләргә.
- Маҡсатҡа өлгәшеүҙең аныҡ датаһын билдәләргә.
- Нимә эшләргә кәрәклектең яҙма планын төҙөргә.
- Планды даими анализлап тороу өсөн график билдәләргә һәм планға төҙәтеүҙәр индерергә, уны камиллаштырырға.
- Үҙегеҙ менән һәр саҡ маҡсатығыҙ яҙылған карточка йөрөтөргә. Көн дауамында уға йышыраҡ күҙ һалырға. Әгәр мөмкин булһа, карточкаға маҡсатығыҙҙы йәбештереп ҡуйырға.
- Бер генә аныҡ маҡсатҡа иғтибар тупларға.
- Маҡсатҡа бәйле ыңғай раҫлау булдырырға.
- Йоҡлар алдынан мотлаҡ маҡсатығыҙҙы һүрәтләргә.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



**№1 ФАРИТ ГИНДУЛЛИН**

**Депутатская деятельность - это работа, которая требует большой ответственности за доверие, оказанное избирателями.**

**Мои цели:**
- привлечение детей на занятия спортом: установка хоккейных, футбольных и игровых площадок;
- озеленение и освещение дворов;
- благоустройство набережной;
- ремонт домов за счет средств Фонда кап.ремонта.

**Реальные дела являются показателем работы депутата.**

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **ГИНДУЛЛИНУ ФАРИТУ ХУРМАТУЛЛОВИЧУ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 дек. 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **РЯБОВУ ВЯЧЕСЛАВУ ВЛАДИМИРОВИЧУ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **ХАЕРВАРИНОЙ АЛЬБИНЕ МАРСОВНЕ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".

**ЛЕОНИД БИРЮКОВ**



**выдвинут партией "Справедливая Россия" кандидатом в депутаты ГО г. Уфа по избирательному округу №9**

Как общественный активист и председатель Совета дома №47/1 по ул. Зорге, я вижу, сколько проблем в сфере ЖКХ ложится на плечи граждан, только совместными усилиями мы сможем навести порядок в наших домах и дворах.

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **БИРЮКОВУ ЛЕОНИДУ ОЛЕГОВИЧУ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **БАЙГУСКАРОВОЙ АЙГУЛЬ УРАЛОВНЕ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **ЧАПЛИЦ ИРИНЕ МИХАЙЛОВНЕ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **ГАЙНЕТДИНОВОЙ ФАНИИ ФАРГАТОВНЕ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва **ЗАЙНУЛЛИНУ РУСЛАНУ ФЛЮРОВИЧУ** согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. N380-з "О выборах".


# БАШЛАНДЫ!

Башҡортостанда киң мәғлүмәт сараларында һайлау агитацияһы башланды. Кандидатлыҡҡа тәҡдим ителгәндән һуң Дәүләт Думаһындағы урындарға дәғүә итеүселәр листовкалар тарата, баннерҙар һәм плакаттар ҡуя башланы. Телевидение-радиола, ваҡытлы матбуғатта агитация һайлауға 28 көн ҡалғас башлана. Ул 17 сентябрҙә тамамлана, тип аңлатма бирҙеләр республиканың Үҙәк һайлау комиссияһында. Тауыш биреү көнөндә агитация үткәреү тыйыла.

Теркәлгән партияларҙың барыһы ла түләүһеҙ теле- һәм радиоэфирға, шулай уҡ баҫма майҙандарға хоҡуҡлы. Үҙәк һайлау комиссияһы эфир ваҡытын бүлеүгә йәрәбә ойоштороҙо. Түләүле агитация партия һәм кандидаттарҙың һайлау фондынан финансланырға тейеш.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ӨЛКӘНДӘРГӘ БЕР ҠЫУАНЫС



**Башҡортостанда өлкән йәштәге фатир хужалары күп фатирлы йортта капиталь ремонт өсөн түләү буйынса айлыҡ аҡсалата компенсацияға өҫтәмә аласаҡ. Был хаҡта республика Хөкүмәте Президиумы ултырышында хәбәр иттеләр.**

Әлеге мәлдә эшләмәүсе граждандарҙың айырым категорияларына торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәргә түләү өсөн һәр муниципалитет буйынса торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хаҡының республика стандарттарынан сығып 50 процент күләмендә айлыҡ аҡсалата компенсация бирелә. 2014 йылдың 1 октябренән күп фатирлы йортта дөйөм мөлкәтте капиталь ремонтлауға иғәнә түләү ҙә стандарттарға индерелгән. Шуға ярашлы, граждандарға капиталь ремонтлауға иғәнә түләү өсөн сығымдарҙың 50 проценты кире ҡайтарыла. "Капиталь ремонт өсөн 80 йәше тулған фатир хужаларына 100 процент компенсация түләнә", - тине хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова. Алты ҡатлыға тиклем йорттарҙа йәшәүселәр өсөн айлыҡ аҡсалата компенсацияға өҫтәмә күләме - 85,80, алты ҡаттан юғарыраҡ йорттарҙа йәшәүселәр өсөн 95,70 һум тәшкил итәсәк. Айлыҡ аҡсалата компенсацияға өҫтәмә автоматик рәүештә башҡарыла. Аҡса 2016 йылдың 1 ғинуарынан башлап күсерелә.

## ЙӘРМИНКӘЛӘР БАШЛАНА!



**Урындағы тауар етештереүселәрҙең тауарын һатыу, ҡала халҡын ҡышҡылыҡҡа сифатлы аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү йөҙөтәнән йәрминкәләр үҙенең кәрәклеген күптән раҫланы инде. Был маҡсатта ҡала округы хакимиәте тарафынан барлыҡ мөмкинлектәр тыуҙырылыуын былтыр барлығы 500-ҙән ашыу шундай сауҙа ойошторолоуы ла раҫлай.**

15 августа иһә быйылғы ауыл хужалығы йәрминкәләренә старт бирелде: улар 20 августан 30 октябргә тиклем баш ҡаланың 12 ҙур майҙанында ял көндәрендә уҙғарыласаҡ. Ноябрҙә был сара һауа шарттарынан сығып һәм сауҙа итергә теләүселәр булыу-булмауына ҡарап ойоштороласаҡ.

20-21 августа уҙған быйылғы тәүге йәрминкәлә республиканың 22 районынан 1 миллион 111 меңлек тауар килтерелеп, шул иҫәптән 1,5 тонна картуф һәм йәшелсә, 3,3 тонна бал һатылған да инде.

Ҡышҡы ит йәрминкәләре 3-25 декабрҙә уҙғарыласаҡ. Бынан тыш, Дим, Калинин, Киров, Октябрь, Орджоникидзе райондарында көн һайын 6 фермер йәрминкәһе эшләүен дауам итә.

Ауыл хужалығы тауарҙары һатылған йәрминкәләр менән бер рәттән, тематик йәрминкәләр ҙә ҙур уңыш менән файҙалана. Яҙғыһын "Барыһы ла баҡса өсөн" тип аталғандарына республика еләк питомниктары, крәҫтиән-фермер хужалыҡтары, баҡсасылар, шәхси хужалыҡ тотоусылар йәлеп ителһә, июлдә "Еләк тырызы" йәрминкәһе үтте. Атамаһынан күренеүенсә, унда питомниктар һәм баҡсасылар еләкемеш унышын тәҡдим итте. Быларҙан тыш, 28 сауҙа комплексында үҙ хужалығындағы йәшелсә-емеш, башҡа аҙыҡ-түлек менән һатыу итеү өсөн 900 урын бүленгән, ҡала буйынса 16 майҙанда махсус өҫтәлдәр менән йыһазландырылған һәм япма менән ҡапланған 372 сауҙа урыны бар. Быйыл майҙансыҡтар күләме - 7, сауҙа урындары 70 берәмеккә артҡан.

## МОХТАЖДАРҘЫ ЛА ХӘСТӘРЛӘП...



**Башҡортостанда беренсел торлаҡҡа ипотека ставкаһын 10 процентҡа тиклем субсидиялау һәм кредит финанслауын алған саҡта төҙөлөш ойошмаларына Төбәк фондынан залог биреү тураһында проекттар әҙерләнгән. Ошондай проекттарҙы тормошҡа ашырыу торлаҡ төҙөлөшөнә ҙур этәргес буласаҡ һәм төҙөлөш комплексына кәрәкле ярҙам күрһәтәсәк, тип билдәләнеләр "Госстрой"ҙа.**

Тәүге ярты йыллыҡта Башҡортостанда 19 миллиард һумдан ашыу 13,7 мең ипотека кредиты бирелгән. Был уҙған йылдың ошо уҡ осоронa ҡарағанда 63 процентҡа күберәк. Сәбәбе - процент ставкаһын субсидиялау федераль программаһының ғәмәлгә инеүе. Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе Хәлит Мәхмүтов әйтеүенсә, быйыл тәүге алты айҙа төбәктә 1,154 миллион квадрат метр торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған. Башҡортостан Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында алдынғы позиция биләй. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитовтың ҡушыуы буйынса төбәктә 2025 йылға тиклем эконом класлы йорттар төҙөү программаһы әҙерләнгән. Ул тәү сиратта мохтаждар өсөн тәғәйенләнгән.

✔ *Мәғлүмәтте ятлап алырға кәрәк икән, йоҡлар алдынан тексты бер нисә тапҡыр ҡабатлағыҙ. Йоҡо ваҡытында мейе мәғлүмәтте тәртипкә килтерә һәм уны оҙайлы хәтергә һалып ҡуя.*



ҠОЛАҠ ҺАЛ!

# ТӘНЕҢДЕ АЛДАП ҠАРА ӘЛЕ...

**Ҡайһы ваҡытта уйламаған ысулдар ҙа кәйеф күтәрелеүгә, хәл-торош яҡшырыуға, сәләмәтлек ныҡыуға йоғонто яһап ҡуя. Был хәлде аңлап та, аңлатып та булмай. Ярҙамы тейгән икән, бик һәйбәт, тип ҡыуаныуҙан ары уҙмайбыҙ. Ә түбәндә иһә, киреһенсә, ҡайһы осраҡта ниндәй ысулдың ярҙам итеүе аңлатыла. Ҡулланып ҡарағыҙ, бәлки, ысынлап та шулайҙыр?**



● Тамағығыҙ ныҡ ҡысыта икән, ҡолаҡ япрағына массаж эшләгеҙ. Был ҡолаҡтағы рецепторҙарҙы әүҙемләштереп, тамаҡ ҡысытыуын еңелләштерер.

● Әңгәмәсегеҙҙең ауыҙ эсендә бутҡа бешереүен аңлауы ауыр икән, уға уң ҡолағығыҙ менән борологоҙ, сөнки уң ҡолаҡ аңлайышлыҙы телмәрҙе яҡшы ишетә. Ә тыныс көйҙө һул яҡ ҡолаҡ яҡшы ишетә, сөнки ул көй боролоштарын тиҙ тотоп ала.

● Ҡолығыҙ ойоһа, башығыҙҙы теге-был яҡҡа борғолап, проблеманы хәл итергә мөмкин. Бик йыш ҡул муйын мускулдары ҡыҫылғандан ойой. Хәрәкәтләнеү әүҙемлеге нервыларҙы йомшартырға һәм ҡулдың тойоусанлығын кире ҡайтарырға ярҙам итер.

● Һеҙ уколдан ҡурҡаһығыҙ икән, энә индергән ваҡытта йүтәлләгеҙ. Был күкрәк ситлегендә көсөргәнеш артыуы һәм арҡа елеге шыйыҡсаһы артыуы һөҙөмтәһендә ауыртыуҙы бер ни тиклем кәметер, ауыртыу рецепторҙарының һиҙгерлеген түбәнәйтер.

● Танауығыҙ тоноп, тын алыуы ауырлаша икән, телегеҙ менән аңҡауығыҙға баҫып, бармаҡтарығыҙ менән ҡаш араһына массаж яһағыҙ. Был танау булкәһенең арҡты өлөшөн барлыҡҡа килтергән терәгесте ҡуҙғытыр, һәм 20 секунд эсендә танау тоноуы, ҡул менән һыпырып алғандай, юҡҡа сығыр.

● Төнөн үҙәгегеҙ көйөп, йоҡларға ҡамасаулаһа, һул яҡ ҡабырғағыҙҙа йоҡларға тырышығыҙ. Тәндең бындай торошо ашҡаҙандан аш үткәреү юлына тоҙ кислотаһы бүленеп сығыуын кәмәтә. Йәғни ҡабырғала ятҡанда аш үткәреү юлы һәм ашҡаҙан араһындағы мөйөш кесерәйә, кислотаның ашҡаҙанға үтеүе ауырлаша.

● Тешегеҙ һыҙлаһа, ауыртыуҙы баҫыу өсөн баш бармаҡ һәм һуҡ бармаҡ араһындағы яры буйлап боҙ кубигы йөрөтөү ярҙам итер. Шулай итеп, һеҙ һыҙлаған тештән мейегә ауыртыуҙы баҫыу сигналы ебәрәһегеҙ.

● Бармағығыҙҙы бешерҙегеҙ икән, бешкән урынға икенсе бармағығыҙ менән баҫығыҙ. Был боҙ кисәге кеүек ауыртыныуҙы баҫмаһа ла, күберсеп сығыуҙан ҡотҡарыр.

● Бер аҙ йүгергәндән һуң ҡабырғағыҙҙа ауыртыу тойһағыҙ, көҙҙә ауырлығын һул аяғығыҙға күсереп, тын алығыҙ. Был бауырҙың диафрагмаға баҫымын һәм ҡабырғалағы ауыртыныу тойғоһон кәмәтер.

● Танауығыҙ ҡанаһа, өҫкө ирен кереше артындағы ҡаҙнаға мамыҡ киҫәге һалып, ныҡ итеп баҫығыҙ. Был танау бүлкәтенең алғы өлөшөнә баҫымды күтәреп, ҡан ағыуын кәметер.

● Йөрәгегеҙ ныҡ ҡаға икән, баш бармағығыҙға өрөгөҙ. Был йүгерек нервтың ҡуҙғыуына килтерер һәм йөрәк ҡыҫылыуының йышлығын ҡыҫҡартыр.

● Һеҙ ир кеше һәм мөмкинлек булмаған мәлдә бәҙрәфкә барғығыҙ килә икән, үҙегеҙҙе секс тураһында уйларға мәжбүр итегеҙ. Шунда уҡ түҙеү еңеләйәшер. Сөнки бөгел һәм секс - бер-береһенә ҡаршы килгән билдәләмәләр.

● Һеҙгә һыуға сумып, бассейндың төбөнә төшөү ауыр икән, бер нисә тапҡыр ҡыҫҡа-ҡыҫҡа итеп тын алығыҙ. Был һеҙгә тағы ла 10 секунд бүләк итер. Шуға күрә мейе запаста етерлек күләмдә кислород бар тип уйлаясаҡ һәм һеҙ теләгегеҙҙе тормошҡа ашыра аласаҡһығыҙ.

● Мәғлүмәтте ятлап алырға кәрәк икән, йоҡлар алдынан тексты бер нисә тапҡыр ҡабатлағыҙ. Йоҡо ваҡытында мейе мәғлүмәтте тәртипкә килтерә һәм уны оҙайлы хәтергә һалып ҡуя. Иртән уянғас, тексты иҫләүегеҙгә аптырарһығыҙ.

● Диңгеҙ ауырыуы менән ауырыйһығыҙ икән, аҫҡы палубала тороп, ҡарашығыҙҙы офоҡҡа төбәгеҙ. Был тойғо һәм визуаль кисереш араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡты кәметеп, хәл-торошоғоҙҙо яҡшыртыр. Имбер ҡулланыу ҙа диңгеҙ ауырыуы проблемаһын хәл итергә ярҙам итә.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ғафури районының Сәйетбаба ауылында йәшәүсе атайыбыҙ
**Закир Вәлиулла улы Ишмырҙинды**
70 йәшлек матур юбилейы менән ҡотлайбыҙ.



Тырыш, оло йөрәкле, изге йәнле кеше ул беҙҙең атайыбыҙ. Ҡайҙа ғына эшләһә лә һынатманы, бригадир, ферма мөдире, ауыл Советы рәйесе, "Йондоҙ" исемендәге колхоз рәйесе, партком секретары, ауыл потребкооперация йәмғиәте рәйесе булып эшләп, һәр ваҡыт алдынғылар рәтендә булды. Хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан, атайыбыҙ бөгөн дә йәмәғәт эштәрендә бик әүҙем ҡатнаша. Ауылда үткән төрлө сараларҙың уртаһында ҡайнай, ойоштора. Һәр ваҡыт ғаилә, туғандар, дуҫтар, халҡым, тип янып-көйөп йәшәй. Әсәйебеҙ Рәшиҙә Барый ҡыҙы менән өс ул һәм ике ҡыҙ үҫтереп, уларға юғары белем алырға, тормошта үҙ урындарын табырға ярҙам иттеләр. Хәҙер инде улар 8 ейән-ейәнсәргә һөйөклө олатай һәм өләсәй.

Юбилейың ҡотло булһын, атай! Ғүмер йомғағың һаулыҡҡа, бәхеткә, шатлыҡ-ҡыуаныстарға ғына төрөнөп алға тәгәрәһен. Ҡайғы-хәсрәт күрмәйенсә, ауырыу-һыҙланыу белмәй, әсәйебеҙгә, балаларына терәк булып, уларҙың изгелектәрен күреп, уңыштарына һөйөнөп, оҙон-оҙаҡ тиң ғүмер кисереүеңде теләйбеҙ.

**Изге теләктәр менән ҡыҙҙарың, кейәүҙәрең, улдарың, килендәрең, ейән-ейәнсәрҙәрең.**

* * *

Ишембай районы Һайран ауылында йәшәүсе әсәйебеҙ, өләсәйебеҙ
**ХӨСӘЙЕНОВА Зәлифә Ғариф ҡыҙын**
**80 йәшлек юбилейы** менән ҡотлайбыҙ һәм йөрәк түрене сыҡҡан иң изге теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ.

Артабан да тормош ауырлыҡтарына бирешмәй, сабыр булып, һәр атҡан таңға, килгән яҙҙарға һөҡланып, матур итеп бергә-бергә йәшәйек әле. Яҡты күңелле, ихлас әсәйебеҙгә һаулыҡтың ҡоростай ныҡлығын, ғүмерҙең ҡурай моңондай оҙонон теләйбеҙ.

**Изге теләктәр менән, улы Иршат, килене Ғәлиә, ейән-ейәнсәрҙәре Илдар, Илгиз, Ирина.**

* * *

Август айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙ - **Өфө ҡалаһынан** Зөһрә Ҡотлогилдина, Рәйсә Әсәҙуллина, **Салауат районы** Лағыр ауылынан Земфира Йөнтүрина, **Белорет районы** Инйәр ауылынан Әлфирә Низаметдинова, **Әлшәй районы** Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауылынан Мөнир Шәйхетдинов, **Ғафури районы** Сәйетбаба ауылынан Ғиндулла Шәйәхмәтов, **Красноусол ҡасабаһынан** В. Шәрипова, **Әбйәлил районы** Хәлил ауылынан Гүзәл Ирғәлина, **Ишембай районы** Һайран ауылынан Зәлифә Хөсәйенова, **Стәрлебаш районы** Иҫке Ҡалҡаш ауылынан Рәмзиә Нәзирова, **Дәүләкән районы** Сапай ауылынан Илдүсә Лотфрахманова, **Бишбүләк районы** Ҡаныҡай ауылынан Мәүлиха Солтанованы һәм башҡаларҙы ысын күңелдән ҡотлайбыҙ! **Барығыҙға ла ныҡлы һаулыҡ, бәхетле оҙон ғүмер, гөрләтеп тормош көтөрлөк көс-ҡеүәт, ғаилә именлеге теләйбеҙ!**

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

БЫЛАР ҠЫҘЫҠЛЫ

# Ә ҺИН НИСЕК ЙОҠЛАЙҺЫҢ?



**Психологтар фекеренсә, ниндәй ҡиәфәттә йоҡлауына ҡарап, кешенең характер үҙенсәлектәрен, уның психологик торошон, ҡурҡыуҙарын һәм теләктәрен асыҡларға була.**

Мәсәлән, яралғы кеүек йомарланып йоҡлаусылар яҡлауға мохтаж. Был уларҙың янында хәстәрлекле һәм һаҡлаусы кеше булмауы тураһында һөйләй, бындай ҡиәфәттә йоҡларға яратыусыларҙа йыш ҡына наҙ һәм йылылыҡ етмәй.

Йҙ-үҙенә ныҡ ышанған һәм иғтибар үҙәгендә булырға яратҡан кешеләр арҡаһында йоҡлай. "Батша арҡаһына, ҙур ғилем эйәһе ҡабырғаһына, бай эсенә ятып йоҡлай" тигән боронғо бер мәҡәл иҫегеҙгә төштөмө? Һығымтаһын үҙегеҙ яһағыҙ.

Ә хәҙер эстәренә ятып йоҡлаусылар тураһында бер нисә һүҙ. Бындай кешеләрҙең хәтере тиҙ генә ҡалып барыусан, улар һәр ваҡыт нимә тураһында булһа ла борсолоп йәшәй.

Ҡабырғанда йоҡларға ятаһыңмы? Тимәк, һин - тормошҡа тиҙ яраҡлаша беләһең. Уң ҡабырғаһында йоҡлаусының умыртҡа бағанаһына ауырлыҡ тигеҙ төшә, йөрәккә лә һәйбәт, тән дә ял итә. Һул ҡабырғала, ғалимдар фекеренсә, ижади шәхестәр йоҡлай. Улар башҡалар менән тиҙ уртаҡ тел таба, йәмғиәттәге урындары ла ышаныслы.

Быларҙан тыш, ҡул һәм аяҡ торошо ла күп нәмә тураһында "һөйләй". Арҡаһында йоҡлаусы ҡулдарын баш аҫтына һала икән, тимәк, ул кеше интеллектуаль эшмәкәрлеккә һәләтле һәм ул тормошто "башы аша" ғына ҡабул итә. Ҡулдарығыҙҙы эсегеҙгә һалып йоҡлайһығыҙмы? Үҙегеҙ һиҙмәһәгеҙ ҙә, һеҙ яҡлауға мохтажлыҡ кисерәһегеҙ.

Страус кеүек башығыҙҙы яҫтыҡ менән ҡаплап, йәки тубыкланып йоҡлай башлаһағыҙ, һеҙ тирә-яғығыҙҙағы кешеләрҙе, хәл-ваҡиғаларҙы күрергә теләмәйһегеҙ, уларҙан ҡасырға тырышаһығыҙ.

**Кеше бер төн эсендә кәүҙә торошон уртаса 20, ҡайһы саҡта 30, ә ауырыған йәки берәй нәмә өсөн борсолған мәлдә унан да күберәк үҙгәртә. Шулай ҙа һәр кемдең яратҡан 2-3 төп йоҡлау позаһы була.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Август - Сентябрь (Зөлҡағиҙә - Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 29 (26) дүшәмбе | 4:49 | 6:19 | 13:30 | 18:43 | 20:13 | 21:43 |
| 30 (27) шишәмбе | 4:51 | 6:21 | 13:30 | 18:40 | 20:10 | 21:40 |
| 31 (28) шаршамбы | 4:53 | 6:23 | 13:30 | 18:38 | 20:08 | 21:38 |
| 1 (29) кесе йома | 4:55 | 6:25 | 13:30 | 18:35 | 20:05 | 21:35 |
| 2 (30) йома | 4:57 | 6:27 | 13:30 | 18:33 | 20:03 | 21:33 |
| 3 (1) шәмбе | 4:58 | 6:28 | 13:30 | 18:30 | 20:00 | 21:30 |
| 4 (2) йәкшәмбе | 5:00 | 6:30 | 13:30 | 18:28 | 19:58 | 21:28 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИҒЛАН*

"Киске Өфө" гәзите редакцияһына Өфөнө һәм республиканы яҡшы белгән **тәжрибәле водитель** талап ителә. **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса шылтыратырға.

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылған уҡыусыларыбыҙҙың тәҡдимдәрен һәр һанда күрһәтә киләбеҙ. Бөтәһе лә уҡырға тейешле китаптар исемлеге яйлап үҫә бара. Әлегә ул бына нindәй:**

1. **"Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы**
2. **М. Аҡмуллаһның шиғырҙар йыйынтығы**
3. **Ҡол Ғәли "Йософ ҡиссаһы"**
4. **Ризаитдин Фәхретдин "Нәсихәттәр"**
5. **Ғайса Хөсәйенов "Тормош" һәм "Донъя" парсалар китаптары**
6. **Шәйехзада Бабич, "Ғазазил" поэмаһы, шиғырҙар.**
7. **Зәйнәб Биишева "Кәмһетелгәндәр" трилогияһы**
8. **Һәҙиә Дәүләтшина "Айбикә" повесы**
9. **Әхмәтзәки Вәлиди "Хәтирәләр"**
10. **Һәҙиә Дәүләтшина "Ырғыҙ" романы**

**Киләһе хат авторы - Рәфҡәт Һибәтуллин, Стәрлетамаҡ ҡалаһы:**

- Мин "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә башҡорт әҙәбиәтенең ғорурлығы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең бөтә әҫәрҙәрен тәҡдим итер инем. Яҙыусылар араһында республикабыҙҙа берҙән-бер Социалистик хеҙмәт Геройы, Ленин, Станиславский, С. Юлаев, М. Шолохов исемендәге премиялар лауреаты, тәҫтәнән артыҡ орден менән наградланған, РСФСР Юғары Советының 4-11 саҡырылыштарында депутат булған һәм башҡа бик күп наградалар менән бүләкләнгән, әҫәрҙәре инглиз, ҡытай, литва һәм башҡа донъялағы бик күп телдәргә тәржемә ителгән яҙыусы һәм шағир бит ул.

Мостай Кәримдең поэзияһы - аҫыл һүҙ гәүһәре. Гәүһәрҙе ҡулда әҙ-мәҙ генә әйләндергеләһәң, ул төрлө-төрлө нурҙар һибеп ялтырай башлаған кеүек, Мостай Кәримдең шиғырҙары ла уҡыған һайын яңы уй-фекер тыуҙыра, фәлсәфәүи мәғәнәһен аса. Уның "Аҡ сәстәрем" тигән шиғырынан ике генә юл килтерәм:

*"... Ҡайғы иңә беҙҙән һорап килмәй,*
*Үкенестәрҙе үҙебеҙ эшләйбеҙ... "*

Ошо ике генә шиғри юл кешенең бөтә ғүмерен, бар тормошон эсенә алған. Нәфис һүҙ оҫтаһының былдай шиғырҙары бихисап. Ә бына балаларға ла, ололарға ла аҡыл, рухи аҙыҡ, фәһем бирерлек сәсмә әҫәрҙәре араһынан тәү сиратта "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесын уҡып сығырға тәҡдим итәм. Тормош мәктәбе үткән кешенең үҙ юлында осраҡҡан яҡшы, инсафлы, оло йөрәкле, изге кешеләр тураһында, улар менән бәйле яҡты иҫтәлектәрҙе тасуирлаған әҫәрҙә һәр кемдең күңеленә ятырлыҡ юлдар бар.

**Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына һеҙ ҙә ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендә "Киске Өфө" гәзите төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!**

**Иҫкәрмә: аңлағанһығыҙҙыр, был исемлек башында барыбер ҙә әҙәбиәтебеҙ классиктарының, аҡһаҡалдарының әҫәрҙәре урын алырға тейеш. Мәктәптә уҡыған ул әҫәрҙәр барыбер ҙә күңелегеҙҙә һаҡланалыр - шуларҙы барлайыҡ тәүҙә, ә бөгөнгө быуын яҙыусыларының әҫәрҙәре тураһында саҡ ҡына һуңыраҡ, исемлек аҙағына етә башлағас, мотлаҡ һөйләшербеҙ.**

ВИКТОРИНА

## ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР

**Лира Яҡшыбаеваның "Мөжәүир хәҙрәт" повесы буйынса һорауҙар**

1. **Повеста һүҙ барған Мөжәүир хәҙрәттең фамилияһын атағыҙ.**
а) Сирғәлин;
б) Йәрмөхәмәтов;
в) Сиражетдинов.

2. **Китапта йәш Мөжәүирҙең хикмәтле көсө барлығы кешеләргә нindәй хәлдән һуң асыҡлана?**
б) Мөжәүир ямғыр яуҙырғандан һуң;
б) ул серле төш күргәндән һуң;
в) Зәйнулла ишандың белдереүенән һуң.

**Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап табып, иң беренсе булып яуаптарын әйтә, шуға Лира Яҡшыбаева үҙенең автографы ҡуйылған "Мөжәүир хәҙрәт" китабын бүләк итә. Уҙған уйынға килгәндә, Таңсулпан Ғарипованың автографлы "Бөйрәкәй" китабын Әбйәлил районы Йәнекәй ауылынан Гүзәлиә Нафиҡова отто!**

**Иҙел РӘХИМОВ.**

ЯҢЫ КИТАП

## МӘКТӘП КАЛЕНДАРЫ - ҒАИЛӘ ДУҪЫ




Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте 2017 йылға "Мәктәп календары" тәҡдим итә. Баҫмала башланғыс мәктәп уҡыусыларына ҡыҙыҡлы йомаҡтар, матур шиғырҙар, фәһемле әкиәттәр, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүсе уйындар, сағыу һүрәттәр, тиҫтерҙәр ижады бирелдә. Үсмерҙәргә Башҡортостандың үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһы, компьютер технологиялары хаҡында мауыҡтырғыс мәҡәләләр, донъялағы илдәр һәм халыҡтар тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр, профессиялар хаҡында белешмә, афоризмдар, төрлө һынамыштар, йәштәштәр ижады, психолог кәңәштәре, кроссвордтар, көләмәстәр, йондоҙнамә тәғәйенләнде. Ата-әсәләр календарҙан балалар тәрбиәләү үҙенсәлектәре һәм улар менән ұртаҡ тел табыу ысулдары тураһында белер, халыҡ аҡылы, афоризмдар, ғаилә темаһына арналған мәҡәләләр менән танышыр. Хужабикәләр аш-һыу әҙерләү, бәйләү серҙәрен, файҙалы кәңәштәр табыр. Сағыу итеп биҙәлгән йөкмәткеле баҫма һәр өйҙәң йәме булыр.

**"Мәктәп календары"н нәшриәттең фирма магазинынан (Октябрь проспекты, 2) йәки сайтынан һатып алырға мөмкин. Белешмә өсөн телефон: (347) 246-09-55.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҠЫҘ АҪЫЛЫ - КИММӘТЛЕ,

## ир аҫылы - һиммәтле

Ир булған ир егерме биштә баш булыр, ир була алмаған ир иллелә лә йәш булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кешене ҡурҡытам тип үҙеңдекен түбәләү - ҡурҡаҡтар шөғөлө.

**(Рәшит Шәкүр).**

Башҡаларҙы күрә алмаған кеше гәзәттә үҙен бөйөк тип һанаусан.

**(Л. Вовенарг).**

Аҡылһыҙлыҡ сифаттары булмаған бер генә бөйөк кеше лә юҡ.

**(Аристотель).**

Танылыу йәшлеккә бәрәбәр: бер килә лә башҡа әйләнеп ҡайтмай.

**(О. Петье).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Сәйәхәт ҡылып йөрөгәндә Будда бер ауылда туҡтай. Уға бер һуҡыр кешене алып киләләр. Төркөм эсендәгеләрҙең береһе Буддаға шулай тип мөрәжәғәт итә: "Бына беҙ һиңә "Донъяла яҡтылыҡ юҡ", тип бәхәсләшеүсене алып килдек. Ул был һүҙҙәрҙе бөтә донъяға яңғырата, бар урында шул турала ғына ҡабатлай. Беҙ барыбыҙ ҙа яҡтылыҡ барлығын беләбеҙ, әммә был кешене шуға ышандыра алмайбыҙ. Уның дәлилдәре шул тиклем көслө, ул "Бирегеҙ миңә ул яҡтылыҡты, мин уны тотоп ҡарайым, мин уны еҫкәп йә тәмләп ҡарайым, бик тә булмаһа, яҡтылыҡҡа ҡағылығыҙ, мин ҡағылған тауышты булһа ла ишетәйем", ти. Арыныҡ беҙ был кешенең бәхәстәренән. Һин уны инандырһаң ине яҡтылыҡ барлығына".**

**"Эйе, был һуҡыр кеше хаҡлы, - ти Будда. - Уның өсөн яҡтылыҡ юҡ. Ни өсөн һеҙ әйткәнгә ышанырға тейеш һуң әле ул? Хаҡлыҡ шул: уға табип кәрәк. Һеҙ уны инандырырға тырышырға түгел, ә табипҡа алып барырға тейешһегеҙ". Шунда Будда үҙенең табибын саҡыра. Ә һуҡыр кеше Будданан: "Ә бәхәсте ни эшләтәбеҙ һуң?"- тип һорай. "Ә бәхәсте бер аҙға ҡалдырып торабыҙ, - ти Будда.- Бер аҙ сабыр ит, табип һинең күҙҙәреңде ҡараһын әле..." Табип һуҡырҙың күҙҙәрен ҡарай һәм уны дауалап булыуы, күпмелер ваҡыттан һуң уның күрә башлаясағы тураһында хәбәр итә. "Һин был ауылда ҡалып, был һуҡырҙы дауала. Ул күрә башлағас, минең эргәгә алып кил", ти Будда.**

**Ярты йылдан һуң был һуҡыр кеше шатлыҡлы күҙ йәштәренә буялыған, Будда эргәһенә килеп инә һәм уның аяҡтарына йығыла. "Бына хәҙер беҙ һинең менән бәхәсләшә алабыҙ, - ти Будда. - Элек беҙ һинең менән төрлө донъяла йәшәй инек һәм бәхәсләшә алмай инек. Ә хәҙер беҙ бер донъяла, яҡтылыҡ аҫтында..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 26 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4417
Заказ - 1481/08